ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# КискеӨфө
18-24 апрель (алағарай) 2025
№15 (1159)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреккле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Асылында ғәжәйеп көс**



2

**Ҡотороҡ сире - хәүефле,**
йәки Тағы ла эт-бесәйҙәр хаҡында



6

**Һыйындырыусы һәм берләштереүсе...**
рухи йәнтөйәгебеҙ булған ландшафт тураһында



8-9,15

**Ҡаһармандар хаҡында һөйләйек!**



11

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

***Кеше бөйөклөккә лә менеүсе, ҡурҡыныс түбәнлеккә лә тәгәрәүсе, замандың ҡаты һынауҙарына ла бирешмәүсе йән эйәһе икәнен онотмайыҡ.***

***(Ағинәй һүҙе).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Үҙегеҙ йәшәгән ҡала мөхитен нисек баһалайһығыҙ, йәшәү өсөн уңайлымы ғүмер иткән төйәгебеҙ?

***Илнур ЗАКИРОВ, Өфө фән һәм технология университетының Тәбиғәт һәм кеше институты кафедраһы мөдире, география фәндәре кандидаты, доцент:*** Рәсәй ҡалалары мөхитенең сифатын баһалау методикаһы 2019 йылда уҡ эшләнгәйне инде. Был ысул ыңғай отчет өсөн уйлап сығарылмаған, ә фәнни яҡтан нигеҙләнгән һәм бөгөнгө хәлкүренештәрҙе факттар нигеҙендә асыҡ сағылдыра. Тап шул нигеҙҙә ҡалалар мөхите сифатын яҡшыртыу буйынса кәңәш һәм тәҡдимдәр бирелә. Ҡалаларҙың йәшәү өсөн уңайлылығын баһалау һөҙөмтәләре былтыр һәм быйыл да ошо йәһәттән бик күп эштәр башҡарылыусы Башҡортостан уңыштарын, республикалағы ыңғай үҙгәрештәрҙе асыҡланы. Ҡалаларҙы төҙөкләндереү буйынса Башҡортостанда федераль программалар менән бер рәттән, "Уңайлы ҡала мөхите булдырыу", "Башҡортостан Республикаһы торлағы", "Йәшәү өсөн яраҡһыҙ булған торлаҡ фондын кәметеү" кеүек һәм башҡа төбәк проекттары ла бойомға ашырыла.

Әгәр элегерәк беҙ республикала ҡала территорияларын төҙөкләндереү хаҡында һүҙ алып барғанда башлыса Өфө, Стәрлетамаҡ кеүек ҙур ҡалаларҙы ғына күҙҙә тотһаҡ, хәҙер иһә Башҡортостандың бөтөн ҡалаларында ла шундай уҡ эштәр башҡарыла. Әйтәләр бит, оло йортҡа ни кәрәк, кесеһенә лә шул кәрәк, тип. Был бик дөрөҫ, ғәҙел йүнәлеш. Бөгөн беҙ тап шундай тигеҙ мөнәсәбәттең һөҙөмтәһен күрәбеҙ ҙә инде: республикалағы бөтөн 21 ҡалаға ла йәшәү өсөн уңайлы тигән сифат индексы бирелде. Ысынлап та, республика Башлығы Радий Хәбиров дөрөҫ әйтә: ҡалаларыбыҙҙы тағы ла уңайлыраҡ, төҙөгөрәк һәм матурыраҡ итеп үҙгәртеү йәһәтенән хәл итә торған проблемалар етерлек әле. Ә шулай ҙа РФ Төҙөлөш министрлығы биргән юғары баһа артабанғы уңыштарға дәртләндерә һәм республикабыҙҙың дөрөҫ юлдан барыуын раҫлап тора.

БАЙРАМ МЕНӘН!

# МИЛЛИ КЕЙЕМ - БӨЙӨК БИҘӘК

*Милли кейем - ул халҡымдың*
*Сағылышы, йөҙө.*
*Оҫта ҡулы, көс-көүәте,*
*Сәсәнлеге, һүҙе.*
*Ҡыҙҙарының ғүзәллеге,*
*Ир-атының сәме.*
*Ағинәйҙәр аҡылы ла,*
*Аҡһаҡалдар ғәме.*
*Милли кейем - ул халҡымдың*
*Ҡабатланмаҫ йәме.*
*Бал-ҡорото, сәк-сәгене,*
*Ҡымыҙының тәме.*
*Меңдәр янында таныҡҡан*
*Рух осошо, йәне.*
*Һаҡла, халҡым, үҙ йөҙөңдө,*
*Һис таплама, йәме!*
*Милли кейем - ул халҡымдың*
*Еҙ ҡурайҙар моңо.*
*Уралтауы, Шүлгәнташы,*
*Аҡ ҡылғандар сыңы.*
*Һомайғоштоң ҡөҙрәте лә,*
*Аҡбуҙаттың һыны.*
*Быуаттарҙан ауаз һалған*
*Ата-баба тыны.*
*Киләсәккә бурысыбыҙ -*
*Беҙ һаҡлайыҡ уны.*
*Милли кейем - бөйөк биҙәк,*
*Онотмайыҡ шуны!*

Айзилә МОРТАЕВА.



12+

ӘЙТӘГҮР!

# АСЫЛЫНДА ҒӘЖӘЙЕП КӨС

**ҺОРАУ: Нимә ул һеҙҙең өсөн милли кейем: рух сағылышымы, күңел ихтыяжымы, хәтирәме, әллә мода артынан ҡыуыу ғынамы?**

–Милли кейем минең өсөн ошо аспекттарҙың һәр береһен үҙ эсенә алған ғәжәп күренеш. Ул, башҡа күпселек кейем-һалым кеүек, минең гардеробымдағы әйберҙәр йыйылмаһы ғына түгел, ә мәҙәни мираҫтың ысын хазинаһы, һәр элементы тәрән мәғәнә йөрөткән мәҙәни код.

Милли кейем кейгәндә, ысынлап та, мин ата-бабаларым менән айырым бер бәйләнеш тоям, әйтерһең дә, тәрән һәм рухи бер тылсымға ҡағылам. Бөгөнгө көндә милли кейем, уның элементтарын ҡулланыу, ысынлап та, модаға ныҡлап үтеп инде һәм был - бик яҡшы күренеш. Шулай ҙа шәхсән минә милли кейем, милли орнаменттар һалып тегелгән заманса кейемдәр кейеү әлеге ваҡыт модаһына тура килергә тырышыу, замана модаһын хөрмәт итеү генә түгел, ул йән ихтыяжы, ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған рухи, мәҙәни, донъяуи байлыҡты һаҡлап ҡалыу һәм киләсәк быуындарға тапшырыу теләге лә.

Асылында ғәжәйеп көс ятҡан милли кейем һәр халыҡтың милли асылын һаҡлаусы, теге йәки был халыҡтың ҡыҙы икәнде билдәләгән символ да булып тора. Кейемдең һәр биҙәге, һәр детале үҙ тарихын һөйләй, ата-бабаларыбыҙҙың йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре һәм ышаныуҙары тураһында хәтер һаҡлай. Шулай уҡ милли кейемдең һәр бер сигеүендә, орнаментында һәм төҫтәр гаммаһында тотош дәүерҙәр, ата-бабаларыбыҙҙың донъяға ҡарашы, уларҙың матурлыҡ һәм гармония тураһындағы күҙаллауҙары "йәшеренгән". Ул замандың тере бәйләнеше, ул беҙгә хәҙерге донъяла үҙебеҙҙе юғалтмаҫҡа ярҙам итә.

Милли кейем кейеү - үҙ тамырҙарыңа, халҡыңдың мәҙәниәтенә хөрмәт күрһәтеү тигәнде аңлата. Был модаға эйәреү генә түгел, ә үҙеңдең сығанаҡтарың ҡәҙерләгән һәм был ҡиммәтте киләһе быуындарға тапшырырға теләгән кешенең аңлы һайлауы. Хәҙерге замандa, барыһы ла шул тиклем тиҙ үҙгәргән ваҡытта, милли ке-йем тотороҡлолоҡ маяғына, көс һәм илһам сығанағына әйләнә. Бигерәк тә милли кейемдең үҙенсәлекле образ булдырырға мөмкинлек биреүе әһәмиәтле, ул кешенең индивидуаллеген аса. Был үҙеңдең тамырҙарың менән бәйләнеште юғалтмаҫҡа, халҡыңдың традицияларын һаҡларға һәм үҙең йәшәгән ваҡыт менән үткәнде берләштерергә ярҙам итеүсе сығанаҡ та булып тора.

Шулай итеп, милли кейем - ул халыҡ рухының сағылышы ла, йән ихтыяжы ла, ата-бабалар тураһында хәтер ҙә, үҙеңде күрһәтеү ысулы ла. Ул беҙгә, даими үҙгәреүсән донъяла, үҙебеҙ булып ҡалырға ярҙам итә.

Милли кейем тураһында уйланыуҙы дауам итеп, уның үҙенсәлекле социаль код булыуын да билдәләп үтер инем. Уның буйынса кешенең билдәле бер халыҡҡа ҡарауын ғына түгел, ә уның социаль статусын, ғаилә хәлен, йәшен билдәләргә мөмкин бит инде. Милли кейем теле - теге йәки был этностың һәр вәкиленә аңлайышлы универсаль тел булып тора.



Хәҙерге замандa милли кейем яңы яңғыраш ала. Ул традицион костюмдың элементы ғына түгел, ә классик моделдәрҙең уникаль заманса интерпретацияларын булдырыусы дизайнерҙар өсөн илһам сығанағы ла. Был мәҙәни мираҫты һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә, шул уҡ ваҡытта уны йәш быуын өсөн актуаль итә.

Милли кейем байрамы көндәре айырыуса әһәмиәткә эйә була бара, сөнки кешеләр ата-әсәләренән һәм олатай-өләсәйҙәрҙән мираҫ итеп бирелгән, быуындан-быуынға күсеп килгән иң яҡшы костюмдарын кейә. Был мәлдәрҙә бер-нисә быуындың бергә йыйылып, ҡабатланмаҫ берҙәмлек һәм күсәгилешлек атмосфераһын булдырыуы айырыуса ныҡ һиҙелә һәм күренә. Милли кейем шулай уҡ кешегә үҙенең үҙенсәлекле стилен табырға ярҙам иткән сығанаҡ булып та тора. Хәҙер күптәр үҙҙәренең гардеробында милли кейем элементтары менән тегелгән кейемгә урын биреп, үҙҙәренең эске донъяһын, донъяуи ҡиммәттәрен һәм донъяға ҡарашын сағылдырған ҡабатланмаҫ образ тыуҙыра.

Бынан тыш, милли кейем - глобалләшеү дәүерендә мәҙәни үҙенсәлекте һаҡлауҙың ҡеүәтле ҡоралы. Ул төрлө быуын кешеләренә уртаҡ тел табырға, йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр һәм инаныуҙар тураһында белем бирергә ярҙам итә. Был йәһәттән милли кейем үткән һәм киләсәк араһында күпер булып тора, быуындарҙы берҙәм мәҙәни киңлектә тоташтыра.

Һәм, ниһайәт, милли кейем - үҙ халҡы өсөн илһам һәм ғорурлыҡ сығанағы. Матур милли кейемдәге кешене күргәс, был уның мәҙәниәтенә, традицияларҙы һаҡлап ҡалыу һәм тапшырыу һайлауына хөрмәт тойғоһо тыуҙыра. Милли кейем - был донъяла көн дә булып торған үҙгәрештәргә ҡарамаҫтан, үҙгәрешһеҙ ҡалған нәмәләр барлығын символлаштыра. Шулай итеп, милли кейем - ул рухи, мәҙәни, социаль һәм эстетик башланғыстарҙы берләштергән, халыҡ аҡылының һәм ижадының ысын хазинаһына әйләнгән күп яҡлы күренеш.

**Әминә ҒӘЛИУЛЛИНА,**
**шәхси эшҡыуар.**
**Ағиҙел ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## *Үҙегеҙ йәшәгән ҡала мөхитен нисек баһалайһығыҙ, йәшәү өсөн уңайлымы әүмер иткән төйәгегеҙ?*

***Зөлфирә ХИСМӘТУЛЛИНА, колледж хеҙмәткәре, Туймазы ҡалаһы:*** Уңайлы ҡала мөхите, тигәндән, был хаҡтағы яҡшы яңылыҡты ишеттек: республикабыҙҙың бөтөн 21 ҡалаһына ла, шул иҫәптән,Туймазыға ла, ҡала мөхите буйынса юғары сифат индексы бирелгән. Минең өсөн бигерәк тә шуныһы ғорурлыҡ тыуҙырҙы: тәүге өс лидер ҡалалар иҫәбендәге Өфө һәм Салауат менән бергә Туймазының иң күп балл туплап, беренсе урында килеүе - 262! Икенсе урынға лайыҡ булған Салауат ҡалаһын тотош 10 балға артта ҡалдырғанбыҙ. Ә баш ҡалабыҙ Өфө 251 балл менән - өсөнсө урында. Әлбиттә, ҙур ҡалалар менән уртаса йә бәләкәй ҡаланы сағыштырыуы ҡыйын, шулай ҙа иң күп балл - беҙҙеке!

Беҙҙең ҡала әллә ни ҙур булмаһа ла, бында тиҫтәнән ашыу предприятие бар, эшһеҙлек ҙур мәсьәлә түгел. Ә бит йәшәү өсөн уңайлылыҡ иң тәүҙә ошо йәһәттән ҡаралырға тейештер, тип уйлайым. Кешегә эш, ғаиләһен аҫрарға, балаларҙы уҡытырға даими хеҙмәт хаҡы булһын. Ҡала мөхитенә килгәндә, шулай уҡ халыҡ өсөн уңайлы шарттар күп. Мәҫәлән, беҙҙең ҡала көнбайыш Башҡортостандағы мөһим транспорт узелы булып тора, Туймазы станцияһы аша Силәбе - Мәскәү тимер юлы, шулай уҡ Һамар-Өфө-Силәбе федераль автомагистрале үтә. Илебеҙҙең ҡайһы тарафына телләйһең - ултыр ҙа кит, шуныһы бигерәк яҡшы. Ҡалабыҙҙа әүҙем ял һәм спорт-һауыҡтырыу, мәҙәни-күңел асыу объекттары бар. Ял көндәре балалар менән ҡала үҙәгендәге ҙур паркта булабыҙ, кинотеатрға йөрөйбөҙ йә булмаһа, былтыр ғына төҙөлгән "Ирәмәл" сауҙа-күңел асыу үҙәгенә барып киләбеҙ. "Спартак" стадионында булырға ла яратабыҙ, спорт ярыштарына тамаша ҡылабыҙ. Әйткәндәй, был стадионда яңыраҡ ремонт эштәре башҡарылды: йүгереү юлдары йомшаҡ махсус япма менән ҡапланды. Бындай юлдан бергәләп йүгереү - ғаиләбеҙҙә күптәнге традицияға әйләнде. Кемгә нисектер, ләкин мин үҙемдең тыуған ҡаламды яратам һәм башҡа ерҙә йәшәүҙе күҙ алдыма ла килтермәйем.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығы яҡынлашыуы һәм Башҡортостанда "Үлемһеҙ полк" акцияһын үткәреү хаҡында иҫкә төшөрҙө: "Үлемһеҙ полк" акцияһына әҙерләнә башларға мөмкин. Һәр муниципалитеттан маршрутты, тәртипте билдәләүҙәрен, Эске эштәр министрлығы, прокуратура етәкселәре менән ентекле һөйләшеүҙәр алып барыуҙарын һорайым", - тине Радий Фәрит улы.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ауыл мәктәптәре директорҙары өсөн гранттар тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Указ тексынан күренеүенсә, 2025 йылдың 1 ғинуарынан Башҡортостанда ауыл ерендә эшләгән дөйөм белем биреү ойошмалары етәкселәре өсөн 50 грант булдырылды. Һәр гранттың суммаһы - 690 мең һум. Гранттар тапшырыу тураһында ҡарарҙы республика комиссияһы ҡабул итергә тейеш.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республикаға закондарҙы үтәгән хеҙмәт мигранттары кәрәклеген билдерҙе. "Беҙгә эшсе ҡулдар, мигранттар кәрәк. Әммә беҙҙең ҡануниәтте, йолаларыбыҙҙы һәм ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе намыҫлы үтәгәндәр генә", - тип аңлатма бирҙе төбәк етәксеһе. Хәбиров билдәләүенсә, апрель уртаһына тиклем ул диаспора вәкилдәре менән осрашыу үткәрергә ниәтләй.

✓Бөрө районы хакимиәте башлығы Антон Талалов вазифаһын ҡалдырҙы. Урындағы депутаттар 15 апрелдә уның отставкаһын ҡабул итте. Бөрө районы советынан хәбәр итеүҙәренсә, чиновник үҙ теләге менән вазифаһынан китә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Антон Талалов 2020 йылдың мартында хакимиәт башлығы итеп тәғәйенләнгәйне. Быға саҡлы ул Федераль яза башҡарыу хеҙмәтенең республика идаралығы начальнигы урынбаҫары ине.

✓Учалы районынан Махсус хәрби операция яугиры, "Колош" позывнойлы кесе лейтенант Донецк Халыҡ Республикаһының Запорожье ҡалаһында Украина хәрби көстәре позицияларын штурмға алғанда ҡыйыулыҡ һәм ҡаһарманлыҡ күрһәткән. Командирҙың ебәргән хатынан Билдәле булыуынса, "Колош"тоң төркөмө дошмандың ҡаты уты аҫтына эләккән. Ауыр шарттарға ҡарамаҫтан, башҡорт яугирының тәүәккәл эш итеүе штурмовиктарға үҙҙәренең рухын күтәрергә, дошман позицияларын баҫып алырға һәм тотоп ҡалырға, контрһөжүмгә юл ҡуймаҫҡа ярҙам иткән.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## *Үҙегеҙ йәшәгән ҡала мөхитен нисек баһалайһығыҙ, йәшәү өсөн уңайлымы ғүмер иткән төйәгегеҙ?*

***Рамаҙан МӨХӘТДИНОВ, хеҙмәт ветераны, Өфө ҡалаһы:*** Гәрсә баш ҡалабыҙҙа тыуып-үҫмәһәм дә, хәҙер 50 йылдан ашыу тау башында балҡып ултырған ошо төйәккә ерегеп, үҙемде "төп өфөлө" тип әйтергә лә хаҡым барҙыр, тимен. Баш ҡалабыҙ мине бәләкәйҙән үҙенә тартты. Шуға ла ауылымда мәктәпте тамамлағас, мин Өфөлә вуз тамамлап, ошонда эшләй башланым, ғаилә ҡорҙом, фатир алдым, балалар үҫтерҙем... Минең өсөн иң уңай, уҡыу, эшләү һәм йәшәү йәһәтенән бөтөн шарттары булған ҡала тормошо бик оҡшай ине. Балалар баҡсаһы тиһеңме, мәктәпме - бер ниндәй проблема булманы, эшләгән ойошманың профсоюз комитеты шундуҡ мәсьәләне хәл итә ине, был учреждениеларҙа бөгөнгө кеүек урындар юҡ тигәндә лә белмәнек. Ул йылдарҙан алып, баш ҡалабыҙ көндән-көн үҫте, киңәйҙе, заманса күренеш алып, мегаполис тип йөрөтөлә башланы хатта. Ысынлап та, бөгөн уны танырлыҡ та түгел. Социаль-мәҙәни объекттар менән бер үк ваҡытта торлаҡ йорттар бик күп төҙөлә, баш ҡалала электән даими йәшәүселәр генә түгел, ситтән килеүселәр, үҙебеҙҙең республика ауылдары халҡы ла хатта фатир һатып алып, өфөлө булып киттеләр. Баш ҡалала йәшәүе уңайлы булғанға күрә лә Өфөгә йәбешеп яталарҙыр, моғайын. **Торлаҡ төҙөләүе һәйбәт, әлбиттә, ләкин һуңғы йылдарҙа фәҡәт күккә олғашҡан 20-нән ашыу ҡатлы бейек йорттар төҙөләүе миңә бик оҡшап етмәй, сөнки геолог һәм башҡа белгестәр әйтә килеүенсә, Өфө, ысынлап та, тау башында, карст бушлыҡтары өҫтөндә ултыра. Төҙөүселәргә аҡса кәрәк, аңлашыла, ләкин иң тәүҙә кеше ғүмерҙәре хәүефһеҙлеге хаҡында ҡайғыртһаҡ ине.**



Республика етәкселеге һуңғы йылдарҙа Өфө ҡалаһын төҙөкләндереүгә ҙур иғтибар бирә, йорт ихаталары яңыра, балалар майҙансыҡтары төҙөлә. Ошо көндәрҙә генә яңылыҡтарҙан ишетеп белеүемсә, беҙҙең Өфө ҡалаһы һәм республиканың башҡа бөтөн ҡалалары ла былтырғы йыл йомғаҡтары буйынса йәшәү өсөн уңайлы мөхит булдырылған ҡалалар тип танылған. Уңайлы йәшәү мөхите индексы илдәге 1 116 ҡала араһында төҙөкләндереү, хәүефһеҙлек, йәмәғәт транспорты, юлдар - бөтәһе 36 күрһәткес буйынса иҫәпләнә икән. Өфө ҡалаһы ошо йәһәттән Рәсәйҙәге миллионлы ҡалалар араһында иң яҡшы биш ҡала иҫәбендә, тип әйтелә был яңылыҡта. Минең уйымса, бында дөрөҫлөк бар, әлбиттә. Бындай оло баһа һәр өфөлө өсөн ҙур ғорурлыҡ ул. **Тик шулай ҙа был баһаны киләсәккә "аванс" рәүешендәрәк ҡабул итеү кәрәктер, тимен, сөнки баш ҡалабыҙҙа йәшәү уңайлығы өсөн мөһим роль уйнаусы йәмәғәт транспорты менән юлдар төҙөклөгө буйынса эшләргә лә, эшләргә кәрәк әле.** Әле бына ҡала халҡына ял итеү, спорт менән шөғөлләнеү һәм мәҙәни сараларға йөрөү йәһәтенән, ысынлап та, заманса һәм уңайлы шарттар тыуҙырылған. Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров үҙе лә уңыштар менән бергә киләсәктә башҡарылаһы эштәрҙең дә әле күп булыуын билдәләне бит.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# "ТАЙГА" ДРОНДАРҘЫ ҠЫРА

**Бер күргән - белеш, ике күргән - таныш, күп күргән - дуҫ, тиҙәрме әле? Шуның кеүек, күҙ тейә күрмәһен, АҠШ президентының махсус илсеһе Стивен Уиткофф йышланы түгелме беҙгә? Алыҫ араны яҡын итеп, океан аша килә лә төшә. Әле уның 11 апрелдәге визиты - ике ай эсендә Рәсәйгә өсөнсө тапҡыр килеүе.**

РФ Президенты Владимир Путин был юлы махсус илсене төньяҡ баш ҡалабыҙ Санкт-Петербургта ҡабул итте, сөнки унда РФ Хәрбиҙиңгеҙ флоты үҫешенә бәйле кәңәшмә үткәргәйне. Шунан һуң Путин менән Уиткоффтың ябыҡ режимда осрашыуы булып үтте, һөйләшеү 4 сәғәт ярым буйына барҙы. Украина көрсөгөн көйләү был һөйләшеүҙәрҙең төп темаһы булып торҙо, ә бына башҡа темалар буйынса мәғлүмәттәр асылманы. Рәсәй нигеҙҙә тыныслыҡ килешеүҙәренә әҙер, ләкин өҫтәмә хәлдәр буйынса фекер алышмайынса тороп, хәрби хәрәкәттәрҙе туҡтатыу мөмкин түгел. Мәскәүҙең төп талаптары күптән билдәле, ул хаҡта Владимир Путин бер нисә тапҡыр ҡабатлап әйтә килә.

1. Конфликт туҡтатыла торған сик аныҡ билдәләнергә тейеш, ләкин ул көн дә үҙгәреп тора: Рәсәй ғәскәрҙәре һөжүмде дауам итергә мәжбүр.

2.Тыныслыҡ килешеүенең боҙолоу ихтималлығы кем тарафынан һәм нисек күҙәтеләсәк. Был осраҡта Рәсәй менән АҠШ-тың реакцияһы нисек буласаҡ?

3. Хәрби хәрәкәттәрҙе туҡтатыу Киев өсөн хәл алыу ихтималлығы булыу менән Кремль риза түгел. Шуның өсөн дә Украинала мобилизацияны һәм уны ҡорал менән тәьмин итеүҙе туҡтатырға кәрәк.

4. Рәсәй ғәскәрҙәре тарафынан ҡамауға алынған Украина Ҡораллы көстәре частары яҙмышын хәл итеү ҙә мотлаҡ.

Дөрөҫ, Украина конфликты туҡтатылған хәлдә, Европа илдәре, атап әйткәндә, Британия, Франция, Литва менән Эстонияның Украинаға ниндәйҙер "тыныслыҡ көстәре" индереү хаҡында ниәттәре килешеүҙе тотҡарлаясаҡ 5-се пункт булып тора.

Тағы ла бер мөһим мәсьәлә - Рәсәй менән АҠШ тыныслыҡ килешеүе төҙөүгә ни тиклем яҡын һуң? Трамп, эйе, ҡабалана, сөнки 30 апрелдә уның икенсе тапҡырға президент вазифаһын башҡара башлауына 100 көн тула, ә уның һайлау алды программаһында вәғәҙә иткән ниәттәренең береһе лә әле үтәлмәгән. Өҫтәүенә, ысын булһа, Трамптың Нобель тыныслыҡ премияһына өмөт итеүе хаҡында ла имеш-мимеш таратыла. Һәр хәлдә, Уиткоффтың Рәсәйгә тағы бер эш визитын Украинала утты туҡтатыуға һәм тыныс килешеүгә табан тағы бер аҙым һаналды, тип баһаланылар Аҡ йортта. Әйткәндәй, Дональд Трамп һәм АҠШ-тың яңы хакимиәте вәкилдәре Европа илдәре лидерҙары һәм Джо Байдендан айырмалы, бер ваҡытта ла "Украинала Рәсәй агрессияһы" тигән нахаҡ яла белдергәне юҡ, сөнки АҠШ тарафы Украина конфликтының тәү сығанаҡтарҙы һәм сәбәптәрен төшөнә башланы. Кремлдең матбуғат секретары Дмитрий Песков әйтеүенсә, Владимир Путин менән Дональд Трамптың ҡасан да булһа күҙмә-күҙ осрашып һөйләшәсәгенә шик юҡ.

Трамп хакимиәте бер үк ваҡытта Ирандың ядро программаһын тотҡарлау һәм Яҡын Көнсығышта хәрби әүҙемлекте туҡтатыу буйынса ла һөйләшеүҙәр алып бара. Ирандың верховный лидеры Али Хаменеи был һөйләшеүҙәргә ризалыҡ бирергә мәжбүр булды, сөнки кире осраҡта АҠШ һәм Израиль менән хәрби бәрелештәр башланыу ихтималлығы бар, ә Иран бөгөнгө көндә тәрән көрсөктә: риал осһоҙланыуы, илдә электр энергияһы һәм һыу наҡыҫлығы, юғары инфляция һәм эске тотороҡһоҙлоҡ шарттарында Ислам Республикаһы хәрби янауҙарҙы ҡабул итергә әҙер түгеллеген таный. Трамптың белдереүенсә, АҠШ илселәре менән Иран вәкиллеге һөйләшеүҙәре ҡәнәғәтләнерлек кимәлдә бара.

Был ваҡытта Махсус хәрби операция картаһы нисек күрһәтә? Курск йүнәлешендә 500-ҙән ашыу украин һалдаты үҙ теләге менән ҡорал һалды һәм пленға бирелде. Яңылыҡтар Рәсәй агентлығы белдереүенсә, Украина Ҡоралы көстәре Курск өлкәһенең Горналь тораҡ пунктын тотоп тороу өсөн бөтөн көстәрен ташлай, дрондарҙың төрлө төрҙәре менән эш итә. "Баба Яга (Мәскәй әбей)" гексакоптерын дошман ғәскәре төндә генә осора торған булһа, хәҙер тәүлек әйләнәһенә ебәрә. РФ Оборона министрлығы хәбәр итеүенсә, үткән тәүлектәрҙә беҙҙең "Север" төркөмө Горналь һәм Олешня пункттарында Украина бригадаларына етди генә зыяндар килтерҙе. Ростов өлкәһенең дүрт районында дошмандың пилотһыҙ осоусы шартлатҡыстары бәреп төшөрөлдө. 12 апрелдә Киевтағы дрондар етештереүсе "Антонов" заводына, "Электр механикаһы фәнни-тикшеренеү институты"на ут асылды, объекттар етди зыянланды.

Ниһайәт, беҙҙең Оборона министрлығы дошмандың үлем сәсеүсе әрһеҙ себен кеүек ошо дрондарына ҡаршы берәй сара табырмы? Билдәле хәрби эксперт, "Милли оборона" журналының баш мөхәррире Игорь Коротченко Яңылыҡтар Рәсәй агентлығына һөйләүенсә, яңыртып ҡоролған ЗУ-23 зенит ҡоролмаһы украин дрондарына ҡаршы һәҙемтәле сара булмаҡсы. Ләкин беҙҙең егеттәр яңы ҡоралдың ҡулланыуға индерелгәнен көтөп ултырмай, уларҙың үҙ көрәш ысулдары бар, сөнки дошман көн һайын беҙҙең тарафҡа 150-нән 200-гә тиклем FPV осора һәм был ошо һуғыштың төп үҙенсәлегенә әүерелде лә инде. Яңылыҡтар агентлығы дошман дрондарын эҙәрләкләүсе РЭБ (радиоэлектрон көрәш) операторы "Тайга" ҡушаматлы Рәсәй яугирының нисек итеп украин дрондарын юҡ итеүе хаҡында һөйләй.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостандың йыйылма командаһы етенсе тапҡыр пауэрлифтинг ил чемпионатында еңеү яуланы. Шәхси сығыштарҙа республикабыҙҙың ауыр атлеттары 15 миҙал алды, шуларҙың 7-һе - алтын, тип хәбәр итте республика хөкүмәте вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов. Ярыштар Екатеринбургта үтте. Рәсәй чемпионы исемен яҡлаусы Александр Сыкменев, Ян һәм Станислав Урусов сентябрҙә Гонконгта Азия чемпионатында ҡатнашыу өсөн Рәсәй йыйылма командаһы составына инде.

✔"Май айында мәктәптәрҙә "Ҡыңғырау урынына музыка" проекты сиктәрендә ҡыңғырау урынына һуғыш йылдары йырҙары яңғырай", - тип хәбәр итә Рәсәйҙең мәғариф министры Сергей Кравцов. 5 майҙа илдең бөтә мәктәптәрендә Бөйөк Ватан һуғышы тураһында "Мөһим һөйләшеү" дәресе үткәрелә, мәктәптәрҙә һәм колледждарҙа "Үлемһеҙ полк" акцияһы ойошторола, тип тә өҫтәне министр. "Былтыр акцияла 10 миллион уҡыусы ҡатнашты. Быйыл уларҙың һаны артыр тип ышанабыҙ", - тине ул.

✔Учалы районында урынлашҡан Илтабан һыуһаҡлағысына 50-гә яҡын аҡҡош осоп килгән. "Ирәмәл" тәбиғәт паркы хеҙмәткәре Артур Мирсәйетов төшөргән видеола йыйылы яҡтан ҡайтҡан ҡоштарҙың үҙҙәрен яҡшы тойоуы һәм һыу яҡтылығында аҙыҡ эҙләүе күренә. Бынан алда "Асылыкүл" тәбиғәт паркына аҡҡоштарҙың килеүе хаҡында хәбәр ителгәйне.

✔Башҡортостан спортсыһы, самбосы Әлиә Мөхәмәтйәноваға "Халыҡ-ара кластағы спорт мастеры" тигән маҡтаулы исем бирелде. Әлиә - самбо буйынса донъя беренселеге еңеүсеһе, күп тапҡыр Рәсәй беренселеге чемпионы. Әлиә Мөхәмәтйәнова 2024 йыл йомғаҡтары буйынса донъяла иң көслө 10 самбосы иҫәбенә инде. Ул Рәсәйҙең абсолют чемпионы һәм 50 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһындағы ҡыҙҙар араһында донъя рейтингында 9-сы урынды биләй.

✔ Бөрйән районында "Шүлгәнташ" музей комплексына һәм "Морат туғай" туристик комплексына газ үткәреү башланды. Әлеге ваҡытта юлдың асфальт япмаһы аҫтында газ торбалары һалыу эштәре алып барыла, тип хәбәр иттеләр "Шүлгәнташ"тың рәсми төркөмөндә. Бынан тыш, быйыл көҙ музей комплексы менән бергә яҡын-тирәләге Әтек, Мәндәғол, Кейекбай, Ҡотан, Ғәзелгәрәй һәм Ырғыҙлы ауылдары ла зәңгәр яғыулыҡҡа тоташтырыла. Ҡасаба-ара газ үткәргес алыҫ ауылдарҙы район үҙәге менән тоташтырған да инде, хәҙер ауылдарҙа эштәр бара.

ҠЫҪҠАСА

# ҠАҒЫҘ ЭШЕНӘН БУШАН...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә үткән "Юғарыға ос!" етенсе мәктәп мәғарифы форумында педагогтарға бюрократик йөкләмәне кәметеү темаһына айырым туҡталды.** Бөгөн мәктәптә төрлө отчеттар яҙыуға бәйле ҡағыҙ эше һәм башҡалар уҡытыусының бик күп ваҡытын ала. Былар барыһы ла белем биреү процесын ҡатмарлаштыра, ә иң мөһиме, уҡытыусының төп миссияһына - баланы тәрбиәләүгә һәм уҡытыуға ҡамасаулай. "Шуға бәйле, ҡанугиәт нормаларын үтәүҙе иҫәпкә алып, уҡытыусыларға бюрократик йөкләмәне кәметеү буйынса берҙәм талаптар әҙерләргә кәрәк, тип иҫәпләйем. Отчеттарҙы һәм документтарҙы ҡабатлауҙы, уҡыу ваҡытында уҡытыусыларҙы һәм уҡыусыларҙы төрлө сараларға йәлеп итеүҙе, балаларҙы иҫәпкә алыу өсөн фатирҙар буйлап йөрөүҙе туҡтатырға кәрәк", - тине Радий Хәбиров.

✓ **Башҡортостан Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығын билдәләргә әҙерләнә. Ошо байрам алдынан республикала һәйкәлдәр, мемориаль комплекстар, стелаларҙы ремонтлайҙар һәм тәртипкә килтерәләр.** Был турала Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостандың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова хәбәр итте. Әлеге ваҡытта республиканың барлыҡ торлаҡ пункттарында тиерлек ошондай мемориалдар һәм һәйкәлдәр бар, уларҙың һаны - 4 меңдән ашыуыраҡ. Республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев һүҙҙәренсә, уларҙың барыһы ла тәртипкә килтерелә. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров байрамға әҙерлек барышында башҡарылған эштәр тураһында доклад әҙерләргә ҡушты. Бынан алдараҡ Еңеү көнө алдынан Өфөлә хәрби техника күргәҙмәләренең асыласағы тураһында хәбәр ителгәйне.

✓ **Башҡортостанда йәшәүселәр "Ҡыҙыл ҡәнәфер" акцияһына ҡушылырға мөмкин. Ветерандарға ярҙам акцияһы 10 апрелдә башланды һәм 22 июнгә тиклем дауам итә.** "Ҡыҙыл ҡәнәфер" - Рәсәйҙә иң ҙур хәйриә акцияларының береһе. Уны "Быуындар хәтере" хәйриә фонды үткәрә. Йыйылған аҡса Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына медицина ярҙамы күрһәтеүгә йүнәлтелә. Быйыл "Ҡыҙыл ҡәнәфер"гә илдең 83 төбәге ҡушыла. Улар иҫәбендә Башҡортостан да бар. Апрелдән июнгә тиклем ҡалаларҙың төп урамдарында һәм күләмле сараларҙа ветерандарға ярҙам итеү өсөн иғәнә йыйылар. Теләгән һәр кем взносты ҡулаҡса менән бирергә йәки QR-код ярҙамында күсерергә мөмкин. Акцияла ҡатнашыусыларға ҡыҙыл ҡәнәфер рәүешендәге значок тапшырыла. "Ҡыҙыл ҡәнәфер" акцияһы 2016 йылдан алып үткәрелә. Былтыр акцияла Рәсәйҙән 79 төбәгенән ирекмәндәр ҡатнашҡан. Партнерҙар менән бергә улар 1,5 миллионға яҡын значок таратҡан.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ХАЛЫҠҠА ИҢ ЯҠЫНДАР



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың муниципаль хеҙмәткәрҙәренә дәүләт наградалары тапшырҙы.**

"Һеҙ көн һайын муниципалитеттар тормошон ойоштораһығыҙ, ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итәһегеҙ. Кешеләрҙең һорауҙарына яуап бирәһегеҙ, уларҙың файҙалы башланғыстарын хуплайһығыҙ. Һеҙҙең эшегеҙ профессионализм, киң компетенциялар ғына түгел, ә кешеләргә иғтибар, юғары яуаплылыҡ талап итә. Белеүегеҙсә, быйыл март айында ҡабул ителгән урындағы үҙидараны ойоштороуҙың дөйөм принциптары тураһында федераль закон төбәктәргә муниципаль властың структураһын үҙаллы билдәләү хоҡуғын бирә. Республикабыҙҙа ауыл һәм ҡала биләмәләре менән ике кимәлле муниципаль идара итеү системаһы үҙенең һөҙөмтәлелеген раҫланы. Шуға күрә беҙ ғәмәлдәге системаны һаҡлап ҡалырға, иң яҡшы традицияларҙы дауам итергә булдыҡ. Киләсәктә лә дөйөм тырышлыҡ менән муниципаль хеҙмәттәрҙең асыҡлығын тәьмин итербеҙ, торлаҡ пункттарҙың инфраструктураһын нығытырбыҙ, ижтимағи һәм социаль тоторөҡлоҡто һаҡларбыҙ тип ышанам", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, тап муниципаль хеҙмәткәрҙәр стратегияларҙы һәм программаларҙы реаль эштәргә әүерелдерә - таҙалыҡты һәм тәртипте һаҡлай, урамдарҙы һәм ихаталарҙы, балалар һәм спорт майҙансыҡтарын төҙөкләндерә, граждандар һәм власть органдары араһында тығыҙ бәйләнеш булдыра. Радий Хәбиров муниципаль хеҙмәткәрҙәрҙең Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам күрһәтеү йәһәтенән эшен баһаланы.

# ҠАЛА СИТЕНДӘГЕ АУЫЛ

**Башҡортостан ауыл ипотекаһы биреү буйынса Рәсәй төбәктәре исемлегендә тәүге урында тора. Был хаҡта Росреестрҙың республика идаралығынан хәбәр иттеләр.**

Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, 2020 йылдың ғинуарынан Росреестрҙың республика буйынса идаралығында ауыл ипотекаһын алыу тураһында 5833 килешеү теркәлгән. Шулай итеп, Башҡортостан илдең ошо программа менән әүҙем файҙаланған төбәктәре араһында беренсе урында тора.

- Башлыса "Ауыл ипотекаһы" дәүләт программаһы буйынса икенсел баҙарҙа күсемһеҙ милек һәм ер участкаһы булған йорттар һатып алына. Төҙөлөп ятҡан торлаҡ һирәгерәк һатыла. Беҙҙең ведомство дәүләт программалары буйынса ипотеканы теркәү процесын оптималләштереүгә айырыуса иғтибар бүлә, бындай килешеүҙәр ҡыҫҡа ваҡытта ҡарала. Бынан тыш, беҙ ғариза биреүселәргә һәр яҡлап консультация ярҙамы күрһәтәбеҙ, - тип һөйләнө Росреестрҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Петр Клец.

Уның әйтеүенсә, ошо дәүләт программаһы буйынса күбеһенсә ҡалала йәшәүселәр ҡала ситендә йорттар һатып ала. Заемсыларҙы түбән процент ставкаһы, шулай уҡ ҡала ситендәге торлаҡ хаҡының түбәнерәк булыуы йәлеп итә. Башҡортостан Росреестры мәғлүмәттәре буйынса, Иглин, Өфө, Стәрлетамаҡ, Ҡырмыҫҡалы, Архангел һәм Шишмә районҙарында ауыл ипотекаһы менән торлаҡ алыусылар күп.

# СПОРТТЫҢ ЮЛ БАШЫ

**Башҡортостандың "Динамо" йәмғиәтенең йөҙ йыллыҡ юбилейы - республиканың спорт йәмәғәтселеге өсөн мөһим ваҡиға. "Динамо"ның бер быуатлыҡ юбилейына арналған тантаналы йыйылышта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо хаҡта белдерҙе.**

1925 йылда Эске эштәр халыҡ комиссариатының физкультура түңәрәктәре буларaҡ эшләй башлаған йәмғиәт бөгөн тиҫтәләгән мең спортсыны һәм төбәктең көс структураларын берләштерә. "Динамо" саңғы ярыштарына, еңел атлетикаға, теннисҡа, гимнастикаға, бильярдҡа һәм башҡа популяр спорт төрҙәренә нигеҙ һалды. Уның тарихы ил яҙмышы менән тығыҙ бәйле. Һуғыш йылдарында инструкторҙар 75 мең яугир әҙерләнә, һуғыштан һуңғы осорҙа йәмғиәт ҡала спортын һәм гимнастиканы үҫтереү үҙәгенә әүерелә. "Динамо" стадионы - республикабыҙ ғорурлығы. 1959 йылда бында боҙ юлдарында беренсе халыҡ-ара мотоуҙыштар ойошторолa, улар Өфөнө трек мотоспортының баш ҡалаһына әйләндерә. Йәмғиәт республикала туплы хоккейға, ҙур футболға старт бирҙе (2009-2015 йылдарҙа "Динамо" стадионы "Өфө" футбол клубы аренаһы ине). Бөгөн уның заманса тирҙары, бассейны һәм аренаһы төрлө кимәлдәге абруйлы ярыштарҙы ҡабул итә. Һеҙҙең спортсылар - олимпия призерҙары, донъя һәм Европа чемпиондары. Бер нисә исемде әйтеп китәм. Биатлонсылар Дмитрий Соколов, Павел Мөслимов, Максим Чудов, бобслейсы Алексей Селиверстов, шорт-трексы Семен Елистратов. Һуңғы ике йылда йәмғиәт яңы кимәлгә сыҡты, "Динамо-Урал" волейбол клубын һәм "Өфө" баскетбол клубын ойоштороҙо", - тине Радий Хәбиров.

# СӘЛӘМӘТЛЕК ПОЕЗДАРЫ...

**Быйыл "Сәләмәтлек поездары"ның сираттағы эш миҙгеле 21 апрелдә башлана, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан. Күсмә медицина комплекстары республика райондарына сыға. Йәмғеһе алты маршрут ойошторолa.**

Өфө маршрутына ун район ҡарай: Иглин, Шишмә, Архангел, Ҡырмыҫҡалы, Благовещен, Благовар, Кушнаренко, Саҡмағош, Нуриман һәм Өфө районҙары.

Дыуан маршрутына биш район инган: Дыуан, Мәсетле, Балаҡатай, Ҡыйғы һәм Салауат районҙары.

Нефтекама маршрутында 12 район: Илеш, Дүртөйлө, Ҡалтасы, Тәтешле, Яңауыл, Краснокама, Борай, Балтас, Асҡын, Ҡариҙел, Мишкә, Бөрө районҙары һәм Нефтекама ҡала округы.

Октябрьский маршрутына 9 район ҡарай: Туймазы, Бүздәк, Баҡалы, Йәрмәкәй, Бәләбәй, Бишбүләк, Миәкә, Дәүләкән һәм Шаран районҙары.

Стәрлетамаҡ маршрутында ун бер район: Ауырғазы, Ғафури, Әлшәй, Ишембай, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Мәләүез, Көйөргәҙе, Федоровка, Күгәрсен һәм Ейәнсура районҙары.

Белорет маршрутына ете район ингән: Белорет, Учалы, Әбйәлил, Бөрйән, Баймаҡ, Йылайыр һәм Хәйбулла районҙары.

"Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса ойошторолa. 2025 йылда ул етенсе тапҡыр үткәрелә. Хәбәр иткәнебеҙсә, 2024 йылда "Сәләмәтлек поездары" 170 меңгә яҡын кешене ҡабул иткән һәм 4 меңдән ашыу етди сирҙе асыҡлаған.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ 2025 йылда Башҡортостанда биш ҡасаба-ара газ үткәргес төҙөлә. Был дүрт районда 22 ауылды газ менән тәьмин итергә мөмкинлек бирә. Социаль программа сиктәрендә ағымдағы йылда 459,5 саҡрым газ үткәргес төҙөү планлаштырыла. Был иһә 14 мең йортто газға тоташтырырға мөмкин тигән һүҙ. Программа ярҙамында бөтәһе 57,4 мең ғаилә газ менән файҙаланыу мөмкинлегенә эйә була. Башҡортостан ошо йүнәлештә алдынғы урындарҙы биләй.

✓ Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы ҡарамағындағы Йәштәр йәмәғәт палатаһы рәйесе Зарина Ғәзизова республика парламенты рәйесенең граждандар йәмғиәте институттары менән үҙ-ара эш итеү буйынса кәңәшсеһе итеп тәғәйенләнде. Яңы тәғәйенләү парламенттың йәмәғәт институттары менән үҙ-ара эш итеүен көсәйтеү зарурлығы менән бәйле. Зарина Ғәзизованың йәштәрҙе төбәктең социаль-сәйәси тормошона йәлеп итеү һәм ирекмәнлекте үҫтереү тәжрибәһе бар.

✓ Әлеге ваҡытта Өфөнән Мәскәүгә көн һайын 16-ға яҡын авиарейс, Санкт-Петербургҡа иһә көн дә 7 рейс башҡарыла. Йәйгеһен Рәсәй курорттарына (Сочи, Минеральные Воды, Махачкала) көн һайын 7-шәр рейс башҡарыу планлаштырыла. Бынан тыш, популяр йүнәлештәргә (Төркиә, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, Ҡытай, Таиланд) көн һайын 7-9 рейс башҡарыла. Быйыл яңы йүнәлештәр ҙә асылды: Таулы Алтай, Санья (Ҡытай), Тбилиси һәм башҡалар. Марттан аэропорт йәйге расписаниеға күсте.

✓ Федоровка районынан йәш фермерҙар Ләйсән һәм Урал Мостафиндар аттар үрсетә. Былтыр уларҙың крәҫтиән-фермер хужалығы "Агростартап" республика программаһында ҡатнашып, 1,945 миллион һумлыҡ грантҡа лайыҡ булған. Улар эшкә йыйған аҡсаларын да өҫтәп, 70 ат һатып алған. Фермерҙар ҡымыҙ һәм колбаса етештерә башларға ниәтләй. Мостафиндар үҙ эшен артабан үҫтереү өсөн "Ғаилә фермаһы" программаһында ҡатнашырға әҙерләнә. Эшҡыуарҙар техника һатып алырға һәм малсылыҡ бинаһы төҙөргә йыйына.

✓ Республикала тағы ике яғыулыҡ ҡойоу станцияһы - бензин һәм газ станциялары төҙөлә. Ике бизнес-план да Өҫтөнлөклө инвестиция проекттары исемлегенә индерелгән. Хәбәр итеүҙәренсә, сервис комплексы булған АЗС Октябрьский ҡалаһында М-5 "Урал" трассаһында барлыҡҡа килә. "Газагропром" компанияһы Дыуан районы үҙәге Мәсәғүттә АГНКС төҙөргә йыйына. Өҫтөнлөклөләр исемлегенә индереү инвесторҙарға дәүләт ярҙамы алырға мөмкинлек бирә.

БАШ ҠАЛАМ

# МАТУРЛЫҠ ЯНЫНДА...

## ямаҡлыҡ та бар



**Өфөбөҙҙөң көндән-көн ыңғай яҡҡа үҙгәреүен һәр өфөлө, ҡала ҡунаҡтары күрә йөрөйҙөр.**

Миңә айырыуса ҡала һәм республика етәкселегенең ил һәм халыҡ-ара кимәлендә уҙғарылған төрлө акцияларға әүҙем ҡушылыуы, ҡала халҡын да йәлеп итеүе оҡшай. Мәҫәлән, "Йәшел Башҡортостан", "Йәшәүгә табан 10 мең аҙым", "Велосипедта йөрөү" һәм башҡа акция, проекттар гөрләп үтеүе менән бер рәттән, файҙалы ла, ҡаланы ла тик яҡшы яҡҡа үҙгәртә.

Элегерәк яҙ етеү менән Өфө урамдары, бигерәк тә Октябрь проспекты буйынан-буйына сәскәгә күмелә ине. Ләкин бына бер-нисә йыл сәскәләр күренмәне. Шуға күрә быйыл Өфөлә күпләп бер йыллыҡ сәскә ултыртыласағын ишеткәс, бик ҡыуандым, был бит матурлыҡ өҫтәй, йәм бирә, йәшәүгә дәрт өҫтәй. Сәскәләр 21 мең квадрат тирәһе майҙанды биләйәсәк, тип белдерәләр. Бик хуп.

Өфөлә парктар етерлек. Мәҫәлән, Урмансылар паркы - күптәрҙең яратып ял иткән урыны. Ләкин, ял көндәре етһә, Лесной проезд урамындағы һуңғы туҡталышта тәртипһеҙ рәүештә машиналар теҙелеп китә: башҡа машиналар үтә алмай, автобустарға боролоуы ауыр. Был урында тиҙ арала махсус парковка урындары һәм автомобилдәр өсөн уңайлы юл эшләргә кәрәк.

Баш ҡаланың төрлө урындарында күп ҡатлы йорттар, социаль һәм башҡа объекттар төҙөү әүҙем бара. Ләкин төҙөлөш майҙансыҡтарына бетон ташыған машиналарҙың юлдарҙы бысратыуы ҡала өсөн ҙур бәлә булып тора. Мәҫәлән, тауға күтәрелгәндә бындай машиналарҙан бетон ағып ҡойола (бер алып барғанда күберәк булһын тигән принциптан сығып билдәләнгән норматив ситләшәләр, күрәһең), төҙөлөш майҙансығынан сыҡҡанда тәгәрмәстәренә йәбешкән батҡаҡ юлда ятып ҡала. Был хәлгә сик ҡуйырға кәрәктер ул.

Үҙебеҙ йәшәгән ҡалабыҙҙың матур, күркәм, уңайлы булыуын тәү сиратта беҙ, ошо ҡалала йәшәүселәр, тәьмин итергә тейешбеҙ. Был шулай уҡ хәл ителһә мәсьәләләрҙе күтәреп сығыуға ла ҡағыла.

**Иршат МӘҮЛИТБАЕВ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ТАҒЫ ДИКТАНТ ЯҘАБЫҘ!



**"Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант" акцияһы быйыл 26-28 апрелдә үткәрелә. Белем биреү акцияһының маҡсаты - туған телде өйрәнеүгә киң йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итеү, тел мәҙәниәтен күтәреү, Башҡортостанда, Рәсәй төбәктәрендә, сит илдәрҙә башҡорт телен танытыу һәм популярлаштырыу.**

Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант онлайн һәм офлайн форматтарҙа ойошторола. Университеттарҙа, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында, Милли музейҙа, "Йәшлек House" йәштәр йортонда, Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапханала һәм башҡа урындарҙа майҙансыҡтар асыла. 25 апрелгә тиклем акцияның сайтында һәр кем үҙенең офлайн-майҙансығын теркәй ала. Диктант яҙыу өсөн 2025 йылдың 11 апреленән 25 апреленә тиклем теркәлергә кәрәк. 26 апрелдә сәғәт 11-ҙә (Өфө ваҡыты буйынса) Башҡортостан юлдаш телеканалында һәм акцияны ойоштороусыларҙың социаль селтәрҙәрендә дикторҙар диктант тексын тура эфирҙа уҡый башлай:

11.00 сәғәттән 11.25 сәғәткә тиклем - башҡорт телен башланғыс кимәлдә белеүселәр өсөн;

11.30 сәғәттән 12.00 сәғәткә тиклем - башҡорт телендә иркен аралашыусылар өсөн;

12.05 сәғәттән 12.30 сәғәткә тиклем - башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында яҙыусылар өсөн.

Акцияла һәр кем ҡатнашырға мөмкин. Рәсми һөҙөмтәләр https://bashdictant.ru/ сайтына урынлаштырыла. Ойоштороусылар: Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү ойошмаһы, Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығы, Мәҙәниәт министрлығы, Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, Өфө фән һәм технологиялар университеты, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

### Хәйбуллин Ҡотлоәхмәт Ҡотлоғәлләм улы

Ҡ.Ҡ. Хәйбуллин - Бөйөк Ватан һуғышы яугиры, Советтар Союзы Геройы (1944). Ул 1921 йылдың 29 декабрендә Автономиялы Совет Башҡорт Республикаһының Ҡыпсаҡ-Ете ырыу кантонының (хәҙерге Ейәнсура районы) Сөләймән ауылында тыуған. Байдәүләт ауылы мәктәбендә етенсе класты тамамлағас, колхозда эшләй. 1940 йылда Ҡыҙыл Армияға алына. 1941 йылдың октябренән фашист илбаҫарҙарына ҡаршы яуҙарҙа ҡатнаша. Һуңынан уны 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының 58-се кавалерия полкына ПТР отделениеһы командиры итеп тәғәйенләйҙәр. Хәрби званиеһы - өлкән сержант.

Ҡотлоәхмәт Хәйбуллиндың отделениеһы немецтарҙың бронялы техникаһына ҡаршы ҡыйыу алыша, полкташтарын йыш ҡына немец танкыларының һәм үҙ йөрөшлө орудиеларының үлемесле утынан ҡурсалап алып ҡала. Ул боевой иптәштәре араһында бик абруйлы кесе командирҙарҙан һанала. Бер саҡ беҙҙең атлылар тимер юл станцияһын ала, әммә фашистар, танкылары артында йәшенеп килеп, контратакаға күтәрелә. Өлкән сержанттың отделениеһы бронебойсылары ҡаушап ҡалмай, бер дошман танкыһын яндыра, икеүһен емертә. Батыр яугир Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ була.

Ҡ.Ҡ. Хәйбуллинға Советтар Союзы Геройы исемен биреү тураһындағы юллау документында уның тиңһеҙ батырлығы ошолай тасуирлана: "58-се гвардия кавалерия полкының ПТР отделениеһы командиры (16-сы гвардия кавалерия дивизияһы, 7-се гвардия кавалерия корпусы, 61-се армия, Үҙәк фронт), гвардия сержанты Хәйбуллин 1943 йылдың 27 сентябрендә Днепр йылғаһының уң яҡ ярына беренселәрҙән булып сыға һәм ҡул алышында ике гитлерсыны юҡ итә. Подразделениелар уң яҡ яр буйындағы Галки ауылы өсөн алышҡа ингән саҡта уның отделениеһы оборона тотҡан участкала дошман өс танкыһы менән контратакаға күтәрелә, уларҙың утынан ике ПТР расчеты сафтан сыға. Ҡотлоәхмәт Хәйбуллин дошман менән бер үҙе алышҡа сыға. Беренсе атыуҙан уҡ бер танкыны емертә. Шул саҡта икенсе танк уның окобына килеп етеп, уны бер нисә тапҡыр "үтекләп" үтә. Хәйбуллин, емерелгән окобынан сығып, дошман танкыһына арттан ата һәм уны яндыра".

Ул 1943 йылдың 10 ноябрендә батырҙарса һәләк була. Ҡ.Ҡ. Хәйбуллин Гомель өлкәһенең Уборок ауылы янындағы туғандар ҡәберлегендә ерләнгән. 1944 йылдың 15 ғинуарында СССР Юғары Советы Президиумының Указына ярашлы, һәләк булғандан һуң уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

Беларусь Республикаһының Лоев ҡалаһында башҡорт батыры иҫтәлегенә мемориаль плита ҡуйылған, уның тыуған ауылының һәм район үҙәгенең урамдарына уның исеме бирелгән, Байдәүләт мәктәбе бинаһына мемориаль таҡтаташ беркетелгән.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә Еңеүҙең 80 йыллығы айҡанлы тантаналы саралар исемлеге баҫылды. Башҡортостандың баш ҡалаһында ошо мөһим байрамға арналған программа әҙерләнә, тип хәбәр итә Өфө хакимиәте. Әйтәйек, республиканың иң көслө командалары араһында лазер алышы буйынса Башҡортостан чемпионаты һәм беренселеге, фигуралы шыуыу буйынса республика беренселеге, "Яҙғы ралли-2025" спорт туризмы фестивале, спорт аэробикаһы буйынса Федерация кубогына ҡала ярыштары, Бөтә Рәсәй волейбол турниры һәм башҡа саралар планлаштырыла.

✓Өфөлә "Мотоцикл" иҫкәртеү сараһы башланды. Был мотоцикл водителдәре ҡатнашлығындағы юл-транспорт ваҡиғаларын иҫкәртеү һәм уларҙың юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен үтәүен тәьмин итеү өсөн ойоштоpола. Транспорт йөрөтөү өсөн тейешле документы булмаған, һаҡланыу шлемы киймәгән, шулай уҡ теркәлмәгән мототранспорт менән идара иткән водителдәрҙе асыҡлауға айырыуса иғтибар йүнәлтелә.Талаптарға яуап бирмәгән транспорт махсус туҡталҡаға ҡуйыла.

✓ Өфөлә Бөтә донъя һөнәрселәр күргәҙмәһе ойошторола. Мэрияның оператив кәңәшмәһендә бизнес-шериф - Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Агарагим Кагиргаджиев ошо хаҡта белдерҙе. Уҙған аҙнала Өфө Рәсәйҙә беренсе булып Бөтә донъя һөнәрселәр ҡалаһы статусына лайыҡ булды, был баш ҡалабыҙға ойоштороусы ролен башҡарырға мөмкинлек бирә. "Хәҙер үҙебеҙҙең продукция менән донъя баҙарына сыға һәм Өфөгә этника, халыҡ художество кәсептәре менән бәйле сараларҙы йәлеп итә алабыҙ. Был ҡалабыҙға туристар ағымын арттырыр тип көтәбеҙ", - тип билдәләне А. Кагиргаджиев.

✓Өфөлә "Георгий таҫмаһы" акцияһы 22 апрелдә башлана. Был хаҡта мэрияла уҙған оператив кәңәшмәлә мэр урынбаҫары Владимир Жебровский хәбәр итте. "Өфөлә үҫмерҙәр, йәштәр, хәрби-патриотик клубтар тәрбиәләнеүселәре, ирекмәндәр ассоциацияһы әүҙемселәре сауҙа үҙәктәрендә, майҙандарҙа, парктарҙа һәм скверҙарҙа Георгий таҫмаларын тарата һәм уларҙы тағырға ла өйрәтә", - тип һөйләне Владимир Жебровский. Йәмғеһе 30 мең самаһы Георгий таҫмаһын таратыу планлаштырыла.

✓Өфөнән Ҡытайҙың Хайнань утрауына (Санья ҡалаһы) тәүге самолет осто. Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, даими рейстарҙы (аҙнаһына ике тапҡыр) "Аэрофлот" авиакомпанияһы башҡара. "Ҡытай Халыҡ Республикаһы - халыҡ-ара аренала Башҡортостандың мөһим партнеры, һәм эшлекле мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү беҙҙең өсөн ", - тип яҙа республика етәксеһе социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

✔ *Ҡотороҡ ауырыуы - баш мейеһен зарарлай торған нейротроп вирус булдырған йоғошло ауырыу. Ҡоторған эт йә бесәй тешләгән яра аша вирус ҡанға үтеп инә һәм 40 көн тирәһе үҙен әллә ни белгертмәүе ихтимал.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Аҡтамаҡ аҡсарлаҡ

**(Белощекая крачка)**



Һаҙ аҡсарлаҡтарына ҡараған аҡтамаҡ аҡсарлаҡ йылға аҡсарлағына оҡшаған, тик сикәләре һәм эйәге аҡ төҫтә. Ҙур түгел, еңел оса. Тауышы ҡырҡыу.

Һирәк осрай торған төр, Өфө ҡалаһы эргәһендә, Өфө районында һәм Ағиҙел йылғаһының ҡайһы бер һаҙлыклы ерҙәрендә осрағаны бар. Элегерәк Ырымбур өлкәһендә оя ҡора ине. Һыу яткылыҡтары боҙҙан арынып, йәшеллеккә күмелгәс кенә ҡайта. Һыуҙа һәм ерҙә йәшәгән бөжәктәр, ваҡ балыҡ, тәлмәрйен менән туҡлана. Уларҙы тотҡан саҡта һыуға сума, әммә һыуға ултырмай.

## Йылға аҡсарлағы, ҡарабаш аҡсарлаҡ

**(Речная крачка)**



Аҡсарлаҡтарҙың был төрө ҙур аҡсарлаҡтарға оҡшаған, улар шулай уҡ ҡара "башлыҡ"лы, ҡойроҡтары асалы, шуға ла халыҡ уларҙы аҡсарлаҡ ти ҙә ҡуя.

Йылға аҡсарлағы беҙҙең йылға-күлдәрҙә иң йыш осраған ябай ҡош. Күгәрсендән бәләкәйерәк, өҫкө яғы күгелйем-ҡара, аҫҡы яғы - аҡ. Суҡышы - ҡыҙыл йә ҡара, тәпәйҙәре - ҡыҙыл.

Апрелдә үк ҡайта башлай, был хәрәкәт май уртаһында бигерәк әүҙемләшә. Тау йылғалары ярҙарында ла, һаҙлыҡтарҙа ла, утрауҙарҙа ла оя ҡора. 25 майҙан йомортҡа һала башлай, улар ғәҙәттә 2-3-әү була. Ниндәйҙер сәбәп арҡаһында йомортҡалар барыһы ла һәләк булһа, ҡабаттан оя ҡормай. Ике ҡош та сиратлап баҫа. 2-3 көнлөк бәпкәләр ояны ҡалдырып йөрөй башлай, 1 аҙнанан улар ныҡынып, үҙ аллығa әйләнә, 3 аҙнанан оса ла инде. Туҡланыу өсөн бөжәктәрҙе, умырткаһыҙҙарҙы, ваҡ балыҡтарҙы һыу өҫтөнән осоп та, һыуға сумып та тота. Һирәкләп тәлмәрйен менән кеҫәткеләргә лә һунар итә. 5-6 аҙналыҡ бәпкәләр үҙҙәренә ризыҡты үҙе хәстәрләй. Йылға аҡсарлағы һыу санитарҙары ла, паразиттар менән зарарланған ваҡ балыҡты тота.

Август урталарында йылы яҡҡа осоп китә башлай, бының өсөн 18-28 ҡош бергә тупланып оса. Сентябрҙә беҙҙең төбәктә йылға аҡсарлағын инде осратырмын тимә.

Башлыса Каспий диңгеҙенең көньяғында, Урта Азияның эре һыуҙарында ҡышлай. Беҙ тәпәйенә балдаҡ кейҙереп күҙәткән ҡоштоң ғүмер оҙайлығы 25 йылға етте.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ИҪКӘРТЕҮ

**Һуңғы осорҙары илебеҙҙә күбәйеп киткән бәрәҙәк эттәр һәм бесәйҙәр мәсьәләһе йыш ҡына депутаттар кимәлендә лә күтәрелеп тора. Берәүҙәр был мәхлүктәрҙең әҙәм балаһына зыяны хаҡында һүҙ алып барһа, икенселәр йәлләп, уларҙың да йәшәргә хоҡуғы булыуы, уларға ла "кешеләрсә" мөнәсәбәт тейешлеген ҡайғыртыу яғында.**

# ҠОТОРОҠ СИРЕ - ХӘҮЕФЛЕ,

## йәки Тағы ла эт-бесәйҙәр хаҡында



Бына шуның һымаҡ проблемалар тураһында ишетеү менән һәр саҡ башымда бер фекер әйләнә башлай. Тыштан бер аҙ эткә оҡшай биргән "яуыз бүре" хаҡында ул. Бала сағыбыҙҙан бүреләр тураһында һәр төрлө әкиәттәр һөйләшеп йә уҡып үҫтек бит. Француз яҙыусыһы Шарль Перроның "Ҡыҙыл эшләпә"һен барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Ҡыҙҙың өләсәһен бөтәүләй йотҡан мәкерле бүрене иң һуңынан һунарсылар атып алып ҡайтыуы, эсен ярғас, әбейҙең унан тере килеш сыҡҡаны хаҡында кинонеп уҡый торғайныҡ. Күрше ауылға бишенсе синыфҡа уҡырға барғас, ике ауыл араһын яңғыҙ-ярым үткән саҡта, бүре килеп осрамаһын, тип, гел генә ҡурҡҡаным да хәтеремдә. Әммә, хәҙер инде етмешкә етеп барыуыма ҡарамаҫтан, ысынында "фәлән ауылда фәлән кешене бүре ашаған" йә тешләгән тигән аныҡ бер хәбәр ҙә ишеткәнем булманы. Ә бына кемдәрҙер "кешенең дуҫы" тип атарға яратҡан эттәрҙән тешләнгән кешеләрҙе күргәнем, хатта дауалағаным да булғыланы. Әле унда, әле бында бәгзе берәүҙә бәрәҙәк эттәр талап үлтергән осраҡтар хаҡында ла ишетелеп ҡалғылай бит! Әлеге бүрегә ҡарағанда ла яманыраҡ булып килеп сыға түгелме был замана эттәре? Гәзитебеҙҙең һуңғы һандарында Фәүзиә Иҙелбаеваның шул йөн әйәләре хаҡында яҙып сығыуы ла тигенгә түгел. Уның "Эт көҙерләме, кеше ғүмереме?" тип аталған мәҡәләһендәге һәр төрлө шуға бәйләнешле фажиғәләр хаҡындағы фаҡттарға күҙ һалһаҡ, сәстәрең үрә торорлоҡ бит! Ә финанс күҙлегенән сығып ҡарағанда, бер этте аҫрап тотор өсөн айына 10 меңдән ашыу (илдәге барлыҡ бәрәҙәк эттәрҙе ҡарар өсөн йылына 140 млрд (!) һум) аҡса талап ителә икән.

Эт һәм бесәйҙәрҙең зыяны хаҡында уйлай башлаһаң, әлбиттә, иң башта уларҙың кешеләргә, малтыуарға һәр төрлө йоғошло сирҙәр таратыу ихтималлығын күҙ уңында тотоу кәрәк. Һөнәрем буйынса табип булараҡ, башлыса, ошо юҫыкта һүҙ йөрөтөп алмаҡсымын. Эт һәм бесәйҙәр аша күсә торған эхинококк, сусҡа һәм үгеҙ цепене, әйләнсек ауырыуҙары хаҡында ла күптәрҙең ишеткәне барҙыр. Уларҙың ауыл малдарына ғына түгел, кешеләргә лә йоғоу ихтималлығын онотмайыҡ. Эсәк эсендә үсҡән ҡылйыландар хаҡында бер нисә йыл элек мәҡәләм дә сыҡҡайны. Был сирҙәр, ярай, әҙәм балаһы өсөн үлемесле түгел...

***Әммә бөгөн, ҡәҙерле дуҫтар, ана шул хайуандарға бәйле булған ғәйәт ҡурҡыныс бер сир хаҡында һүҙ алып бармаҡ булам. Ҡотороҡ сире. Уның хаҡында ишетмәгән кеше юҡтыр, тик күптәр уны яҡшы белеп етмәйҙәр тип уйлайым. Ҡотороҡ менән сирләгән эт йә бесәйҙең баш мейеһендә булған үҙгәрештәр уларҙы айырыуса агрессив яһай, һәҙемтәлә, бер-береһен тешләшеп, үҙ-ара шул сирҙе тарата ла башлайҙар.*** Ә иң ҡурҡынысы - кешенең бына шундай хайуандар тарафынан тешләнеү ихтималлығы! Төлкө, бүре һымаҡ ҡыр йәнлектәре аша ла килә был сир. Әммә кешегә эт һәм бесәйҙең һәр саҡ яҡын булыуын иҫебеҙҙән сығармайыҡ.

Ҡотороҡ ауырыуы - баш мейеһен зарарлай торған нейротроп вирус булдырған йоғошло ауырыу. Ҡоторған эт йә бесәй тешләгән яра аша вирус ҡанға үтеп инә һәм 40 көн тирәһе үҙен әллә ни белгертмәүе ихтимал. Шул ваҡыт үткәс, 1-3 көндән продромаль осор (ауырыуҙың иң тәүге бил-дәләре) күҙәтелә. Күп кенә сирлеләр ошо мәлдә тиҙ арыусанлыҡ, кәйеф төшөнкөлөгө тоя, һаташа башлай. Тешләнгән яра уңалып бөтөүенә лә ҡарамаҫтан, яраның йөйө асыттырып һыҙлауы күҙәтелә.

Ауырыу башланғас, уның ике стадияһын айыралар. Беренсе стадияны - ярһыулыҡ стадияһы (стадия возбуждения). Икенсеһе - параличтар стадияһы (стадия параличей).

Беренсе стадияла тын алыуы ауырлаша, кешегә "һауа етмәй". Шулай уҡ һәр бер тауыш, йә яҡтылыҡ кешене тертләтеүсән. Кешенең айырыуса һыуҙан ҡурҡа башлауы - был ауырыуҙың үҙенсәлекле билдәһе. Шуға күрә был сирҙе "гидрофобия", йәғни "водобоязнь" тип тә атайҙар. Берәй һауытҡа һыу һалған тыуышты ишетеү йә һыуҙы күреү, хатта "һыу" тигән һүҙҙе ишетеү генә лә кешенең аяҡ-ҡулдары тартыша башлауына килтереүе ихтимал. Бынан тыш, сирле кеше саманан тыш артыҡ күп һөйләшеүсән, ауыҙынан бер туктауһыҙ шайыҡ бүленеп сыға. Ғәйәт агрессив булып киткән был сирле кешенең башкаларҙы тешләгеһе килә башлай. Ауырыу кеше үҙенең шундай түҙеп торғоһоҙ (кешеләрҙе тешләү) теләге булыуы хаҡында тирә-йүндәгеләргә, ғәҙәттә, әйтеүсән (иҫкәртеүсән). Уның ҡолағына төрлө ҡурҡыныс тауыштар ишетелә йә күҙенә ҡурҡыныс нәмәләр күренә. Ана шул хаҡта ла һөйләүсән бындай ауырыу.

Шундай симптомдарға бай булған тәүге стадияһы әллә ни оҙаҡ бармай, ғәҙәттә, бер аҙнаға тиклем һуҙыла. Ә инде икенсе, йәғни, параличтар стадияһына барып еткән сирле артабан өс-дүрт көндән дә артыҡ йәшәй алмай, тын алыу мускулатураһының параличы арҡаһында, тартыша-тартыша ятып, үлеп тә китә. Медицинала бындай сир хаҡында "прогноз неблагоприятный" тигән термин ҡулланыла. ***Ябай тел менән әйткәндә, был ауырыу менән сирләп киткән кешене ҡотҡарып алып ҡалыу мөмкин түгел! Әммә, ҡоторған эт йәки бесәйҙән яраланғас та, һис кисекмәҫтән, табиптарға мөрәжәғәт итеп, ваҡытында вакцинация яһатыу әҙәм балаһын үлемдән ҡотҡара.***

Бала сағымдағы бер ваҡиға иҫемдә ҡалған. Көпә-көндөҙ ауыл ситендә бер төлкө йөрөп ятҡанын күреп ҡалдыҡ. Бер малай ихатала бәйле торған үҙҙәренең этен ысҡындырып алып сығып, әлеге йыртҡысҡа һөслөттә. Эт төлкөнө тауға ҡарай ҡыуа төштө, беҙ уның артынан йүгерәбеҙ. Ниһайәт, эт уны ҡыуып етте һәм, бер аҙ тешләшеп, һуғышып алғандан һуң, төл-көнө үлтереп тә ҡуйҙы. Ә күпмелер ваҡыттан,бәйле торған был эт, ауыҙынан шайыҡтары ҡойолоп, сирләп китте, оҙаҡламай үлеп тә ҡуйҙы. Ярай әле, бәйле торған, бер кемде лә тешлә-мәгән. Ҡоторған төлкөнөң ауырыуын йоҡтороп, шул сәбәпле үлде, тип һөйләнеләр һуңынан.

Төлкө йә бүре һымаҡ ҡырағай йәнлек ауыл тирәһендә күренеп ҡалыу менән уларҙың тигенгә генә яҡында йөрөмәүе хаҡында уйлау кәрәк. Үҙҙәрен адекват тотмаған был йыртҡыстарҙың "башы эшләмәүе", йәғни, ҡоторған булыу ихтималлығын күҙ уңынан сығарыу ярамай. Уларға эт һөсләтеү һис кенә лә кәрәкмәй. Югиһә, ҡорбаны менән тешләшкән арала алабайың ҡурҡыныс сирҙе йоҡтороп өлгөрәсәк. Шуның өсөн дә, иң беренсе нәүбәттә, йыртҡысты зарарһыҙландырыу мотлаҡлығын иҫтә тотоп, был хаҡта ауылдағы ҡоралы кешеләргә - һунарсы йә полиция хеҙмәткәренә хәбәр итеү кәрәк.

Йомшаҡ күңелле "Йәшелдәр" партияларының ризаһыҙлығына ла ҡарамай, депутаттарҙың әлеге ҡурҡыныс янаусы эттәрҙе нисек зарарһыҙландырыу хаҡында уйланыуын хуплайым. Депутат Нина Останкинаның һүҙҙәренә таянып, хайуандарҙы ситлектә интектереп тотоуҙы ла гуманлыҡ тип һанау дөрөҫ түгелдер, тигән фекерҙе белдерҙе Фәүзиә Иҙелбаева үҙенең мәҡәләһендә. Һис интектермәй генә уларҙы эвтаназиялау йә стерилләү (бестереү) хаҡындағы мәсьәләне ыңғай хәл итеү кәрәктер шулай ҙа. Кеше ғүмеренә хәүеф янағанда, тағы ниндәйҙер айырым осраҡтарҙа динебеҙ ҙә бындай сараларҙы хуплай. Бәйғәмбәребеҙ (саллалаһу ғәләйһи үә сәлләм) өйҙә бесәй тоторға рөхсәт иткән, әммә этте өйҙә тотоуҙы ҡәтғи тыйған. Эт булған өйгә фәрештәләр инмәүе хаҡында әйткән. Ә тышта өй һаҡлаусы йә иһә башҡа төр эштәргә яраҡлы эттәрҙе тотоуҙы шәриғәт тыймай. Эт-бесәйҙәргә бәйләнешле ниндәйҙер ғәмәлдәр ҡылғанда, әлбиттә, врачтар менән дә, ғилемле дин вәкилдәре менән дә кәңәшләшеү, уларҙың әйткәндәренә лә таяныу кәрәк, тип һанайым.

***Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,***
**отставкалағы хәрби табип.**

✓ Перовский башҡорттар һәм Ырымбур казактары тормошонда күп кенә етешһеҙлектәрҙе күрә, был уларҙың көнкүрешенә зыян итә, тип уйлай; уларҙы бөтөрөү өсөн төрлө саралар күрелә.



ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Генерал Владимир Афанасьевич Обручев**

**(1842 - 1851 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған)**

Обручевтан һуң Ырымбур һәм Һамар генерал-губернаторы итеп тәғәйенләнгән Перовский 1851 йылдың майында Һаҡмар станицаһы аша Ырымбурға килә. Ҡаҙан ҡалаһынан һуң Өфөлә булып китә, унда Балкашин губернатор була. Һаҡмар йылғаһы аша сыҡҡанда Перовский казактарға алтын аҡсалар менән түләй һәм бының сәбәбен дә аңлата: ул үҙенең бында Ырымбур ерҙәренә алтын алыр өсөн түгел, ә уны халыҡҡа таратыу маҡсатында килеүе хаҡында Урал ғәскәре атаманына (Һаҡмар станицаһы уның ҡарамағында була) белдерә. Перовский ошо ҡылығы менән Обручевтың уның өҫтөнән хәрби министерлыҡҡа яҙған доносына ишара итә: ошо шикәйәттә Перовскийҙың 1835 - 1838 йылдарҙа башҡорттарҙың уның һөнләһе, графиня Анна Алексеевна Толстойға алтын сығарырға рөхсәт итеүе тураһындағы ҡарарын раҫлауы хаҡында яҙыла.

Перовскийҙың яңынан бында килеүенән барыһы ла күпте көтә: чиновниктар наградалар алыуға һәм вазифаларын күтәреүҙе; сауҙагәрҙәр - ҡалаға һаран Обручев тирәһенә оялаған ярлылар урынына байыраҡ кешеләрҙе йәлеп итеп, сауҙа хәлдәрен йәнләндереүҙе; эшселәрҙе һәм оҫталарҙы яллаусы подрядчиктар артабан һуҡыр баҡыр тингә эшләмәйәсәктәренә өмөт итә; башҡорттар, казактар һәм башҡа ябай халыҡ тормоштарының еңеләйеүен, башҡалар - шөғөлдәр иркен теләй.

Май аҙағынан сентябргә тиклем Перовский йәйләүҙә йәшәй, уның ҡалала ҡалған ярандарының күбеһе шунда уның иҫәбенә көн күрә, ҡалғандары үҙ имениеларына ҡайтып китә, йә иһә отпускаға сыға. Бер йәйен (1853 йылда) Перовский йәйләүҙә йәшәмәй, сөнки Кокандҡа ҡаршы хәрби экспедиция ойоштора. Һырдарья буйындағы барса ҡәлғәләрҙе һәм Аҡ Мәсет тип аталған төп цитаделде алыу күҙаллана, бында ҡырғыҙҙарҙан зәкәт йыйыусы Коканд бәге йәшәй. Поход ауыр һәм хәүефле була. Кокандтарҙың артиллерияһы булғанлыҡтан Аҡ Мәсетте штурмлау ярайһы уҡ ҡан ҡойошҡа килтерер ине. Шулай булмаһын өсөн ҡәлғәне дөрөҫ итеп ҡамауҙа тотоу талап ителә, ә барса кәрәк-яраҡты Ырымбурҙан ас далалар аша алып килергә кәрәк. Перовский, 1839 йылда Хива походындағы уңышһыҙ ғәмәлдәрен иҫтә тотоп, был юлы бик һаҡ тотона һәм экспедицияны әҙерләүҙә шәхсән барыһын да белеп торорға тырыша. Походта өс төрлө ҡорал ҡулланған ғәскәрҙәр: пехота, кавалерия һәм артиллерия ҡатнаша, шулай уҡ бер нисә понтон кәмәләре алына. Бөтә отрядтың начальнигы итеп Ырымбур казак ғәскәре атаманы, генерал-майор Иван Васильевич Подуров тәғәйенләнә, ул үҙе Перовский етәкселегендә эш итә. Ауыр ҡорал һәм ҡоралмалдарҙы башҡорт командалары алып бара, дөйәләр ҡырғыҙҙарҙан алына. Ғәскәр Аҡ Мәсеткә именаман барып етә һәм ҡәлғә янында урынлаша, шунан һуң ҡәлғә валына тиклем траншея ҡаҙыла; шунан һуң ҡәлғә стенаһы шартлатыла, шартлауҙан хасил булған уйым аша штурм колонналары ҡалаға инә. Был 1853 йылдың 28 июлендә була.

Был ваҡытта төбәктең эске идаралығында күренекле тип билдәләрлек бер нәмә лә булмай.

Вазифаһына ингәндә Перовский телмәр тотмай һәм үҙе идара иткән саҡта бер кем менән дә кәңәшләшмәй, комитеттар йыймай; эштәр йә доклад менән килгән кешегә рөхсәт биреп, йә уның үҙенең күрһәтмәһенә ярашлы башҡарыла. Айырым бүлек начальниктары, үҙ ведомстволарында тәҙәкләндереү эштәрен уҙғарыуҙы юллап килгәндәрендә, Перовский менән шәхсән аңлаша һәм ул ҡушҡанса эш итә. Ошондай буйһоноусанлыҡты нығытыу маҡсатында Перовский эштәр һәм идара итеү буйынса үҙе менән бер төрлө ҡараштараҡ булған начальниктарҙы һайлап ҡуя. Башҡорт ғәскәре командующийы вазифаһына Вятка губернаторы Середа тәғәйенләнә, әммә ул, Ырымбурға килеүенә күп тә үтмәй, кинәт кенә вафат була. Уны Ырымбур граждан губернаторы вазифаһын биләгән Балкашин алыштыра. Ырымбур ғәскәренең наказный атаманы итеп гәҙел, намыҫлы, аҡыллы һәм ғәскәрҙе яҡшы белгән И.В. Подуров тәғәйенләнә.

Перовский башҡорттар һәм Ырымбур казактары тормошонда күп кенә етешһеҙлектәрҙе күрә, был уларҙың көнкүрешенә зыян итә, тип уйлай; уларҙы бөтөрөү өсөн төрлө саралар күрелә.

Ул башҡорттарҙың, 30-сы йылдар менән сағыштырғанда, күпкә ярлыраҡ йәшәүенә, хатта ки хәйерселеккә төшә барыуына инана. Обручевтың һәм Жуковскийҙың ҡарарҙары менән башҡорттарға йәйләүҙәренә иркен рәүештә барып йөрөү тыйыла, ауылдарын күрһәтелгән планға ярашлы яңынан төҙөргә бойорола, улар ер эшкәртеү менән шөғөлләнергә мәжбүр ителә, әммә, башлыса, был ҡарарҙар ҡағыҙҙа ғына ҡала.

Башҡорттар, уларға попечитель итеп ҡуйылған уҫал Филатовтың, йәғни улар әйткәнсә, "Пилатка"ның килеүен ишетеү менән, уныһы яҡыная башлағанда арлы-бирле ер һөргән, ашлыҡ сәскән булып күренергә тырыша, өйҙәре янында нимәлер эшләп маташа. Әммә Филатов ауылдан сығып киткәс, улар әлеге эштәрен ташлай һәм көндәр йылыныу менән барыһы ла йәйләүгә сыға.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ** тәржемәһе.

**(Дауамы бар).**

ТАРИХЫНДАН ДАН ТАП!

# БАШҠОРТ ТАРХАНДАРЫ ҺӘМ ДВОРЯНДАРЫ



**Борон башҡорт йәмғиәтенең юғары ҡатламында тарханлыҡ институты шулай уҡ ҙур урын тотҡан. Тарханлыҡ - хан замандарынан килгән күренеш. Хан, солтан, бейҙәрҙән ҡала тархан дәрәжәһе иң аҫыл исем һәм ишлерәк булған, буғай. Тарихтан күренеүенсә, тарханлыҡ Төрки ҡағанаты дәүерҙәренә барып тоташа. Боронғо монголдарҙа ла ул исемат бар. Хазар ҡағанатында документтарҙан Гөрбән тархан исеме билдәле. Византия императоры һәм тарихсыһы Константин Багрянородный Олуғ Тархан титулы хаҡында яҙған.**

Һәр хәлдә, тархан титулы борон монгол-төркиҙәрҙә юғары хакимиәт эйәһе дәрәжәһен аңлатҡан булһа кәрәк. Монгол телендә таркан (тархан) һүҙе олуғ тархан мәғәнәһен аңлата. Мәхмүт Ҡашғариҙың "Диуани лөғәт әт-төрки" (XI быуат) һүҙлегендә алп тархан һүҙе хакимиәт башлығы төшөнсәһен бирә. Сыңғыҙ хан заманында тархандар аҫыл аҡһөйәктәр ҡатламын тәшкил иткән. Шул яҡтан Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың тарханды татар ханы тоҡомо тип аңлатыуында ла хаҡлыҡ бар.

Хәҙерге ваҡытта тархан атамаһының бер нисә мәғәнәһен айырып ҡарарға мөмкин:

1. Тархан - төрки-монгол халыҡтары тарихында юғары аҫыл зат дәрәжәһе исеме, хакимлыҡ титулы;
2. Урта Азия, Кавказ халыҡтары, Ҡаҙан, Әстерхан, Ҡырым ханлыҡтары тарихында - дәүләт һалымдары һалынмаған социаль ҡатлам;
3. Рәсәйҙә льготалы ярлыҡтар (грамоталар) исеме. "Башҡорт теленең һүҙлеге" тарханға "ырыуҙаштары араһында өҫтөнлөк менән файҙаланып, яһаҡ түләүҙән ҡотҡарылған юғары ҡатлам кешеһе һәм шул кешенең нәҫелдән нәҫелгә күсә торған дәрәжә исеме", - тип, беҙҙең шарттарға бәйле рәүештә аныҡыраҡ итеп аңлатма бирә. Төрки ҡағанаттары, Хазар ҡағанлығы традицияларына бағлы рәүештә, Кавказ алды Бөйөк Болгария дәүләтендә тарханлыҡ титулы йөшәгәнлеге мәғлүм. Ул Волга буйы Болгария дәүләтенә лә күсә. Ғәйнә башҡорттары легендаларында үҙҙәрен Болгариянан күсеп килгән тархан дәрәжәле ырыуҙар тип иҫәпләйҙәр.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**

**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**

**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Ижтимағи мөнәсәбәттәр, ҡәбилә һәм ырыу бүлексәләре

**Нуғай даруғаһы олоҫтары:**

1. Мең - Дим, Өршәк, Сәрмәсән йылғалары буйында ята; ҙур булмаған далалары һәм урмандары бар.
2. Күрпәс-Табын һәм Табын - Инйәр, Илим һәм башҡа йылғалар буйында; Илим буйлап урмандар һәм баҫыуҙар араһында урынлашҡан; урмандар һәм тауҙар буйлап арба юлы юҡ.
3. Юрматы - Ағиҙел, Иген, Ашҡаҙар һәм башҡа йылғалар буйында; дала һәм урмандары бар.
4. Ҡатай - Инйәр буйлап Ағиҙел үрендә; тауҙарҙа ҙур булмаған урмандар һәм яландар бар; тауҙар, урмандар, батҡылдар буйлап арба юлы юҡ.
5. Ҡыпсаҡ - Ағиҙел, Ыҡ, Мәндем йылғалары буйлап, Ағиҙел үрендә; арба юлы юҡ.
6. Бөрйән - Ағиҙел, Ыҡ һәм башҡа йылғалар буйында; ҙур булмаған тауҙар, урмандар һәм яландар; тауҙар артында арба юлы юҡ.
7. Теләү - Яйыҡ, Миндәк йылғаһы буйында; Урал артында яландар, ә урмандар аҙ; был ерҙәрҙә Уралдан алып арба юлы бар, ә Өфөнән Уралға тиклем - юҡ.
8. Һарыш-Ҡыпсаҡ - Ағиҙел буйында; урман-дала.
9. Тамъян - Ағиҙел, Нөгөш һәм башҡа йылғалар буйында; тауҙар, урмандар, дала; Ағиҙел буйында урынлашҡан Өфө ҡалаһынан түбәнге йорттарға тиклем арба юлы бар, ә Ағиҙел һәм Нөгөш буйлап үрге йорттарға - юҡ.
10. Шуран (Соран) - Урал арьяғында; күлдәр буйлап Себер слободалары яғында йәшәйҙәр, дала, урмандар аҙ, ә Өфө яғынан Уралға тиклем бик ауыр булған арба юлы бар.
11. Үҫәргән - Ағиҙел, Ыҡ, Һаҡмар, Йылайыр йылғалары буйында; тауҙар, урмандар, ҙур булмаған яландар бар; тауҙарҙа ла, урмандарҙа ла арба юлы юҡ, Һаҡмар артында - дала.
12. Түңгәүер - Ағиҙел, Һаҡмар йылғалары буйында; тауҙар, урмандар, ҙур булмаған яландар; тауҙар һәм урмандарҙа арба юлы юҡ.
13. Бәкәтин - Урал арьяғында; күл буйҙарында ҙур далалар, урман, уҫаҡлыҡ һәм ҡайынлыҡ.
14. Ҡара-Табын - Ағиҙел түбәләренән алып Урал арьяғында Яйыҡ һәм Уй түбәләре, Мейәс, күлдәр буйында; Ағиҙел буйлап урман, яландар, Урал арьяғынан ҙур дала, урмандар; Өфөнән ошо олоҫҡа тиклем тауҙар һәм урмандар аша арба юлы юҡ, ә Урал арьяғында арба юлы буш.
15. Күбәләк-Табын - Яйыҡ һәм Миндәк йылғалары буйлап; ҙур дала, урман аҙ; Өфөнән Уралға тиклем тауҙар һәм урман аша арба юлы юҡ, Урал арьяғында арба юлы буш.

**(Дауамы бар).**

✓ *Нимә һуң ул этнос? Совет осоронан бирле этностарҙы формалаштырыусы факторҙар сифатында ҡәүемдәр биләгән территория, традицион йәшәү рәүеше, тел һәм менталитет, милли характер берлеге күрһәтелеп килде.*



**Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - география фәндәре докторы, профессор, БР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре, ватан этнографияһы тарихы, этник һәм тарихи география, география һәм картография өлкәһендәге 170-тән ашыу ғилми хеҙмәттәр авторы Айбулат Вәли улы ПСӘНЧИН.**

# ҺЫЙЫНДЫРЫУСЫ

## рухи йәнтөйәгебеҙ булған



**Хөрмәтле Айбулат Вәли улы! Әңгәмәбеҙ башында үҙегеҙҙең нәҫел-нәсәбегеҙ хаҡында бер кәлимә мәғлүмәт биреп китһәгеҙ, урынлы булыр ине. Унан һуң, башҡорттарҙа Псәнчин фамилияһы һирәк осрай, ата-бабаларығыҙҙың береһенең исеме Бесәнсе булғанмы әллә?**

- Фамилиябыҙға килгәндә, уны аныҡ ҡына асыҡлап булмай. Әгәр ата-бабаларыбыҙҙан кемдер йәйҙәрен бесән әҙерләп, шуны кәсеп итеп алһа, "Бесәнсе" ҡушаматының фамилия булып китеүе лә бар. Атайым Вәли Шәғәли улы Күгәрсен районының Дәүләтҡол ауылында тыуып үҫкән, сығышы буйынса ҡара ҡыпсаҡ ырыуынан, әсәйем - Лилиә Ғәбделбарый ҡыҙы Килмөхәмәтова Ҡырмыҫҡалы районының Ибраһим ауылынан, Йомран тип тә әйтәләр, был ауылда күренекле башҡорт мәғрифәтсеһе, яҙыусы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев тыуған. Улар йомран-табын ырыуына ҡарай.

Нәҫел-нәсәбебеҙҙә элек-электән уҡымышлы, зыялы заттар булып, үҙенә күрә бер династия барлыҡҡа килгән. Атайым буйынса олатайым Шағәли Псәнчин 112-се Башҡорт атлы дивизияһында һуғышта ҡатнашып, алған яраларынан госпиталдә вафат була, Одесса яғындараҡ туғандар ҡәберлегендә ерләнгән. Ул һуғышҡа тиклем ауылында уҡытыусы, мәктәп директоры булып эшләп өлгөрә. Әсәйем буйынса олатайым, шул уҡ дивизияла хеҙмәт итеп, һәләк булып ҡала. Атайымдың өләсәһе лә бик диндар ҡатын була, уҡый-яҙа белә, шәхсән ауыл ҡыҙҙарына һабаҡтар бирә. Зат-нәҫелебеҙҙә мәсет хеҙмәткәрҙәре булыуы ла билдәле, тимәк, улар ҙа уҡымышлы булған. Беҙгә туған тейешле кешеләр араһында ла уҡытыусылар була, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улар ҙа һуғыштан ҡайтмаған.

Атайым Вәли Шағәли улы ла мәғрифәт һәм фән юлын һайлай. 1959-1961 йылдарҙа БАССР Мәғариф министрлығында дәреслектәр бүлеге мөдире булып эшләй. 1961 йылдан башлап Башҡорт дәүләт университетының башҡорт теле кафедраһы уҡытыусыһы вазифаһында эшләп, кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай. Атайым бик күренекле тел белгесе, төркиәтсе ғалим булараҡ танылыу тапты. 1984 йылдан алып 1993 йылға тиклем РФ Мәғариф министрлығының Милли мәктәптәр ғилми-тикшеренеү институтының Башҡортостан филиалына етәкселек итте. Ул 300-ҙән ашыу ғилми хеҙмәттәр авторы, башҡорт мәктәптәре, педколледждар өсөн дәреслектәр, методик ҡулланмалар сығарҙы.

Өйөбөҙҙә атайымдың ҙур ғына шәхси китапханаһы булды, унда филология буйынса ғына түгел, тарихи китаптар ҙа байтаҡ ине. Бәләкәй сағыбыҙҙан уҡ ул Юлай ағайым менән икебеҙҙә туған телебеҙгә, халҡыбыҙ тарихына ҡыҙыҡһыныу уята алғандыр, тим. Юлай ағайым да атайым өлгөһөндә тел белеме өлкәһен һайлап, филология фәндәре докторы дәрәжәһенә өлгәште, шулай уҡ төркиәтсе булараҡ та хеҙмәттәре байтаҡ. Беҙҙең фән юлын һайлауыбыҙҙа атайыбыҙҙың роле хәл иткес булды, тип әйтергә кәрәк.

Әсәйем Лилиә Ғәбделбарый ҡыҙы һөнәре буйынса библиограф булды, байтаҡ ваҡыт хәҙерге Ә.З. Вәлиди исемендәге республика милли китапханаһында, шул уҡ 20-се мәктәптә китапханасы, һуңынан БДУ-ла библиография бүлеге мөдире вазифаһында эшләне.

**Һеҙ Өфө ҡалаһында тыуып үҫһәгеҙ ҙә, башҡортса бик матур һөйләшәһегеҙ. Ниндәй мәктәптә уҡының?**

- Билдәле булыуынса, 1970 йылда бер төркөм башҡорт зыялыларының юллауы буйынса Өфө ҡалаһында 20-се башҡорт мәктәбе асыла, ул әлеге көндә Ф.Х. Мостафина исемендәге Башҡорт ҡала гимназияһы тип атала. Атайым һөйләүенсә, балалар һаны етһен өсөн, Өфө буйлап йөрөп, ата-әсәләр араһында, балаларын шул мәктәпкә бирһендәр тип, өгөт-нәсихәт эштәре алып барыла. Ул саҡта мәктәптең интернаты ла була. Юлай ағайым да ошо йылда шул мәктәпкә 1-се класҡа уҡырға барҙы, мин үҙем дә ошо мәктәптә белем алдым.

**Һеҙҙең бала саҡтағы Өфө менән хәҙерге баш ҡалабыҙҙы сағыштырғанда, ниндәй үҙгәрештәр күҙгә салына?**

- Минең бала сағым уҙған быуаттың 70-се йылдарына тура килде. Ул саҡта Өфөлә башҡорттар әллә ни күп булманы. Урамдарҙа, йәмәғәт транспортында башҡортса аралашҡан кешеләр бик һирәк ине - ауылдарҙан вуздарға белем алырға килгән йәштәребеҙ ҙә, бәлки, урыҫ телле мөхиттә үҙ телдәрендә һөйләшеүҙән ҡыйынһынғандыр, оялғандыр. Хәҙер, Аллаһҡа шөкөр, автобустарҙа, трамвайҙарҙа туҡталыштарҙы башҡортса иғлан итәләр, туған телебеҙҙә яҙылған алтаҡталарҙы күрәбеҙ, туған телебеҙҙә иркен аралашабыҙ. Шуныһы ҡыуаныслы, баш ҡалабыҙҙа башҡорт телен ҡулланыуҙы үҙенә күрә бер заманса мода рәүешендә ҡабул итеү һәм үҫтереү буйынса байтаҡ ғәмәлдәр бойомға ашырыла, әммә был өлкәлә эшләйһе лә эшләйһе әле. Ҡала мөхитенә килгәндә, башҡорт милли һыҙатлы архитектура, аҡрынлап булһа ла, үҫешә башланы, күренекле шәхестәребеҙгә һәйкәлдәр һалына, биналарҙа таҡтаташтар ҡуйыла, музейҙар эшләй. Ғөмүмән, баш ҡалаға күсеп килеүсе милләттәштәребеҙ күбәйҙе, улар өсөн ҡала мәҙәниәте яңы мөмкинлектәр аса. Урбанлашыу, йәғни, ҡалалашыу халҡыбыҙ өсөн бер прогрессив фактор булып тора. Баш ҡалабыҙҙа башҡорт мөхите үҫешә бара, милли мәғарифҡа, мәҙәниәткә, әҙәбиәткә һәм сәнғәткә, фән өлкәһенә, башҡорт матбуғатына иғтибар бермә-бер арта барҙы. 22 йыл дауамында "Киске Өфө" гәзите сығарыла - был үҙе генә лә бик ҙур ҡаҙаныштыр, тим

**Ни өсөн географ һөнәрен үҙ иттегеҙ?**

- Күрәһең, география, Башҡортостан географияһы, биология предметтары уҡытыусылары миндә ошо фәндәргә ҡыҙыҡһыныу уята алғандыр. Ни тиһәң дә, мине мәктәбебеҙҙең география-биология буйынса йыйылма командаһы составына индерҙеләр, төрлө кимәлдәге олимпиадаларҙа ҡатнаша инек. Мәктәпте тамамлағас, Башҡорт дәүләт университетының география-иҡтисад факультетына уҡырға индем. Ғөмүмән, гуманитар йүнәлеш күңелемә, зиһенәмә яҡынраҡ булғанғалыр, фән юлында ла ситкә тайпылманым: кандидатлыҡ диссертациямды Башҡортостанды географик яҡтан өйрәнеү һәм картографиялау буйынса тарихи сығанаҡтарҙы анализлауға арнаһам, география фәндәре докторы исеменә Рәсәйҙе этник картографиялау тарихын сағылдырған хеҙмәтем өсөн лайыҡ булдым.

**Фән юлында ла остаздар, ғилми етәкселәр кәрәк. Уларҙы атап үтһәгеҙ ине.**

- Мин ғилми стажировканы Мәскәүҙә, РФА-ның Миклухо-Маклай исемендәге этнология һәм антропология институтында үттем. Тәүҙә бер аҙ ваҡыт күренекле совет ғалимы, география фәндәре докторы, этнодемограф Соломон Ильич Брук тан һабаҡтар алдым, ул ауырып киткәс, тарих фәндәре докторы, этнолог, этник демография һәм картография өлкәһендә донъя кимәлендә танылыу тапҡан Павел Иванович Пучковтың лекциялары, семинарҙары ошо ғилми йүнәлештә өйрәнеү йәһәтенән бик фәһемле булды. Ғөмүмән, ошондай билдәле фән үҙәгендә ғилем эстәү үҙе бер ҙур бәхеткә тиңдер, тип уйлайым.

**Һеҙ, Айбулат Вәли улы, ике ҡыҙыҡлы фән - география һәм тарихи этнология киҫешкән өлкәлә ғилми тикшеренеүҙәр алып бараһығыҙ, йәғни, этник география, картография проблемаларын тарихи процесстар менән бәйләп өйрәнәһегеҙ. Билдәле совет тарихсыһы, Евразия халыҡтарының боронғо һәм урта быуаттарҙағы тарихын бик ентекле өйрәнгән ғалим һәм популяр тарихи әҫәрҙәр авторы Лев Гумилевтың үтә ҡыҙыҡлы бер фекере бар: этностарҙың килеп сығышында, формалашыуында бер географик факт - тәбиғи ландшафт ҙур роль уйнай икән. Һеҙ ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?**

- Мин был фекер менән килешәм, уны хуплайым, тип әйтергә була. Нимә һуң ул этнос? Совет осоронан бирле этностарҙы, милләттәрҙе формалаштырыусы төп факторҙар сифатында билдәле бер ҡәүемдәр биләгән территория, традицион йәшәү рәүеше, тел һәм менталитет, милли характер берлеге күрһәтелеп килде, был билдәләмә хәҙерге фәндә лә инҡар ителмәй. Тимәк, ысынбарлыҡта кешеләр йәшәгән территориялағы ландшафтың этностар формалашыуында шулай уҡ бик мөһим урын биләүен иҫәпкә алыу фарыз. Ландшафтың, йәғни билдәле бер ҡәүемдәр көн иткән территорияның тәбиғи-географик үҙенсәлектәре йоғонтоһонң бер нисә аспекты бар. Әңгәмәбеҙ барышында

***Башҡорттарҙың теге йәки был төбәккә килеп урынлашыуын тарихи-географик яҡтан тикшерә башлаһаң, уларҙың ниндәй ҙә булһа йылға һәм уның бассейны ерҙәрен төйәк итеүе асыҡ күренә. Ни өсөн? Һыу сығанаҡтары, шишмәләр, йылғалар малсылыҡ менән шөғөлләнгән ҡәүемдәр өсөн бик мөһим фактор булған: берҙән, ул ҡәҙимге йәшәйеш өсөн төп шарт булһа, икенсе яҡтан, һыу юлдары - үҙенә күрә еңел файҙаланып була торған бәйләнеш тотоу, коммуникация сараһы. Әлбиттә, был һәр бер кеше, кәмәгә ултырып, йылға буйлап ҡына теләгән еренә барып йөрөгән, тигән һүҙ түгел, ҡоро ерҙән дә юлдар була. Шулай ҙа тап йылға-күл буйҙарындағы дөйөм территорияла йәшәгән кешеләр төркөмдәре ырыу-ҡәбиләләр булып ойоша.***

✓ *Һуңғы осорҙа ырыуҙар хәрәкәте барлыҡҡа килде. Шул уҡ ваҡытта һәр ырыуҙың билдәле бер архаик тамырҙары бар һәм, ваҡыт төпкөлдәренә тәрәнгәрәк инә барған һайын, уртаҡ ата-бабалар булыуы асыҡлана.*



мин ошо хаҡта асыҡлама биреп китермен.

География факультетын тамамлағас, университетта стажер-тикшеренеүсе вазифаһында эшкә ҡалдым, шул саҡта уҡ тарихи география проблемалары менән ҡыҙыҡһына башланым. Бер аҙҙан мине күренекле башҡорт этнологы Раил Ғүмәр улы Кузеев үҙенә саҡырып алды һәм РФА Өфө ғилми үҙәгенең Урал халыҡтары бүлегенә (уға Археология һәм этнография музейы ла ҡарай) ғилми хеҙмәткәр вазифаһына эшкә алды. Хәҙер был ғилми учреждение РФА Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәгенең Р.Ғ. Кузеев исемендәге Этник тикшеренеүҙәр институты тип атала. Ғалим-академик минә тарихи этногеография проблемалары***дары - үҙенә күрә еңел файҙаланып була торған бәйләнеш тотоу, коммуникация сараһы.*** Әлбиттә, был һәр бер кеше, көмәгә ултырып, йылға буйлап ҡына телләгән еренә барып йөрөгән, тигән һүҙ түгел, ҡоро ерҙән дә юлдар була. Шулай ҙа тап йылға-күл буйҙарындағы дөйөм территорияла йәшәгән кешеләр төркөмдәре ырыу-ҡәбиләләр булып ойоша. Тарихи Башҡортостан ерлегендә табылған иң боронғо кеше тораҡтары ла йылға-күл буйҙарында урынлашҡан, мәҫәлән, Кушнаренко районының Кәрәкә йылғаһы буйындағы IV Иҫке Туҡмаҡлы торағы (IV Старо-Тукмаклинская стоянка), Әбйәлил районының Ҡарабалыҡты күле буйындағы Урта Түбә торағы (Мысовая) һ.б.

йөнлө носорог, бизон һүрәттәрен төшөргән. Был, әлбиттә, Төньяҡ Евразияла күҙәтелгән һуңғы боҙланыу эпохаһы менән бәйле (был дәүер бынан 11,7 - 11,6 мең йылдар әүәл тамамлана). Тимәк, боҙлоҡтар осорона ҡараған ландшафт ошо архаик заманда йәшәгән ҡәүем кешеләренең тәбиғәткә ҡарата мөнәсәбәттәрендә, уларҙың беҙгә билдәһеҙ сакраль ҡараштарында һәм тойғоларында сағылыш тапҡан. Шулай уҡ палеолит эпохаһы кешеләренең төрлө хайуандарға һунар итә алыуы ышаныслы дәлилдәр менән иҫбатланған.

Алтайҙа табылған, Денисов кешеһе тип аталған гоминидтың һөйәк фрагменттарын тикшереү ошо типтағы антропоид заттарҙың бынан 200 - 73 мең йылдар арауығында мәмерйәтән башҡа, тиҫтәнән ашыу айырым һөйләштәре бар. Ни сәбәпле? Башҡорт ырыуҙары заманында төрлө тәбиғәт зоналарында, төрлө ландшафта көн иткән. Шунлыҡтан, улар үҙҙәре йәшәгән тәбиғи мөхиткә хас әйбер-предметтарҙы, күренеш-ваҡиғаларҙы башҡа урындарҙа йәшәүсе төркөмдәр һөйләшендә булмаған һүҙҙәр менән нарыҡлай. Йәнә, миҫал өсөн Дағстан халыҡтары телдәрен иҫкә төшөрәйек. Унда ни өсөн диалектттар шул тиклем күп? Бығаtau ландшафты "ғәйепле", сөнки айырым ырыу-ҡәбиләләр, тау түбәләрендәге һәм тарлауыҡтағы ауылдар араһында бәйләнеш тотоу өсөн ҡаршылыҡтар күп. Һөҙөмтәлә тау өҫтө кешеләренең һөйләшен тау аҫтағылары аңлап етмәүе бик мөмкин.

**Урал ландшафты хәл иткес роль уйнаған, тип әйтеп буламы?**

- Була, әлбиттә. ***Башҡорт халҡының килеп сығышын һәм формалашыуын асыҡлағанда Көньяҡ Уралда архаик дәүерҙәрҙән бирле йәшәгән этник төркөмдәрҙең дә башҡорт этногенезы факторҙарының береһе булыуын инҡар итә алмайбыҙ. Ултыраҡ тормошта йәшәүсе ҡәүемдәрҙән һәм күсмә ҡәбиләләрҙән ойошҡан халҡыбыҙ.*** Бына "Урал батыр" эпосында төп геройҙың антагонисы - уның бер туған энеһе Шүлгән образы бар. Шул уҡ ваҡытта ысынбарлыҡта Көньяҡ Уралда хәҙер бар донъяға билдәле Шүлгәнташ мәмерйәһе бар, ул таш быуаты, йәғни палеолит дәүеренә ҡарай. Был осраҡлымы һуң? Юҡ. Археолог

# ҺӘМ БЕРЛӘШТЕРЕҮСЕ...

## ландшафт тураһында

өлкәһендә тикшеренеүҙәр алып барырға фатиха бирҙе.

**Тимәк, Р.Ғ. Кузеев, башҡорт халҡының боронғо һәм урта быуаттар тарихын, башҡорт ырыуҙарының килеп сығышын, этник үҙенсәлектәрен ентекләп өйрәнгән ғалим буларак, Башҡортостандың тарихи географиясы мәсьәләләре буйынса ла тикшеренеүҙәр алып барыуҙы күҙаллаған...**

- Эйе, тап шулай. Уның әйтеүенсә, үҙе лә ошондай ғилми проблемалар менән ҡыҙыҡһынған, улар буйынса методологик характерҙағы бер нисә бәләкәйерәк мәҡәлә яҙған, әммә төплөрәк тикшеренеүҙәр алып барыу өсөн ваҡыты етмәгән. Ул миңә бына нимә тине: "Мин 50-се - 60-сы йылдарҙа уҙғарылған ғилми экспедициялар барышында, ялан (полевые) тикшеренеүҙәре алып барыу маҡсатында, барса Башҡортостанды йөрөп сыҡтым. Һинә лә, буласаҡ географ-этнологҡа, Башҡортостан ландшафтын үҙ күҙҙәрең менән күреп, яҡшылап өйрәнергә кәрәк булыр. Ни өсөн, ниндәй сәбәптәр арҡаһында теге йәки был ырыу халҡы тап ошо географик ерлектә төпләнгән, уны үҙенә мәңгелек төйәк иткән - былар, тарихи этнография күҙлегенән ҡарағанда, үтә мөһим проблема булып тора".

Артабан ошо юҫыҡта тикшеренеүҙәремдә дауам иттем. ***Башҡорттарҙың теге йәки был төбәккә килеп урынлашыуын тарихи-географик яҡтан тикшерә башлаһаң, уларҙың ниндәй ҙә булһа йылға һәм уның бассейны ерҙәрен төйәк итеүе асыҡ күренә. Ни өсөн? Һыу сығанаҡтары, шишмәләр, йылғалар малсылыҡ менән шөғөлләнгән ҡәүемдәр өсөн бик мөһим фактор булған: берҙән, ул ҡәҙимге йәшәйеш өсөн төп шарт булһа, икенсе яҡтан, һыу юл-***

**Һеҙ алдараҡ ландшафттың кешеләргә йоғонтоһоноң төрлө аспекттары булыуы тураһында әйтеп киткәйнегеҙ. Ошо хаҡта ентекләберәк һөйләп, асыҡлап китһәгеҙ, бик урынлы булыр.**

- Нимә һуң ул ландшафт? Л.Н. Гумилев әйткәнсә, ул барса тереклекте һыйындырған тәбиғи мөхит (русса - "вмещающий ландшафт"), уны түйындырыусы ландшафт тип тә нарыҡларға була. Иң элек ул - билдәле бер территориялағы ер һәм уның физик-географик үҙенсәлектәре. Икенсенән, шул ерҙәге үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһы. Былары кешеләр өсөн аҙыҡ-түлек сығанағы: улар ашарға яраҡлы үҫемлектәрҙе, уларҙың емеш-еләктәрен, тамырҙарын йыя, һунарға йөрөй, балыҡ тота. Әгәр кешеләр бер ландшафтан икенсеһенә күсеп китһә, башҡа бер үҫемлектәр үҫкән, икенсе бер хайуандар йәшәгән тәбиғәт зонаһына яраҡлашырға мәжбүр була. Теге йәки был социум, зурлығы буйынса ниндәй генә булмаһын, үҙенең йәшәүен дауам итеү һәм үҫешә алыу мөмкинлеген, беренсе нәүбәттә, аҙыҡ-түлекте етерлек килемдә таба алыу аша хәл итә. Иң боронғо, архаик хужалыҡ итеү ғәмәлдәре, бик күп мең йылдар үтеүенә ҡарамаҫтан, хәҙерге замандарға тиклем һаҡланып ҡалған. Был турала ғалим-этнолог Мирза Муллағолов үҙенең "Собирательство и рыболовство у башкир" (Өфө, 2007) тип аталған хеҙмәтендә бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле итеп бәйән иткән.

Йәнә, тәбиғи ландшафтың ҡырҡа үҙгәреүе кешеләрҙең йәшәү рәүешендә, һөнәр-кәсептәрендә лә, үҫешә барған аң-зиһендәрендә һис шикһеҙ сағылыш тапҡан. Бына Шүлгәнташ мәмерйәһендә палеолит дәүере кешеләре, аттар һәм дөйә-ләрҙән башҡа, мамонт һәм оҙонләрҙә йәшәүен, үҫемлектәр һәм үҙҙәре тота алған ваҡ йәнлектәр менән туҡланыуын асыҡланы. Тимәк, архаик дәүер кешеләренең, һунарға йөрөп, аҙыҡ рационын ит менән тулыландыра алыуы үтә боронғо эпохаларға барып тоташа. Әйтергә кәрәк, һәр айырым ландшафта билдәле бер аҙыҡтар менән туҡланыу системаһы формалаша, һәм бындай айырмалыҡтар күп быуаттар дауамында һаҡланып ҡала.

***Ландшафт үҙенсәлектәре боронғо кешеләрҙең формалаша барған аң-зиһенендә, ҡараштарында, инаныстарында сағылыш табалыр ул?***

- Теге йәки был ландшафтҡа хас тәбиғи мөхит кешеләрҙең донъяны танып-белеү үҙенсәлектәрен, космогоник ҡараштарын, тик шул тәбиғи ландшафт менән бәйле менталь сифаттарын формалаштыра. Ерҙең төньяҡ ярымшарында йәшәгән кешеләр күк көмбәҙендә Етегән йондоҙлоғон, Тимер ҡаҙыҡ йондоҙон күрһә, көньяҡ ярымшарҙа Көньяҡ Арҡысаҡ (Әүерһә) йондоҙлоғо күренә. Һәм ошо айырма төрлө этностарҙың мифологияһында төрлөсә сағылыш таба. Шулай уҡ теге йәки был йәмғиәткә хас булған ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар, традициялар, билдәле бер йәшәйеш нормалары һәм ҡағиҙәләре ландшафт үҙенсәлектәре менән бермә-бер бәйле рәүештә хасил була. Ошоға дәлил итеп халҡыбыҙҙың "Урал батыр" эпосын килтереп була. Урал батыр образы, Урал тауҙары, Башҡортостан йылғалары һәм күлдәре халҡыбыҙ мифологияһының алыштырғыһыҙ бер өлөшөн тәшкил итә.

Ғөмүмән, тәбиғи мөхит, кешеләргә һәр даим, бер өҙлөкһөҙ тәьҫир итеп тороп, йәмғиәттең мәҙәни халәтен, рухи үҙенсәлектәрен билдәләүсе факторҙар иҫәбенә инә, ул хатта бер ни тиклем тел һөйләштәре, диалекттарҙың формалашыуына йоғонто яһай. Бына беҙҙең туған телебеҙҙең, өс төп диалект-

**Үҙҙәре өсөн традицион булған ландшафттан икенсе бер географик зонаға күсеп килеүселәр була. Был уларҙың мәҙәниәтендә, көн итмешендә сағылыш табамы?**

- Был осраҡта урындағы халыҡ менән күсеп килеүселәр мәҙәниәттәре араһында билдәле бер бәйләнештәр хасил булып, уларҙың һәр ҡайһыһында ниндәйҙер үҙгәрештәр башланыуы күҙәтелә. Күсеп килеүселәр яңы ландшафтҡа ла, күрше йәшәгән халыҡтың мәҙәни йоғонтоһона ла яраҡлаша башлай. Быны раҫлаусы миҫал итеп, XVII - XVIII быуаттарҙа Тарихи Башҡортостан территорияһына күсереп килтерелгән рус крәҫтиәндәрен күрһәтеп була. Башлыса, дәүләт крәҫтиәндәре яңы төҙөлгән заводтарҙа эшсе сифатында килтерелә, әммә улар завод эргәһендәге ҡасабаларҙа йәшәп, мал да аҫрай, баҡса ла үҫтерә. Күпмелер ваҡыт үтеүгә, улар ҙа, башҡорттарҙан күреп, малдарын тибенлеккә сығара башлай, башҡорт милли аштарынан йөҙ бормай, ҡымыҙ эсеүҙең файҙалы булыуын төшөнә. Үҙ яғынан, башҡорттарҙың көнкүреш мәҙәниәтендә лә рус мөхитенән үҙләштерелгән билдәле бер үҙгәрештәр күҙәтелә: мәҫәлән, алты мөйөшлө өйҙәр һала башлау, өй тәҙрәләренә мал ҡарындыҡтары урынына быяла ҡуйҙыртыу, пәрҙәләр ҡуллана башлау, картуф, кәбеҫтә үҫтереү һ.б.

**Бына нимәгә иғтибар итеү мөһим: халҡыбыҙ 5 тиҫтәгә яҡын ырыуҙан хасил булған, һәр береһенең үҙ атамаһы бар, ә башҡорт тип аталған айырым ырыу йә инә ҡәбилә булмаған. Көньяҡ Урал аборигендарына күп быуаттар дауамында сит тарафтарҙан күсеп килгән бәләкәй һәм ҙур этник төркөмдәр - айырым ырыуҙар килеп ҡушыла барған һәм уларҙың барыһы ла уртаҡ башҡорт этнонимын ҡабул иткән. Төрлө ҡәүемдәрҙе берләштереүҙә Көньяҡ**

Вячеслав Котов билдәләүенсә, Шүлгәнташ мәмерйәһендәге палеолит дәүере һүрәттәре һәм башҡорт мифологияһы, башҡорттарҙың космогоник ҡараштары араһында туранан-тура бәйләнеш бар, был архаик дәүерҙәрҙә йәшәгән ҡәүемдәр һәм хәҙерге башҡорт мәҙәниәттәре араһында билдәле бер күсәгилешлек булыуына ла дәлил.

Халҡыбыҙҙың этник яҡтан күп компонентлы булыуын беләбеҙ, һәм бында бер генә лә хәүефләнерлек сәбәп юҡ. Шуның өсөн дә һуңғы осорҙа ырыуҙар хәрәкәте барлыҡҡа килде, йыйындар уҙғарыла, ырыуҙар ҡоро бар. Шул уҡ ваҡытта хәҙерге осорға килеп еткән һәр ырыуҙың билдәле бер архаик тамырҙары бар һәм, ваҡыт төпкөлдәренә тәрәнгәрәк инә барған һайын, уртаҡ ата-бабалар булыуы асыҡлана. Быны этногенетик тикшеренеүҙәр ҙә раҫлай. Бына, мәҫәлән, беҙ миҫалға алған Денисов кешеһенә хас булған ҡайһы бер гендар япон халҡының 4-6 процентында табылған. Йәнә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейеменә иғтибар итәйек. Милли костюм матди-мәҙәни мираҫ составына инә, унда бик борондан килгән компоненттар бар. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының барлығы 7 төрлө кейем комплексы булыуы билдәле. Бындай күп төрлөлөк шул уҡ ландшафттың да, этник сығыштың да йоғонтоһо менән аңлатыла. Ысынлап та, дала зонаһында йәшәүселәр менән урман-тауҙарҙы төйәк итеүселәрҙең кейем-һалымы араһындағы айырымлыҡтар күҙгә бәрелеп тора. Көньяҡ Урал быуаттар дауамында төрки сығышлы ырыу-ҡәбиләләргә, тере магнит һымаҡ, үҙенә тартып торған, уларҙы һыйындырыу, ҡурсалау, туҡландырыу мөмкинлеген биргән, һәм тап шул тәбиғи мөхиттә башҡорттарҙың уртаҡ традицион мәҙәниәте, һәр кемгә аңлайышлы теле, матди һәм рухи мираҫы формалашҡан.

(Дауамы 15-се биттә).

***✓ Ысынбарлыҡ беҙ уйлағанса, беҙ күҙаллағанса ябай ғына түгел. Донъялыҡта аңлашылмаған серҙәр-һорауҙар ҡалған икән, артабан уларҙың яуабы бар, булырға тейеш...***




Әжәл, хурлыҡтан ҡотҡарып, эске азатлыҡ бирә икән. Кешелек дәрәжәңде һаҡлап алып ҡалыу мөмкинлеге... Үҙ яҙмышыңды үҙең һайлау хоҡуғы...

- Мин абзыйға яҡыныраҡ ултырам, - тине Сабир, үҙенә ҙурыраҡ киҫәк, тәмлерәк өлөш талап иткән бала һымаҡ. - Юғиһә, бер эт йәнмен мин, утта янмай, һыуҙа батмай торған холҡом бар... - тип өҫтәне ғәфү һорағандай.

* * *

Ҡайҙалыр йыраҡ түгел үҙәк өҙгөс итеп һалдат илай:

- Үлтерегеҙ! Хоҙай хаҡы өсөн үлтерегеҙ! - тип иңрәй ул. Яуҙашыңдың ғазабына шаһит булып та, бер нисек тә ярҙам итә алмауҙан тешеңде онтарҙай булып шығырҙатып, уртты сәйнәп ултырыуҙан башҡа сара юҡ. Електәрҙе ҡорошторор хәүефтән Азаматтың алдындағы берҙәнбер граната ғына йолоп тора.

- Үлтер, тип инәләсәкһегеҙ, тип вәғәҙә бирмәнемме ни мин һеҙгә? Әйттемме? - тип тамаҡ төбө менән хахылдай иҫерек тауыш. - Әйттем бит!

- Инәлеп һорағас, үлтер ҙә ҡуй! Һиңә бер пуля йәлме ни? - ти берәү ялҡау ғына. - Ялҡытты.

- Өнө тығылһын. Баш ҡалманы, - тип уға ҡушыла йәнә береһе. - Ял итке килә. Бик йәлләһәң, ҡана үҙем. - Һаңғырау ғына атыу тауышы. Тағы, тағы.

Әсирлекме, үлемме?

Уңған хужаның эре малына айырым, ҡош ҡортона айырым итеп бүлкәт-бүлкәт итеп ҡорған һарайы, снаряд ярсыҡтары сәрпәкләп, пулялар тишкеләп бөтһә лә, ниндәйҙер мөғжизә менән һаман теүәл тора. РПГ менән бер атһа, өф итеп күккә осор был бина кирбестән, таштан дан итеп төҙөлгән, ә хәҙер емерелеп, янып бөткән йорттар араһында бер үҙе ҡалған.

Яҙмыштарымы, булмыштарымы, ошонда был бишәүҙе бергә йыйған. "Даян" позывнойлы Азамат менән "Геродот" позывнойлы Ибраһим - "СССР-ҙа тыуғандар" быуынынан, "Уландар һәләк булғанда нисек өйҙә ятмаҡ кәрәк", тип ҡоралға тотонғандар. "Тарпан" позывнойлы Байсар менән "Мамай" позывнойлы Инсаф мобилизация буйынса килгән. "Шырмый" позывнойлы Сабир бер йыл хеҙмәт иткәндән һуң, командирының: "Кәрәк, улым! Илебеҙгә кәрәк!" тигән өгөтөн тыңлап контракт төҙөшкән.

Усҡа йомолған һуңғы гранатаға өмөт бағлап, арҡаға арҡа терәп ултырышҡандар. Арҡалаштар. Быуындан-быуынға тапшырыла килә, ахыры, яугир башҡортҡа - уратып алған дошманға яуҙашыңдың арҡаһынан таяныс табып, ҡуш ҡылыс менән ҡаршы тороу. Үҙҙәре лә һиҙмәй шулай урынлашҡан. Ә иптәшеңдең тән йылыһы күңелгә дауа: әлегә уларҙың күпмелер ваҡыты, ғүмере бар.

- Әлегә ҡанға туйҙылар, ахыры... - тип ҡуя Инсаф.

- Белеп булмай, - ти Байсар. - Уғата шашҡандар. Әҙәмлектәре ҡалмаған. Бөтә донъянан йыйылған шакалдарға тамаша кәрәк.

- Ә шулай ҙа сыҡмаған йәндә өмөт бар, - ти Сабир. Ғүмерҙә лә йәшәп туйып булмайҙыр был ерҙә. - Абзый, - тип өндәшә ул Азаматҡа, - һин һуңғы секундҡа тиклем һуҙ, йәме. - "Шырмый"ға егерме бер генә шул.

- Әлегә беҙҙең ваҡыт бар, - тип ҡабатланы Азамат.

* * *

"Даян" позывнойлы Азамат. Бөйөк Ватан һуғышын Берлинда тамамлаған Даян Буранбаевтың ейәне. Уға позывной һайлау ҡыйын булманы. Ҡан ҡеүәтен, нәҫел көсөн һуғышта айырыуса ныҡ тойҙо. Үҙенә тиклем йәшәгән аҫыл заттарҙың йәшәү энергияһы юҡҡа сыҡмаған. Тамырҙар ерҙән һурған тормош һуты япраҡтарҙы йәшәткәндәй, был энергия Азаматта йәшәүен дауам итә, уйҙарына, ҡылығына йоғонто яһай, ниндәйҙер мәлдәрҙә теге йәки был юлды һайларға мәжбүр итә. Әлеге һуғышта уны быуаттар буйы Рәсәй мәнфәғәттәрен яҡлап яу сапҡан бабаларының ҡото етәкләп алып йөрөтә, баш осонан пуляларҙы ҡыуып тарата, бәлә-ҡазаларҙан ышыҡлай. Айырыуса үлемесле хәүеф мәлдәрендә, ә бында үлем секунд һайын янай, был ҡурсыу айырыуса ныҡ һиҙелә, кемдеңдер талапсан ихтыяры һине алға әйҙәй йәки туҡтата, иҫкәртә. Быуаса йәшәп, баҡыйлыҡтан мәңгелеккә күскәндәр уны ҡалҡан булып ҡаплап тора. Ошонда ғына аңланы Азамат ни өсөн ир-егеттең борон-борондан "улым тыуһын" тип, вариҫ ҡалдырыуҙы иң мөһим итеп күргәнен. Нәҫелде быуаттан-быуатҡа тоташтырған бер ҡеүәтле ағым һайығып йә ҡороп ҡалһа, дөйөм тормош диңгеҙенең бөҫкәререн кешеләр элек-электән белгәндер. Моғайын, ошо ҡеүәткә нәҫелдең сифаты ла кәрәк, шуға ла ысын донъяға күскәндә әҙәмлегеңде һаҡлау мөһимдер...

Шуларҙы уйлай яугир. Сөнки был донъяның яҡтылығы һүнгәс, алдында асыласаҡ ишектә олатаһы ҡаршылаясағын белә ул. Ышана. Был ышаныу йәшәүенә лә, үлеменә лә мәғәнә бирә сөнки. Ысынбарлыҡ беҙ уйлағанса, беҙ күҙаллағанса ябай ғына түгел. Донъялыҡта аңлашылмаған серҙәр-һорауҙар ҡалған икән, артабан уларҙың яуабы бар, булырға тейеш...

"Һин дөрөҫ әйткәнһең, олатай", - тиер Азамат. Иң тәүге һүҙе шул булыр. Был иң тәүге һүҙ бынан өс тиҫтә йылдан ашыу элек башланып, тамамланмайынса ҡалған һөйләшеүҙең һығымтаһы булыр.

Азаматтың тормошонда осраған иң һоҡланғыс кеше булды Даян олатаһы. Дуҫ булырға, дуҫтарҙың ҡәҙерен белергә, яҡындарыңды, ҡан туғанмы, йән туғанмы, ҡәҙер итергә, тормоштан ләззәт алып йәшәргә өгөт-нәсихәт менән түгел, үҙенең миҫалында өйрәтте. Сөмҡара сәсле (һуңғы көнөнә тиклем йүнләп ағарманы), ҡыйылып киткән ҡара ҡашлы, ыҡсым ғына тура танаулы, ас яңаҡлы, үткер ҡарашлы сибәр кеше ине ул. Хәҙерге йәшенән ҡарай ҙа, өләсәһененең уны ғүмер буйы ҡыҙғанғанын, һәр ваҡыт уяу йәшәгәнен аңлай. Оҙон буйлы, сандыр кәүҙәле. "Күпме ашаһа ла йоҡмай ошоға", - тип бурылдар ине йомро ғына, йомшаҡ ҡына өләсәй хәләленә һоҡланғанын йәшерә алмай. Һуңғы көнөнә тиклем арҡаһы төҙ, аҙымдары етеҙ, еңел булды. Еңел кәүҙәле, тормош юлы буйлап уйын һымаҡ ҡына елеп барған йор һүҙле, ҡурҡыуһыҙ бер зат ине. Кешеһенә, дәрәжәһенә ҡарап тормай, уйлағанын бәреп әйтер, кәрәк тип һанағанды ғына эшләр, нәфсеһеҙ, тоғро, ғәҙел. Әгәр ҙә арбап алыр мөләйемлеге менән ихласлығы булмаһа, дуҫынан дошманы күберәк булыр ине, моғайын. Ә ул һәр кемдең күңеленә юл таба белде. "Кешенең етешһеҙлеген шундай итеп әйтергә кәрәк, ул үҙе лә һиңә ҡушылып көлөрлөк булһын", - тиер ине. "Нимәнән ҡурҡһын ул? Ун етеһендә, ике йәш өҫтәп, ағаһының документы менән һуғышҡа киткән. Әллә нисәмә тапҡыр яраланып, нисә ҡабат үлемдән ҡалған, иптәштәренең ҡулында йән биргәндәрен кисергән бит ул. Унын күрмәгәне ҡалмаған инде", - тиер ине өләсәһе. Ә был донъянан хәүефкә батып китте. Үҙенән һуң килгән быуындар өсөн йөрәге һыҙлап китте һалдат. Ваҡытында ул хәүефтең асылын аңламай ҙа ҡалған Азамат. Йәш булынған.

Ун бише менән барған саҡ. Октябрь байрамына университетта уҡып йөрөгән ағаһы ҡайтҡайны. Киске ашҡа олатаһы менән өләсәһен дә алдылар. Табын мул, өҫтәл түңәрәк, тигәндәй. Ғәҙәттәгесә, мөйөштә телевизор мөңгөрләй. Уға иғтибар биргән юҡ. Күңелле сөкөрҙәшеп һыйланып ултырыш. Бер мәлде олатаһы:

- Туҡтағыҙ әле, - тип телевизорға бородо ла, барып тауышын көсәйтте.

...Меңдәрсә кеше тантана итә. Музыка. Кемдер шампань шешәһен шартлата, кемдер әфлисун өләшә. Ҡыуанышып, Берлин стенаһын емерәләр. Шунда олатай руссалап:

- Это начало конца, - тине. Өндәшмәй ҡарап ултыра бирҙе лә өҫтәне. - Ошо ярыҡтан ҡырҡ беренсе йылда ҡасып ҡотолоп боҫҡан яуызлыҡ, әшәкелек, мәкер, ҡан ҡойош беҙҙең яҡҡа эркеләсәк. "Беҙ уларҙы еңдек. Быны беҙгә бер ваҡытта ла ғәфү итмәйәсәктәр", - тип Жуков дөрөҫ әйткән.

Азамат кинәт үҙгәреп киткән олатаһына аптырап ҡараны: йөҙө ағарынған, ирендәре ҡыҫылған, яңаҡтары эскә батҡан. Йылдар үткәс кенә бының әрнеү ҡатыш эске ярһыу булғанын аңланы.

Заман үҙгәрҙе бит инде, олатай. Донъя ла, кешеләр ҙә үҙгәрҙе. Кешелектең берҙәм, дуҫ булып татыу йәшәгеһе килә. Ике система туҡтауһыҙ ярышыуҙан, ҡоралланыуҙан туҡтап, бөтөн донъяла тыныслыҡ буласаҡ, тине "үҙгәртеп ҡороу" сәйәсәтенең шауҡымы аҫтында башы әйләнеп йөрөгән студент. Ә Азамат экрандағы һәйбәт кейенгән, матур кешеләрҙең ҡыуанысына ҡарап, шым ғына ағаһы менән килешеп ултырҙы.

- Тыныслыҡты быға тиклем беҙҙең еңеү тотоп торҙо, - тине олатай. - Донъялағы тигеҙлекте Советтар Союзының ҡеүәте һаҡланы.

- Тормош еңде, олатай. Һеҙ ҡаҙыған окоптарҙы йәм-йәшел үлән ҡапланы. - Ағаһы ул осорҙа шиғыр яҙа ине. - Тағы күпме тимер ҡоршау артына йәшенеп, "яуызлыҡ империяһы" данын күтәреп йәшәргә була?

- Әгәр ҙә тамағыңды туйҙырған, ҡәҙерләп үҫтергән, уҡытҡан, теләгән һөнәреңде алырға мөмкинлек биргән тыуған илең тураһында унын дошмандарының һүҙен һөйләйһең икән, һин ысынлап та уға, беҙҙең еңеүгә, лайыҡ түгелһең. - Ныҡ әсенеп әйтте. - Их, бала! Һинең бер ҡатлылығыңды ғәфү итергә була. Ә ил етәкселәренең алйотлоғомо, хыянатымы арҡаһында, бик күп ҡан ҡойолмағайы, - тине. - Кешеләр ҙә, донъя ла үҙгәрмәй. Рәсәйҙең дошмандары һәр ваҡыт бер үк булды. Улар һине насар йәки кәм булғаның өсөн түгел, барлығың өсөн күрә алмай. Алмаясаҡ та. Уларға һин түгел, ерең, байлығың кәрәк.

Олатайҙың һүҙен раҫлап, ике йылдан, 1991 йылдың 25 декабрендә, ғәзиз ватаны, фашизмды еңгән, донъяла территорияһы буйынса беренсе, халҡы буйынса өсөнсө урынды алып торған Совет Социалистик Республикалар Союзы бөтөрөлдө. "Үлтерелде, - тине олатай. - Юҡҡа ғына беҙҙең быуындың үлеп бөткәнен көтмәгәндәр икән. Инде уларға ҡаршы тороусы булмаҫ".

Киләһе яҙына ул үҙе лә китеп барҙы. Һуңғы тапҡыр 9 майҙа, йылдағыса, ауыл советы үткәргән Еңеү байрамына барып ҡайтты.

- Сафтар әптән һирәгәйгән, - тине. - Снарядтар бөтөнләй әргәлә генә шартлай башланы. - Ләгер генә ҡәнәфер сәскәһе бүләк иткәйнеләр. Ғәҙәтенсә, уйынсалап: "Сәскәм дә үҙемә оҡшап, һәлберәп кенә торһа ла, барыбер сәскә бит әле. Тәрән хөрмәтем билдәһе булараҡ, ҡосаҡҡа һыймаҫлыҡ гөлләмә итеп ҡабул ит", - тине лә, хәрбиҙәрсә ботинкаһының үксәһен үксәгә һуғып, әбейенә тотторҙо. Арҡаһы һаман төп-төҙ, йөҙө асыҡ, кәйефе күтәренке ине. Шунан: "Был минең һуңғы байрамым булды инде", - тип түшәккә ятты, ҡабат торманы.

Байтаҡ ваҡыттар үткәс, сираттағы йыллығында, Азамат унын йәш ваҡыттағы альбомын аҡтарып ултырҙы. Шунда быға са күрмәгән фотоға тап булды.

Берлин. 1945 йыл. Олатаһы үҙенең яуҙаштары менән. Артта емерек ҡаланың харабалары. Уң яҡтараҡ таҡтала: "Һеҙ Совет секторынан сығаһығыҙ. Ҡорал йөрөтөү тыйыла..." тип яҙылған. Еңелгән һәм секторҙарға бүленгән Берлин. Ҡаланы бүлгеләү 16 йылдан һуң Берлин стенаһын ҡороуға килтергән. Ә фотола улар тап шул стена ҡалҡасаҡ урында баҫып тора. Быңа-быңа һалҡын һуғыш башланырға торған ваҡыт. Олатайҙың "Бөтә яуызлыҡ шул яҡҡа сығып боҫҡайны", тип әйтергә тулы хоҡуғы бар. Ошо йәш, көләс, сибәр еңеүселәрҙән шул яҡҡа ҡасып ҡотолған фашизмдың ҡурҡыныс, мәкерле, имәнес йөҙө уға яҡшы таныш булған.

Ә олатайҙың әйткәндәре ғәмәлгә ашыуын дауам итте: тағы ла ике йылдан лаяҡыл иҫерек президент, бөтә донъя алдында маймылланып, еңеүсе илдең ғәскәрен Германиянан сығарҙы. Быны телевизорҙан күргәс, өләсәһе:

- Ярай олатайығыҙ үлеп ҡотолған, - тине. - Был мәсхәрәнән йөрәге шартлар ине!

Олатаһының ғүмере буйы Мәскәү радиоһынан "Яңылыҡтар", "Һуңғы хәбәрҙәр" тапшырыуҙарының һәр бер сығарылышын, аҙна һайын донъялағы хәлдәргә арналған "Халыҡ-ара панорама" тапшырыуҙарын ҡалдырмай ни өсөн тыңлағанын аңланы шунда Азамат. Ватан өсөн үҙҙәрен ҡорбан иткән яуҙаштары алдында яуаплылыҡ тойған Еңеү һалдаты ғүмере буйы донъяның йөрәк ҡағышын тыңлап, уяу йәшәгән.

- Беҙ намыҫлы ғүмер иттек... Еңелмәй китәбеҙ. Инде һеҙҙең үҙегеҙҙең тормош, - тине ул бәхилләшкән сағында.

Ә бөгөн ейәне уға: "Һин тулыһынса хаҡлы булғанһың, олатай, - тиер. - Беҙ ҙә еңелмәйбеҙ".

**(Дауамы. Башы 14-се һанда).**

✓ *"Мин бер ҡасан да скептиктарға яуап бирмәйем. Хоҙай үҙе хөкөм итер. Республика халҡының хуплауы уларға яуап булһын. Беҙ дөрөҫ эшләйбеҙ, - тине Радий Хәбиров. - Беҙҙең Башҡорт опера һәм балет театры бында - Мәскәүҙә".*

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ҠАҺАРМАНДАР ХАҠЫНДА ҺӨЙЛӘЙЕК!



**Республикабыҙҙың Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында Мөнир Ҡунафин әҫәре буйынса "Бер ғүмер етмәй икән..." спектакле ҡуйылды һәм тамашасы тарафынан бик йылы ҡабул ителде.**

Спектаклдең жанры - илһөйәрлек тураһында драматик поэма. Жанрға ярашлы, былай әҫәрҙең йөкмәткеһендә башлыса халыҡ тормошоноң ижтимағи һәм тарихи моменттары сағыла. Был осраҡта сәхнә әҫәрендә Махсус хәрби операция ваҡиғалары тасуирлана. Ошо сараның батырҙары, ҡаһармандары хаҡында бәйән ителә.

Әҫәрҙә уйлап сығарылған тарих та, геройҙар ҙа юҡ. Геройҙарҙың һәр береһенең үҙ холҡо, үҙ фекере, үҙ тарихы. Уларҙың уртаҡ маҡсат тирәләй берләшә алыуы һыҙланыуҙар, һыныуҙар, тетрәнеүҙәр аша тасуирлана. "Каһарман", "Хакер", "Историк", "Сәсән", "Иман", "Малыш", "Хәсән", "Носорог" ҡушаматлы яугирҙарҙың, Анастасия исемле украин ҡыҙының, сыҙамлыҡ һәм тоғролоҡ билдәһе булған Әсә, Ҡыҙ һәм Ҡатын образдарының яҙмыштары, илһөйәрлеге һәм батырлыҡтары аша тамашасы һуғыш асылын күҙ алдына килтерә.

Билдәле шәхестәр хаҡында спектакль ҡуйылһа, геройҙарҙың тыуған яғына барып ҡайтыу - театрҙың матур традицияһына әйләнде. "Бер ғүмер етмәй икән..." спектакленең ижади төркөмө ошо көндәрҙә Тәтешле районына барып ҡайтты. Актерҙар Үрге Тәтешлелә тарих-тыуған яҡты өйрәнеү музейында булып, унда тәтешлеләрҙең Бөйөк Ватан һуғышы һәм башҡа хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусылары тураһындағы хәтерҙе ҡәҙерләп һаҡлауына шаһит булды. Экскурсия аҙағында актерҙар һәм башҡорт труппаһының баш режиссеры Рөстәм Хәкимов Фәнис Хөсәйеновҡа арналған баннер янында фотоға төштө һәм музейҙың тәҡдимдәр китабында йылы баһаламалар ҡалдырҙы.

Мөнир Ҡунафин пьесаһы буйынса ҡуйылған "Бер ғүмер етмәй икән..." спектакле менән театр коллективы Үрге Тәтешле район мәҙәниәт йортонда сығыш яһаны. Тамашасылар араһында Махсус хәрби операцияла һәләк булған Фәнис Хөсәйеновтың әсәһе Фәриҙә Мәғдән ҡыҙы һәм яугирҙың ҡыҙы Әминә лә бар ине. "Атайым тураһында ҡуйған тамаша минә бик оҡшаны", - тип рәхмәттәрен еткерҙе бәләкәй генә ҡыҙсыҡ артистарға. Ул "Каһарман" образын һынландырған актер Байегет Мөхәрләмовты яҡын күреп, оҙаҡ ҡына эргәһенән ебәрмәне. Кисә һуңында Фәнис Хөсәйеновтың әсәһе, Тәтешле районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Әлфиә Шәйнурова, Бүлкәйпан ауыл биләмәһе башлығы Флүр Зиннәтуллин һәм Ветерандар советы рәйесе Әнәс Мәғзүмов бөтә труппаға таланты һәм сәнғәткә тоғролоғо өсөн рәхмәт белдерҙе. Әҫәр авторы Мөнир Ҡунафиндың был кисәлә сәхнә түрендә булыуы ҙур мәртәбә ине.

**Рәзилә ЫРЫҪҠУЖИНА,**
**театрҙың әҙәбиәт бүлеге етәксеһе.**

# ЫСЫН ТЫЛСЫМСЫ УЛ!

**Мәскәүҙә 2023-2024 йылдар миҙгеле йомғаҡтары буйынса "Алтын битлек" театр сәнғәтен үҫтереүгә ҙур өлөш индергән һәм Рәсәй театр сәнғәтенә ярҙам иткән сәнғәт әһелдәренә махсус премиялар тапшырыу тантанаһы үтте. Номинация лауреаттары булған Рәсәйҙең 12 күренекле сәнғәт эшмәкәре араһында Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры артисы, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Айрат Әхмәтшин да бар.**

Тапшырыу тантанаһында Айрат Әхмәтшинды Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Альберт Имаметдинов оҙатып йөрөнө. "Был театрыбыҙ өсөн генә түгел, бөтә республикабыҙ өсөн дә тарихи ваҡиға - күренекле артисыбыҙ, легендар ҡурсаҡсы "Сәнғәт үҫешенә ҙур өлөш индергәне өсөн" премияһына лайыҡ булды,- тип билдәләне Альберт Имаметдинов. - Айрат Әкрәм улы Әхмәтшин - беҙҙең ғорурлығыбыҙ. Ҡурсаҡтарҙы "йәнләндереүен" күргән һәр кем тылсымға, йәнһеҙ матдәнең тереләү мөғжизәһенә шаһит була! Айрат Әкрәм улы - ысын тылсымсы! "Волшебник изумрудного города" спектаклендә беҙ уға Гудвин ролен ышанып тапшырҙыҡ, был роль - Әхмәтшиндың ысын бенефисы, унда ул таяҡ ҡурсаҡ менән дә, планшет менән дә, битлек кейеп тә уйнаны. Айрат Әхмәтшин - театрыбыҙҙың иң төп тылсымсыһы, һәм барыбыҙға ла унан өлгө алырға кәрәк!"

Театрҙың матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, Айрат Әхмәтшин башҡорт ҡурсаҡ театрында 58 йыл хеҙмәт итә. Унда эшләгән йылдарында ул ҡурсаҡ театр сәнғәтенең классикаһына әйләнгән күренекле ролдәр галереяһын булдыра: "Илаһи комедия" спектаклендә - Фәрештә (И. Шток), "Аҡ пароход"та - Кулубек (С. Айтматов), "Утты ташлама, Прометей"ҙа - Гермес (М. Кәрим)," Диктаторға ат"та - Диктатор (М. Кәрим), "Һинд легендаһы"нда - Ра Рама (Н.Гусева, С. Потабенко), "Алтын тауыҡ" та Бүре (В. Орлов) һәм башҡалар. "Ваҡыт буйлап ғәжәп сәйәхәт" спектаклендә Айрат Әхмәтшин үҙен-үҙе уйнаны.

Премия һәм "Алтын битлек" фестивале РФ Президентының Мәҙәни башланғыстар фонды ярҙамында үткәрелә.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

# БЕРГӘЛӘП БЕЙЕЙБЕҘ!

**18 апрелдә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең һәм "Донбасс" атҡаҙанған дәүләт академия йыр һәм бейеү ансамбленең берлектәге концерты була.**

Концерт Президент иғлан иткән Ватанды һаҡлаусылар йылына һәм Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына арнала. "Концерт программаһы "Йәшәйәсәкбеҙ" тип атала, - тип белдерҙеләр ансамблдең матбуғат хеҙмәтендә. - Һуғыш йылдарындағы үлемһеҙ әҫәрҙәр һәм заманса композициялар һәр тамашасының йөрәгенә үтеп инерлек. Уларҙа 80 йыл элек еребеҙҙә тыныслыҡ һәм азатлыҡ өсөн көрәшкән атай-олатайҙарыбыҙға сикһеҙ рәхмәт тойғоһо сағыла".

"Донбасс" - Донецк Халыҡ Республикаһының визит карточкаһы (генераль директоры һәм художество етәксеһе - Ольга Горячева). Коллективтың ижады ла 100-ҙән ашыу милләт вәкиле йәшәгән төбәк көйөк сағыу һәм күп милләтле. "Донбасс" ансамбле 1937 йылда композитор Зиновий Дунаевский ойоштора. Шахтерҙар ансамбле (коллективтың тәүге исеме) Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Көньяҡ фронтта сығыш яһай, меңгә яҡын концерт бирә, "Кавказды обороналаған өсөн" һәм "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы осоронда маҡтаулы хеҙмәте өсөн" миҙалдары менән бүләкләнә. Коллективтарҙың бер сәхнәлә сығыш яһағаны бар. 2021 һәм 2022 йылдарҙа Өфөлә ансамблдәрҙең берлектәге концерты үтте, тип асыҡлыҡ индерҙеләр ансамблдең матбуғат хеҙмәтендә.

# ҘУР ТЕАТР СӘХНӘҺЕНДӘ - БЕҘҘЕКЕЛӘР!

**Рәсәйҙең Ҙур театрының тарихи сәхнәһендә Башҡорт дәүләт академия опера һәм балет театры "Рахманинов. Ғүмергә торошло симфония" балет-фантазияһын күрһәтте.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының махсус хәбәрсеһенә биргән интервьюһында мәҙәни ваҡиғаның республиканың театр тормошонда оло әһәмиәткә эйә булыуын билдәләне. Уның һүҙҙәренсә, Мәскәү сәхнәһендәге премьера Башҡортостан алып барған сәйәсәттең логик дауамы булды. "Хәтерегеҙгә төшөрәм, беҙҙең артистар труппаһы Ҙур театрҙа һуңғы тапҡыр 1955 йылда сығыш яһаған. Дүрт йыл элек Ҙур театр етәкселеге менән һөйләшеүҙәр алып барҙыҡ, ул саҡта Валерий Гергиев етәксе ине. Беҙ уның менән йыл да Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры постановкаларын күрһәтеү тураһында һөйләшеп килештек. Беренсенән, барыһы ла беҙҙең спектаклдәрҙең сифаты, уларҙың юғары кимәле менән таныш. Икенсенән, бындай ваҡиға - Башҡортостандың абруйы, республика мәҙәниәтенең кимәле тураһында һөйләй. Беҙ бында "Аттила", "Садко", "Дон Кихот", бөгөн иһә "Рахманинов. Ғүмергә торошло симфония" спектаклдәрен ҡуйҙыҡ. Әле киләһе йылда спектаклдәр күрһәтеү тураһында һөйләшеүҙәр алып барабыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Ул ошондай саралар өсөн сығымдарҙы артыҡ тип иҫәпләгән скептиктарҙың һорауҙарына ҡарата ла үҙ фекерен белдерҙе. Башҡортостан Башлығы уларға яуап бирергә йыйынмай, сөнки бындай ваҡиғаларҙы республика халҡы хуплай. "Мин бер ҡасан да скептиктарға яуап бирмәйем. Хоҙай үҙе хөкөм итер. Республика халҡының хуплауы уларға яуап булһын. Беҙ дөрөҫ эшләйбеҙ, - тине Радий Хәбиров. - Беҙҙең Башҡорт опера һәм балет театры бында - Мәскәүҙә. Ҙур театрҙың тарихи сәхнәһе - һәр артистың хыялы".

"Рахманинов. Ғүмергә торошло симфония" - бөйөк рус композиторы, пианист һәм дирижер ижадына арналған биографик балет. Балеттың премьераһы 2023 йылдың 24 ноябрендә Башҡорт дәүләт академия опера һәм балет театрында бөйөк рус композиторының 150 йыллығы билдәләнгән йылда күрһәтелде.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# ЛАЙЫҠЛЫ БАҺАЛАП...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Әй Йола" төркөмө музыканттарын юғары исемдәр менән бүләкләйәсәк. Ошо туралағы указға ҡул ҡуйыуы хаҡында республика Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә хәбәр итте.**

- Республикабыҙҙың мәҙәни тормошонда мөһим ваҡиға. Беҙҙең "Әй Йола" төркөмө "Һомай" хиты менән бөтә донъяны яуланы. Афариндар! Улар миңә лә йырҙарын ебәрҙеләр. Төркөмдә Башҡортостан мәҙәниәтенә оҙаҡ йылдар хеҙмәт иткән артистар булдырған. Уларға республикабыҙ мәҙәниәтенә индергән өлөшө өсөн рәхмәтемде белдерәм, - тине Радий Хәбиров.

Ринат Рамаҙановҡа - "Башҡортостандың халыҡ артисы", ә Адель һәм Руслан Шәйхетдиновтарға "Башҡортостандың атҡаҙанған артисы" исеме биреләсәк. Артистарға наградалар тантаналы шарттарҙа тапшырыласаҡ.

"Һомай" йыры Рәсәй хит-парадында беренсе урынды биләй, композиция Джиган, Анна Асти һәм башҡаларҙы, ә донъя чартында Леди Гага, Бруно Марсты һәм башҡа йырсыларҙы ла уҙып китте. "Әй Йола" төркөмө йырҙарын интернетта миллион тапҡыр ҡарағандар. "Һомай" хиты Shazam сервисында дүртенсе урынға күтәрелһә, "Яндекс. Музыка" чартында алдынғылыҡты яуланы. Йырҙы төрлө илдәрҙә һәм Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә төрлө телдә башҡаралар.

# КИТАП БАЙРАМЫНА КИЛ!

**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте беренсе тапҡыр 2024 йылда дөйөм тираж күләме буйынса Рәсәйҙең 50 нәшриәте иҫәбенә инде. Был турала Рәсәйҙең китап палатаһы мәғлүмәттәренән билдәле булды. "Китап"тың тиражы - 609,46 мең дана. Республика нәшриәте директоры вазифаһын башҡарыусы Эльмира Хәйретдинова "Китап"тың абруйлы федераль рейтингка ингән берҙән-бер милли дәүләт нәшриәт булыуы хаҡында һөйләне.**

"Былтыр беҙҙә 151 китап баҫылып сыҡты, бүләк баҫмалары нығ күп булды. Шулай уҡ беҙ төбәк һәм ил күләмендә 16 награда алдыҡ, икенсе йыл рәттән "Башҡортостандың 100 иң яҡшы тауары" һәм "Рәсәйҙең иң яҡшы тауарҙары" билдәһенә эйәһе булдыҡ. Республиканан ситтә лә башҡорт китаптарына ҡыҙыҡһыныу бар - маркетплейстарға сығарғас, һатыу ҡырҡа артты, баҫмалар Ҡаҙағстанға, Белоруссияға һәм башҡа илдәргә оҙатылды", - ти мәғлүмәт агентлығы әңгәмәсеһе.

Нәшриәт 30 майҙан 1 июнгә тиклем Өфөнөң Совет майҙанында үтәсәк "Китап байрамы" халыҡ-ара китап йәрминкәһенә бик күп ҡыҙыҡлы саралар планлаштыра, тип билдәләне Эльмира Хәйретдинова. "Китап байрамы"нда "Урал батыр ерендә йыл китабы" конкурсы ойоштороло. Күп нәшриәттәр беҙгә килергә тырыша, сөнки Китап байрамында баҫмалар яҡшы һатыла, беҙ башҡа төбәктәр менән килешеүҙәр төҙөйбеҙ, авторлыҡ хоҡуҡтары менән эш итеү тәжрибәһе менән уртаҡлашабыҙ. Ә 9 майға аудиоҡушымта менән бергә башҡорт телендә "Геройҙар юлы менән" китабын әҙерләйбеҙ. Унда Бөйөк Ватан һуғышы, Махсус хәрби операция хаҡында хикәйәләр тупланаҙ", - тине ул.

Ҡағыҙ баҫмаларҙан тыш, "Китап" аудиокитаптар йүнәлешен дә үҫтерә. "2023 йылдан әҫәрҙәребеҙҙең аудиоверсиялары сыға, улар айырыуса йәштәр араһында бик популяр.

ИНТЕРНЕТТАН



# ИЛАП АЛЫРҒА ЛА КӘРӘК

■ Валенсия университеты ғалимдары сабый илауының тотош классификацияһын төҙөгән. Бала нимәгә илауын аңлау өсөн уның йөҙөнә ҡарау ҙа етә, тип яҙа "МедВести". Тикшеренеүҙәрҙең авторы доктор Мариано Холиз иҫәпләүенсә, илау - бала өсөн үҙенең негатив эмоцияларын күрһәтеүҙең берҙән-бер юлы. Уның йөҙөндәге мимикаға ҡарап, яҡынса илауҙың сәбәбен аңларға мөмкин. Әгәр ҙә бала илағанда уның күҙҙәре асыҡ икән, ул йә ҡурҡҡан, йә көйгән. Күҙҙәрен йомоп илаһа, уның ҡайһылыр ере ауырта. Бынан тыш, илау тауышы ла әһәмиәтле. Үпкәләгән бала башта ҡысҡырып илай, әммә яйлап тауышын баҫа бара. Ауыртыуҙан илағаны иһә, киреһенсә, тыныс ҡына илай башлап, оҙаҡ итеп ҡысҡырып илаясаҡ. Ҡурҡҡан осраҡта ла ошондай хәл буласаҡ. Психологтар раҫлауынса, эскә йомолған кире тойғолар, ҡайғылар, үпкәләүҙәр физик сәләмәтлек өсөн зыянлы. Шуға ла улар ололарға ла илап алырға кәңәш итә. Табиптар белдереүенсә, иламай сыҙап йөрөү үлем хәүефен тыуҙыра, шуға ла ирҙәрҙең ҡатындарға ҡарағанда уртаса 7 йылға әҙерәк йәшәүендә ошо сәбәп ятыуы ихтимал, ти улар.

■ Бөтөн донъя яман шеш тикшеренеүҙәре фонды белгестәре фекеренсә, йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн дә файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урын биләй. Физик әүҙемлек матдәләр алышыныу һәм организмдың таҙарыныу процесын көсәйтә. Яман шештең күп төрҙәре менән тап физик күнекмәләр ярҙамында көрәшергә була, тип белдерә ғалимдар.

■ Американың Йәмәғәт сәләмәтлеге ассоциацияһы мәғлүмәттәренә ярашлы, мәктәп йәшендәге балаларҙың яҡынса 11,5 проценты көнөнә өс сәғәт тирәһе ваҡытын социаль селтәрҙә аралашып үткәрә. Ғалимдар туплаған статистик мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, был үҫмерҙәр насар ғәҙәттәргә тиҙерәк бирелә. Улар араһында стресс, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар, суицид осраҡтары йышыраҡ осрай. Ғәҙәттә, улар насарыраҡ өлгәшә һәм шуға ла ата-әсәләре менән конфликтҡа инә. Бынан тыш, был үҫмерҙәрҙең 62 проценты тәмәке тарта һәм 79 проценты алкоголле эсемлек ҡуллана. Белгестәр әйтеүенсә, социаль селтәрҙәрҙә әүҙем аралашыусы үҫмерҙәр иртә енси тормош башлай һәм улар араһында наркомандар күберәк була.

■ Зифа буйлы булырға хыялланған ҡатын-ҡыҙҙар йыш ҡына шәкәрҙән баш тартып, шәкәр алыштырыусы ҡуллана. Күптәр был шәкәр алыштырыусыны организм өсөн бөтөнләй зарарһыҙ, тип иҫәпләй. Әммә уның составында ацесульфам йөрәктең ағзаларҙы ҡан менән тәьмин итә алмауына, цикломат бөйәр сирҙәренең көсәйеүенә килтереүе ихтимал. Шәкәр алыштырыусылар үт ҡыуығы юлдары сирҙәре менән яфаланыусыларға ла зарарлы. Ҡайһы берәүҙәр шәкәр урынына фруктоза, сорбит йәки ксилит ҡуллана, әммә улар калорияһы буйынса шәкәрҙән айырылмай. Табиптар фекеренсә, иң зарарһыҙы булып фруктоза тора, сөнки уның составында организмға зыян килтереүсе компоненттар аҙыраҡ.

БАҠСА



# УҢЫШ ҮҘЕГЕҘГӘ ЯҘҺЫН!

**Яҙғы баҡса эштәре - ул күңелле һәм шул уҡ ваҡытта бик яуаплы. Эште башлар алдынан иң тәүҙә баҡсаның хәл-торошон ҡарап, тикшереп сығығыҙ. Ағас-ҡыуаҡтарҙың тәүге япраҡтары сыҡҡансы, уларға санитар эшкәртеү үткәрегеҙ, йәғни ҡырҡҡылағыҙ. Был эш өсөн иң уңайлы ваҡыт, әлбиттә, марттың икенсе яртыһы йәки апрель башы. Һынған, ҡороған ботаҡтарын әле лә алырға һуң түгел. Күптәр үҫемлектең дөйөм сәләмәтлеген яҡшыртырға булышлыҡ иткән ошо эшкә бик илтифат итмәй.**

Шулай уҡ апрелдә ағас тамырҙарының тирә-яғын таҙартыу ҙа файҙалы. Яҙ көнө тупраҡтағы ямғыр һыуы ағастың тамыр системаһына зыян килтермәһен өсөн, тирә-яғындағы тупраҡтың өҫкө ҡатламын киптереү сараларын күрергә кәрәк. Уңдырышлыҡты арттырыу маҡсатында органик ашлама ҡулланырға кәрәк, мәҫәлән, компост, торф кеүек материалдарҙы файҙаланырға мөмкин.

Нимәне ҡайҙа ултыртырға кәрәк, уларҙың участкаларын, түтәлдәрен алдан билдәләгеҙ. Иртә сәскә ата торған *мимоза, нарцисс һәм ләлә* сәскәләре ултыртығыҙ. Улар баҡсағыҙҙы яҙғы матурлыҡ менән байытып ҡына ҡалмай, күңелегеҙҙе лә күтәрер. Сәскәс тә ашлама индерегеҙ, шул ваҡытта сәскәләре ҙурыраҡ һәм матурыраҡ булыр.

Дөйөм алғанда, яҙғы баҡса эштәре - ул ғәжәйеп процесс, ул ниндәйҙер кимәлдә кешене рухландыра, күңелен яҡты, матур уйҙар менән байыта. Мин үҙем нимә генә ултыртһам да, йәйге, көҙгө миҙгелдә ала торған уңыш мөмкинлектәрен күҙ алдына килтереп, дәртләнеп-илһамланып йөрөйөм.

Апрелдә *помидор һәм борос үҫентеләрен* тәрбиәләү өсөн мөһим ваҡыт. Үҫенте ерҙәренә ашлама индерелә. Көн йылы булһа, теплицаға ултыртырға мөмкин. Һыуыҡ торһа, стакандарға күсерегеҙ. Помидорҙар өсөн температура режимын мотлаҡ тоторға кәрәк. Мул уңыш алыу өсөн агротехник сараларҙы үтәү мөһим. Теплицалағы түтәлгә органик ашламалар, мәҫәлән, компост, торф ҡулланып, тупраҡтың уңдырышлылығын арттырырға мөмкин.

***Борос йылы ярата.*** Йылы һәм дымлы урында яҡшыраҡ үҫә.

Апрелдә ***шалҡан*** ултыртырға мөмкин. Был культура талапсан түгел һәм тиҙ өлгөрә. Орлоҡтар +2 - +4 градуста шытып сыға ала, ә үҫемлектәре -5 градусҡа тиклем ҡыраууҙы күтәрә. Шалҡанды органика менән алдан ашламаланған йомшаҡ тупраҡҡа сәсәләр, ул ҡуҙаҡлы культураларҙан һуң яҡшыраҡ үҫә. Түтәлгә йылы һыу ҡояләр, орлоҡто 1-1,5 см тәрәнлеккә ултырталар. Тәүге япраҡтары барлыҡҡа килгәс, ғәҙәттә, шытып сыҡҡандан һуң 7-10 көн үткәс, үҫемлек араһында 3-4 см ҡалдырып һирәгәйтәләр. 10-12 көндән һуң араүҡты 6-8 см тиклем арттырып, икенсе тапҡыр һирәкләйҙәр. Тамыраҙыҡ барлыҡҡа килгән осорҙа күп һыу һибегеҙ.

Шулай уҡ редис, салат, төрлө тәмләткес йәшелсә, кишер, шпинат, сельдерей, бер аҙҙан йылы һөйөүсе рукколаны сәсергә мөмкин.

***Орлоҡтарҙың (петрушка, сельдерей, шпинат, кинза) шытып сығыуын арттырыу өсөн уларҙы шытып сыҡҡансы йылы, дымлы урында ҡалдырырға, ә һуңынан һыуыҡта сыҙамлылығын арттырыу өсөн 5-7 көнгә һыуытҡысҡа ҡуйырға кәрәк.*** Рәттәрҙе яҡынса 6 сантиметр алыҫлыҡта эшләргә, орлоҡтар араһын 5-15 сантиметр (киләсәк үҫемлектең ҙурлығына ҡарап), тәрәнлеген 1 сантиметр эшләгеҙ.

***Картуф орлоғон алдан әҙерләгеҙ:*** ике аҙна самаһы йылы урында (18 градус) тотоғоҙ. Уларҙы дымлы ағас онтағы, торф йәки ҡом һалынған бейек булмаған йәшниктәргә һалырға мөмкин. Артабан картуфты яҡты, йылы (13 - 15 градус) бүлмәгә күсерегеҙ.

Һуған орлоғон йылыраҡ урынға сығарып ҡуйығыҙ. Ауырыу ҡуҙғағе барлыҡҡа килмәһен өсөн, уны 30 градус температурала 2-3 көн киптерегеҙ. Һуңынан уны ултыртҡансы 18 - 20 градуста һаҡлағыҙ.

Һәр баҡсасының үҙенең уңыш сере бар, әлбиттә. Был кәңәштәр ҙә шартлы ғына. Уңыш ултыртҡан кешенең ҡулына ғына түгел, һауа торошона ла бәйле.

Шулай ҙа барығыҙға ла мул уңыш алыуығыҙҙы, үҫтергән йәшелсә-емештәрегеҙҙе иҫән-һау ашауығыҙҙы теләйем.

**Ильвира ЗАҺИҘУЛЛИНА.**
**Көйөргәҙе районы.**

ҺИНЕҢ ХОҠУҒЫҢ

# КҮРШЕЛӘРҘӘН ТЫНҒЫ ЮҠМЫ?



**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт йыйылышы "Граждандарҙың тыныслығын һәм тынлығын тәьмин итеү тураһында"ғы республика законының үтәлешен тикшерергә планлаштыра һәм байрам көндәренә ҡағылышлы өлөшөнә үҙгәрештәр индереү мөмкинлеген ҡараясаҡ.**

Мәҫәлән, күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр төнгө 23 сәғәттән иртәнге 7 сәғәткә тиклем (ял көндәрендә 9 сәғәткә тиклем) һәм көндөҙ 13 сәғәттән 15 сәғәткә тиклем тынлыҡ һаҡларға тейеш. Билдәләнгән тәртипте боҙған өсөн административ яуаплылыҡ ҡаралған. Шул уҡ ваҡытта халыҡ йыш ҡына, мәҫәлән, Яңы йыл каникулдарында, көслө тауышлы ремонт эштәренең тәртипте боҙоу тип иҫәпләнмәүенә ризаһыҙлыҡ белдерә. Байрам осороно ҡағылышлы ғәмәлдәге нормаларға төҙәтмәләр индереү кәрәклеге тураһында тәҡдимдәрҙең береһен "Башинформ" журналисы индерҙе. Депутаттар кешеләргә ял итергә һәм шул уҡ ваҡытта өй һәм ремонт эштәрен башҡарырға мөмкинлек биргән компромисс табырға ниәтләй.

# ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығында күп фатирлы йорттағы тауыш буйынса кемгә мөрәжәғәт итергә кәрәклеген аңлаттылар.**

Әгәр тауыш вентиляция һәм кондиционер системаларына, йылытыуға, лифт эшенә, торлаҡ йортҡа төкәтеп ҡоролған объекттарҙың (сауҙа, хеҙмәтләндереү, йәмәғәт туҡланыуы предприятиелары) һыуытҡыс ҡорамалдарына бәйле булһа, мөрәжәғәтте күҙәтеү ведомствоһы ҡарай. Бынан өсөн, тәү сиратта, һеҙҙең идара итеү компанияһына йәки хоҡуғығыҙҙы боҙған ойошмаға яҙма рәүештә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Талабығыҙҙа проблеманың сәбәбен, уны бөтөрөү ваҡытын күрһәтергә кәрәк. Әгәр яуап булмаһа, Роспотребнадзорға йәки судҡа мөрәжәғәт итегеҙ. 2024 йылда күҙәтеү ведомствоһы Өфөлә генә 127 тауыш буйынса мөрәжәғәтте ҡараны, шуларҙың 70 процентында гигиеник нормативтарҙың юғары булыуы раҫланды. Әгәр тауыш күршеләргә бәйле булһа, Роспотребнадзор ярҙам итмәйәсәк, полицияға мөрәжәғәт итергә кәрәк.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



# ЙӘМҒИӘТ - РӘХИМЛЕЛЕК,

## тарҡалыу һәм бәхәстәр - яҙа

**Кешенең Исламға ярашлы йәшәү шарттарының береһе - ул йәмғиәттә берҙәм булыу.**

Ҡөрьән-Кәримдә шулай тиелә: "Һеҙҙән йәмғиәт ойошасаҡ. Һәм ул яҡшылыҡҡа өндәйәсәк, ә насарлыҡтан арындырасаҡ. Һәм шул кешеләр именлектә буласаҡ". Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) ошоға өҫтәп: "Арабыҙҙа һәр ваҡыт Хоҙайҙың әмерен үтәүселәр булыр. Уларҙы һис кем хурлай алмаҫ, бер кем уларға ҡаршы тора алмаҫ", - ти.

Шулай итеп, йәмғиәт эсендә булған берҙәмлек маҡсатҡа өлгәшеүҙең шарты булып тора. Йәмғиәт ҙур булмаһа ла, әгәр берҙәм икән, көслө буласаҡ, ә ҡаршылыҡтар, бәхәстәр һан менән алдырғандарҙы ла көсһөҙгә әйләндерә, тарҡата. Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) әйткән: "Аллаһтың мәрхәмәтлелеге - йәмғиәттә. Кем унан айырыла, йәһәннәм утына инер". Тағы ла: "Йәмғиәт - рәхимлелек. Тарҡалыу һәм бәхәстәр - яҙа". Ҡөрьәндә Хоҙай беҙҙе шулай тип иҫкәртә: "Бер-береһе менән килешә алмағандар һәм төркөмдәргә бүленгәндәргә оҡшамағыҙ. Уларға ҡаты яҙа әҙерләнгән"; "Аллаһы Тәғәләгә һәм уның илсеһенә буйһоноғоҙ һәм үҙ-ара бәхәстәргә инмәгеҙ, юҡһа, ҡыйыулыҡтан һәм ҡеүәттән мәхрүм ҡалырһығыҙ. Сабыр булығыҙ, сөнки Аллаһ - сабырҙар яғында".

Бынан тыш, күп аяттарға, хәҙистәргә булған комментарийҙарҙа, Ислам йәмғиәте берләшеү арҡаһында ғына Аллаһтың яҙаһына, баҫылыуға һәм данһыҙлыҡҡа илткән эске тарҡалыуҙан, сыуалыштарҙан ҡотола аласаҡһығыҙ, тиелә. Йәмғиәттә берҙәмлеккә өлгәшеү, уның ағзаларының татыулығын нығытыу өсөн һәр мосолманға Аллаһтың (Ҡөрьәндең) һүҙенә һәм Бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) сөннәтенә ныҡ тотонорға кәрәк. Сәләмәт һәм көслө йәмғиәт булһын өсөн уның һәр ағзаһы сабырлыҡ, күндәмлек, бирешмәүсәнлек, тоғролоҡ, һүҙендә тороу, ышаныс белдереү кеүек сифаттарға эйә булырға тейеш.

Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьән аша беҙгә өндәшә: "Иманға килеүселәр! Сабыр итегеҙ [Аллаһҡа табыныу һәм тормош ауырлыҡтарына], ныҡ булығыҙ [дошманға ҡаршы алыш барғанда]. Һәм Аллаһтан ҡурҡығыҙ - бәлки, һеҙ уңыш ҡаҙанырһығыҙ".

# ДӨРӨҪ ЙӘШӘҮ ӨСӨН...

## үлемде лә күреү кәрәк

**Кеше үҙ ғүмеренә хәүеф янағанын бер көн эсендә бер нисә тапҡыр тойоуы ихтимал. Тимәк, үлем беҙгә ниндәй кимәлдә яҡын килеүен тоя алабыҙ. Әммә үлем күренешен аныҡ ҡына күҙ алдына килтерә алмайбыҙ, үлем тураһында уйлаһаҡ та, ул уйҙы күңел аша үткәреп тормайбыҙ.**

Аңыбыҙ донъя именлеге хаҡында ҡайғыртыуҙы талап итә. Көндәлек мәшәҡәттәр, әлбиттә, башҡа уйҙарға урын ҡалдырмай. Ләкин үҙ-үҙең менән ҡалыу (көндәлек тормоштан ваҡытлыса айырылыу) мәңгелек тураһында уйларға ярҙам итә. Шулай уҡ үлем тураһында ла уйланырға кәрәк. Кеше үлемдең көндән-көн үҙенә яҡынлашыуын хәтеренә төшөрһә, үҙ ғүмеренә лә башҡасараҡ ҡарай башлай. Теләйме-теләмәйме, ошо ерҙә уҙғарған һәр минутын ҡәҙерләйәсәк. Һәм шул ваҡытта, ни тиклем сәйер яңғырамаһын, үлем йәшәү өсөн иң көслө стимулға әйләнәсәк.

Яҡындарҙың, дуҫтарҙың үлеме - үлем тураһында онотоуға ҡаршы киммәтле дарыу. Юғалтыу ҡайғыһын кисергәндә ул үҙе лә был донъяла мәңге йәшәмәйәсәген аңлай. Кемделер ерләгәндә ул үҙен үлгән кеше урынына ҡуйып ҡарай. Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һөйләгән: "Ҡәбергә ингәс, үлгән кеше уны ерләүселәрҙең аҙымдарының алыҫлашҡан тауышын ишетәсәк. Һуңынан уның менән ҡәбер генә һөйләшәсәк. Ул әйтәсәк: "Кеше! Миңә һин йөл. Һине минең менән ҡурҡытманылармы ни? Миндәге тарлыҡ, еҫ, ҡорттар үә бөжәктәр, шом тураһында һөйләмәнеләрме? Минең өсөн нимә әҙерләнең?"

"Ҡәберлектәргә килеп йөрөгөҙ. Сөнки был мәңгелек хаҡында иҫкә төшөрә. Йыназа уҡығыҙ. Бәлки ул йөрәктәрегеҙҙе маҡсатһыҙ үткәргән ваҡытығыҙ хаҡында һағышландырыр. Гонаһ ҡылыу арҡаһында һағышҡайғыға ингән кешеләр Аллаһ һағы аҫтында", - тигән Бәйғәмбәр. Ҡатыны Ғәйшә Бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) тағы шундай һүҙҙәрен еткергән: "Кемдер яҡынының ҡәберенә килһә, үлгән кеше уны ишетеп ятасаҡ. Килеүсе китергә йыйынғанда, уны изге теләктәр менән оҙатып ҡаласаҡ".

Иманлы кеше өсөн үлем ҡурҡыныс күренеш түгел. Мөьмин йөрәгенә ул яҡты һәм тәбиғи булып күренә, сөнки икенсе донъялағы мәңгелек бәхеткә ҡапҡа аса. Үлеменә дөрөҫ әҙерләнгән кеше уны тыныс һәм Хоҙайға рәхмәт әйтеп ҡабул итәсәк. Бәйғәмбәр (с.ғ.с.), ҡәбер кеше өсөн, нимә ҡылыуына ҡарап, ожмах баҡсаһына йәки тамуҡ упҡынына әүерелеүе мөмкин, тигән. Шулай итеп, кеше ерҙә нисек ғүмер иткән, ҡәберҙә лә Ҡиәмәт көнөнә тиклем шундай тормош кисерәсәк.

# БЕР-БЕРЕГЕҘҘЕҢ...

## хаталарын йәшерегеҙ

**Кешеләргә хата ҡылыу хас. Шунһыҙ йәшәп булмай. Әммә әхлаҡлы кеше үҙ хатаһын таныу менән Аллаһы Тәғәләнән ғәфү үтенә йәки Хоҙайҙан, зыян күргән кеше мине ғәфү итһен, тип һорай.**

Хатаны йәки насар ҡылыҡты төҙәтеү ҙә изгелек һанала. Аллаһ сифаттарының береһе - Саттар. Хоҙай үҙ ҡолдарының хаталарын һәм гонаһтарын йәшерә, башҡаларға күренмәҫлек итә, тигән һүҙ. Кешеләр араһында Хоҙайҙың был сифаты сағылыш тапмаһа, бөтәһе лә бер-береһенең етешһеҙлеген, йәмһеҙ яҡтарын белгән булыр, хурланыу һәм оялыу тойғоһо менән йәшәр ине. Ундай йәмғиәттә проблемалар һәм конфликттар күпкә артығыраҡ булыр ине.

Изге Ҡөрьәндә Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙең насар ҡылыҡтарын йәшереүе хаҡында бер нисә ҡабат әйтелә ("Әл-Әнкәбүт" сүрәһе, 27/7). Айырыуса Хоҙай билдәле бер ыңғай сифаттарға эйә булған кешеләрҙең етешһеҙ яҡтарын башҡаларға күрһәтмәй. Ул сифаттар Ҡөрьән аяттарында телгә алына.

Тәү сиратта - иман. Иман артында һәр ваҡыт "сәлих әмәл" (дөрөҫ ғәмәл) торорға тейеш. Был хаҡта "Мөхәммәт" (47/2) һәм "Әт-Тәғәбүн" (64/9) сүрәләрендә әйтелә. Икенсе мөһим сифат - тәҡүә - гонаһ һаналған күренештәрҙән тыйылыу ("Әз-Зөмәр" сүрәһе, 39/35). Шулай уҡ тәүбәгә килә торған кешеләрҙең хаталары һәм гонаһтары йәшерелә ("Әт-Тәхрим" сүрәһе,66/8).

Тағы бер сифат - ихласлыҡ. Һәр эш-ғәмәлдә ихлас башҡарырға кәрәк, шунһыҙ Хоҙайҙың изгелегенә өлгәшеп булмаҫ ("Әл-Баҡара" сүрәһе, 2/271). Аллаһы Тәғәлә тарафынан ғәфү ителеүгә өлгәшеү өсөн тағы бер мөһим сифат - доға ҡылыу. Хоҙай бөтә мөьминдәрен доға ҡылырға саҡыра ("Әли-Имран" сүрәһе, 3/193).

Ошо сифаттарға эйә булғандарҙың хаталары донъяла ла, әхирәттә лә йәшереләсәк. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), беҙгә билдәле булған кемдеңдер йәмһеҙ яҡтарын башҡаларҙан йәшерергә саҡыра. Кем мосолмандың хатаһын йәшерә, шуның гонаһтарын Хоҙай әхирәттә күрһәтмәй, ти. Һәм, киреһенсә, кем мосолмандың хатаһы өсөн башҡалар алдында оятҡа ҡалдырасаҡ, шул үҙе шундай уҡ хата ҡылмайынса, был донъянан китмәйәсәк, тип әйтә Бәйғәмбәребеҙ. Ошоноң менән ул бер-береңде ғәйепләү, кәмһетеүҙәрҙең ҡыҙғаныс эҙемтәләргә килтереүен күрһәтергә теләгән.

Етешһеҙлектәрһеҙ кеше булмай. Шуға күрә мосолман һәр ваҡыт башҡа кешенең хилаф, йәмһеҙ яҡтарын йәшерергә тейеш.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Утыҙ дүртенсе хат: "Урыҫ тәбиғәте тураһында"

Иркен иректең асылы урыҫ лирик йырҙарында асыҡ билдәләнгән, бигерәк тә юлбаҫарҙар йырында. Ә шулай ҙа уларҙы юлбаҫарҙар түгел, ә азатлыҡты һағынған һәм яҡшы тормош хаҡында хыялланған крәҫтиәндәр сығарған һәм йырламаған. Был юлбаҫарҙар йырҙарында крәҫтиәндәр ғәмһеҙ тормош һәм ҡыйырһытыусыларына яуап биреү тураһында хыяллана.

Урыҫтарҙа батырлыҡ төшөнсәһе - ул саялыҡ, ә саялыҡ - ул иркен хәрәкәттәге батырлыҡ. Ошо батырлыҡты асыҡлау өсөн ул иркенлеккә ҡабатланған. Нығытылған урында батырҙарса ултырып ҡалып ҡына сая булып булмай. "Саялыҡ" һүҙе сит телдәргә бик ауыр тәржемә ителә. Әле XIX быуаттың беренсе яртыһында уҡ хәрәкәтһеҙ батырлыҡты аңламағандар. Грибоедов әҫәрендә, Скалозубтың петлицалағы ордены нимә өсөн булыуы тураһында Фамусовҡа ошолай тип яуап бирҙереп, унан көлә: "Өсөнсө август өсөн; траншеяға төшөп ултырҙыҡ: Уға бант менән бирелгән, миңә муйынға". Көлкөлө, нисек инде "ултырырға", бигерәк тә ҡыбырларлыҡ та булмаған "траншеяға", һәм шуның өсөн хәрби награда алырға мөмкин?

"Батырлыҡ" һүҙенең тамырында ла хәрәкәт бар: "по-двиг", йәғни хәрәкәттә эшләнгән, ниндәйҙер хәрәкәтһеҙ нәмәне урынынан шылдырыу теләге этәргән.

Бала саҡта "Кавказ и Меркурий" компанияһының Волгалағы пароходында урыҫ бейеүен хәтерләйем. Йөк ташыусы бейене (уларҙы крючник тип йөрөтәләр ине). Ул ҡулдарын, аяҡтарын төрлө яҡҡы һелтәп бейене һәм ҡомарланып китеп башынан кәпәсен һыпырып алды, йыйылышып киткән тамашасыларына алыҫҡа ырғытып ебәрҙе һәм ҡысҡырҙы: "Өҙөләм! Өҙөләм! Ой, өҙөләм!" Ул тәне менән мөмкин тиклем күберәк урынды ялмап алырға тырышты.

Урыҫ лирик оҙон йырҙары - уларҙа ла киңлекте һағыныу тойғоһо бар. Һәм ул тышта, иркендә, баҫыуҙа яҡшыраҡ йырлана.

Ҡыңғырау зыңғыры мөмкин тиклем алыҫҡа ишетелергә тейеш булған. Ҡыңғырау манараһына яңыһын элгән саҡта тауышы нисә саҡрымға ишетелеүен тикшерер өсөн махсус рәүештә кешеләрҙе тыңлап ҡарарға ебәргәндәр.

Шәп йөрөү ҙә шул уҡ киңлеккә ынтылыш ул.

Иркенлек һәм киңлеккә айырым бер мөнәсәбәт былиналарҙа ла күҙәтелә. Мәҫәлән, Микула Селянинович баҫыуҙың бер осонан икенсеһенә һабан артынан бара. Вольга уның артынан өс көн буйы йәш Бохара айғырҙарында ҡыуа барырға мәжбүр була.

Былиналарҙың башланғыс һүҙҙәрендә урыҫ тәбиғәте тураһында һәм баһадирҙарҙың теләктәрендә лә иркенлекте тойорға була.

Иркенлеккә ҡарап һоҡланыу боронғо урыҫ әҙәбиәтендә лә бар - Башланғыс йылъяҙмала, "Игорь полкы тураһында һүҙ", "Русь еренең һәләкәте тураһында һүҙ", "Александр Невский йәшәйеше"ндә һәм XI-XIII быуаттарҙағы боронғо осорҙоң барлыҡ әҫәрҙәрендә, тиерлек. "Игорь полкы тураһындағы һүҙ"ҙә кеүек барыһында ла ваҡиғалар йә ҙур киңлектәрҙә үҙ эсенә ала, йә "Александр Невский йәшәйеше"ндә кеүек алыҫ илдәрҙә яуаптар табып, ҙур киңлектәрҙә бара. Урыҫ мәҙәниәте борондан ирекләк һәм киңлекте кеше өсөн бөйөк эстетик һәм этик яҡшылыҡ тип иҫәпләгән.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

***✓ Беҙ әлегә тиклем Ватикан китапханаһында латин телендә яҙылған сығанаҡтарҙы өйрәнә алыуҙан мәхрүмбеҙ. Францияла иуезиттар ордены тарихы менән бәйле сығанаҡтарҙа Рәсәй тураһында мәғлүмәттәр булыуы билдәле.***



ӨФӨ БАШҠОРТО

# ҺЫЙЫНДЫРЫУСЫ ҺӘМ БЕРЛӘШТЕРЕҮСЕ...

## рухи йәнтөйәгебеҙ булған ландшафт тураһында

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Күренекле башҡорт этнологы, краниолог Ринат Мөхәмәт улы Йосопов башҡорттарҙың антропологик типтарын бик ентекләп өйрәнеп, объектив ғилми һығымталар эшләгәйне. Ошо ғалимыбыҙ билдәләүенсә, халҡыбыҙ составында 4 антропологик тип булыуы асыҡланған: улар субурал, понтий, аҡһыл европеоид, көньяҡ себер типтары тип атала. Ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?**

- Ринат ағай Йосоповтың һығымталары кире ҡаҡҡыһыҙ, улар археология фәненең асыштары менән дә раҫлана. Көньяҡ Уралда төрлө дәүерҙәрҙә йәшәгән ырыу-ҡәбиләләрҙе, урындағы топонимдар менән бәйләп, билдәле бер мәҙәниәт итеп ҡарайҙар. Ошо мәҙәниәттәрҙән ҡалған артефакттар уларҙың башҡа Азия ҡәүемдәре менән бик боронғо бәйләнештәре булыуына дәлил. Башҡортостан буйлап экспедицияларҙа йөрөгәндә ҡыҙыҡлы ғына микротопонимдар осрай ине: мәҫәлән, "Ҡаҙаҡ ҡасҡан", "Үзбәк һырты", "Ҡалмыҡ һырты" һ.б. Был ырыуҙар этнонимияһында ла сағылыш тапҡан: ҡырғыҙ, ҡыпсаҡ, унлар, һарт ырыуҙары, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, ҡалмыҡ, төркмән, меркет, найман, ҡаңлы, ҡырғыҙ, нуғай, үзбәк аралары (аймаҡтары, түбәләре).

***Ландшафт һәм этногенез бәйләнештәрен киңерәк, тәрәнерәк масштабта ҡарау фарыз. Тарихи Башҡортостанда берҙәм этнос булып ойошҡан халҡыбыҙҙы Евразия кимәлендә ҡарарға тейешбеҙ. Киң ҡарашлы ғалим-этнолог Ринат Йосопов башҡорт халҡының этник составында һинд-иран компоненты булыуын объектив рәүештә дәлилләй алды. Беҙ әлегәсә ошо ғилми фактты тейешлесә баһалап еткермәйбеҙ.***

Совет историографияһында СССР, хәҙерге Рәсәй территорияһында цивилизация үҙәктәре сифатында Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйы, Алтай тарафтары ғына ҡарала ине. Башҡортостан археологы Анатолий Пшеничнюк етәкселегендәге экспедиция 1987-1988 йылдарҙа Ырымбур өлкәһенең Илек районында Филиппов ҡурғандарын ҡаҙып асҡас, иртә сарматтарҙың 600-гә яҡын алтын-көмөш предметтары табыла. Был табыштар донъя кимәлендәге сенсацияға тиң булды. 2001 - 2003 йылдарҙа беҙҙең Археология һәм этнография музейы һәм Эрмитаж ойошторған "Евразияның алтын боландары" тип исемләнгән археологик күргәҙмә Санкт-Петербургта, Мәскәүҙә, Нью-Йоркта, Миланда күрһәтелде. Әйтергә кәрәк, Рәсәйҙә, тотош Евразияла ошо ғәйәт бай археологик коллекцияға тиң булған башҡа бер боронғо ҡомартҡы комплексы юҡ.

**Көньяҡ Уралда археологтар тапҡан артефакттар Евразияның көньяҡ илдәре халыҡтары мәҙәниәте менән тығыҙ бәйләнештәр булыуын дәлилләй аламы?**

- Бик күп ҡаҙылма табылдыҡтар араһында Урта Азия халыҡтарына хас предметтар, шулай уҡ Ирандың сәсәнидтар эпохаһына ҡараған алтын-көмөш әйберҙәр булыуы ошоно раҫлай. Әммә мин бына нимәгә иғтибар итеүҙе мотлаҡ тиер инем: ***скиф-сармат ҡомартҡыларында табылған әйберҙәр урындағы алтындан ҡойолоп эшләнгән, тимәк, бында металлургия менән дә шөғөлләнгәндәр. Күренекле археолог Н.А. Мәжитов үҙенең ғилми хеҙмәттәрендә Көньяҡ Уралдың скиф-сармат донъяһы үҙәктәренең береһе булыуын иҫбатланы.***

Мәҙәни, иҡтисади бәйләнештәрҙән тыш, беҙҙе Евразияның төрки халыҡтары менән телдәребеҙ яҡынлығы берләштерә. Мәҫәлән, шул уҡ нуғайҙар, балҡарҙар, ҡумыҡтар, ҡәрәсәйҙәр менән аралашҡанда тәржемәсе кәрәкмәй. 2 йыллыҡ әрме хеҙмәтем Ҡарәсәй-Черкес автоном округында үтте, частан сығып йөрөгән саҡтарҙа, ҡарәсәй ҡарттары менән осрашып, аралаша торғайным. Мин башҡортса, улар үҙ телендә һөйләй, әммә бер-беребеҙҙе яҡшы аңлайбыҙ.

Йәнә, ландшафт мәсьәләһенә килгәндә, таулы зонала, бейеклек кимәленә ҡарап, ул үҙгәрә бара. Беҙҙең Башҡортостандың бейегерәк тауҙарында барса географик пояҫтарға хас ландшафт үҙенсәлектәрен күреп, өйрәнеп була. Ландшафтҡа ярашлы, үҫемлектәр һәм хайуандар төрлөлөгө хасил була. Шуға күрә Үҙәк Рәсәй, Ҡаҙағстан студенттары географик зоналарҙы өйрәнеү маҡсатында беҙгә практикаға йыш килә. Бына беҙ Владимир Далде филолог, һүҙлек төҙөүсе булараҡ beləbeҙ, әммә ул Санкт-Петербургтағы Император академияһына биология фәне буйынса ағза итеп һайлана: Даль Тарихи Башҡортостандың үҫемлектәр донъяһын да бик ентекләп өйрәнгән.

Хәҙерге заманда тарих фәне дисциплина-ара гуманитар фәнгә әүерелде, тип әйтергә була. Археология, палеонтология, этнология, геология, география, биология (бигерәк тә ландшафтарҙы өйрәнеү), филология, радиометрия, генетика кеүек фәндәрҙең заманса ҡаҙаныштарын белеү һәм ҡулланыу ғалим-тарихсы өсөн бик мөһим.

Республикабыҙҙа һуңғы ваҡытта Башҡортостан фәнен Евразия кимәленә сығарыу өсөн байтаҡ эштәр башҡарылды. Өфөлә Евразия фәнни-белем биреү үҙәге асылыу ошоға дәлил. Ошо юҫыҡта ғәмәлгә ашырылған эштәрҙән яңы геопарктар асыу, Шүлгәнташта һәм Турахан кәшәнәһе янында тарих, археология, этнология, биология, йүнәлештәрен сағылдырған музей комплестарын булдырыу бик мөһим һәм фәһемле. Алдағы 5 йылда Евразия фәнни-белем биреү үҙәге сиктәрендә яңы гуманитар тикшеренеүҙәр күҙаллана. Яҡын киләсәктә Башҡортостан Евразия илдәре ғалимдарын, студенттарын, башҡа бер зыялыларҙы үҙенә тартып тороусы, ылыҡтырыусы ғилми-мәҙәни үҙәккә әйләнәсәк тип, бик ышаныслы рәүештә әйтергә була. Бының өсөн беҙҙә бөтәһе лә бар: уникаль ландшафт, иҫ киткес тәбиғәт объекттары, геология, археология, этнология, фольклористика, генетика һәм башҡа фәндәр буйынса өлгәшелгән ҡаҙаныштар, музей комплекстары. Йәнә, Башҡортостан төрки, фин-уғыр, Көнсығыш славян халыҡтарының матди һәм мәҙәни мираҫын һаҡлаусы террритория булараҡ та халыҡ-ара бәйләнештәрҙе нығытыу һәм үҫтереү йәһәтенән күп мөмкинлектәргә эйә.

**Башҡортостандың гуманитар фәндәре өлкәһен Евразия масштабына, донъя кимәленә сығарыу юлында ниндәй проблемалар бар?**

- Иң тәүге проблема - әлегә киң һәм тәрән белемле, яңы технологиялар менән эш итә алыусы йәш быуын ғалимдарының аҙыраҡ булыуы. 90-сы йылдарҙағы өҙөклөктән һуң фәнгә килеүселәр күбәйә бирҙе, әммә был проблеманы ваҡытында хәл итеү кәрәк.

Икенсенән, беҙҙең ғалимдарыбыҙ Тарихи Башҡортостан мөхитенән ситкәрәк сығып эшләп бармай әле. Ә Ҡаҙағстанда ошо йәһәттән күп нәмә ғәмәлгә ашырыла: уларҙың йәш ғалимдары сит ил архивтарында ҡаҙаҡтарға ҡағылышлы материалдарҙы эҙләп таба һәм өйрәнә, был гуманитар фәндәр өсөн үтә мөһим.

Өсөнсөнән, беҙҙең сит ил телдәрен яҡшы үҙләштергән ғалимдарыбыҙ бик аҙ. Фән өлкәһен үҙ итеүсе йәштәребеҙҙе әҙерләүҙә ошо мәсьәләгә етди иғтибар кәрәк. Мәҫәлән, беҙ әлегә тиклем Ватикан китапханаһында латин телендә яҙылған сығанаҡтарҙы өйрәнә алыуҙан мәхрүмбеҙ. Францияла иуезиттар ордены тарихы менән бәйле сығанаҡтарҙа Рәсәй тураһында мәғлүмәттәр булыуы билдәле. Ҡытай, фарсы, ғәрәп телдәрендәге сығанаҡтарҙа беҙгә билдәһеҙ материалдар булыуы мөмкин.

**Һеҙҙең картография өлкәһенә ҡараған хеҙмәттәрегеҙ бик күптәрҙә ҡыҙыҡһыныу уята. Ошо хаҡта ла әйтеп үтһәгеҙ ине.**

- Башҡорттар йәшәгән территория сағылдырылған Урта быуаттар карталары тураһында күп яҙылды, улар интернет селтәрендә лә бар. Был карталарҙа халҡыбыҙ йәшәгән ер объектив рәүештә күрһәтелгән, быны гидрография ла күрһәтеп тора. Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған урындағы ярымутрауҙа төшөрөлгән ҡала символы янындағы яҙыу "Paskerti" тип уҡыла, Пициганиҙар картаһында төшөрөлгән Урал тауҙары янында ла шул уҡ һүҙ бар. Тимәк, был һүҙҙең башҡорттар билгән территорияны ла, уларҙың Алтын Урҙа заманындағы ҡалаһын - административ һәм һөнәри үҙәк исемен дә белдергән, тип фараз итергә була.

Йәнә, 1737 йылда Санкт-Петербургта, Император академияһында француз картографтары Рәсәйҙең географик атласын баҫып сығара, ул үҫмер балаларға тәғәйенләнгән. Был картала ла әлеге Өфө ярымутрауындағы ҡала "Баскирь" тип билдәләнгән. Тимәк, Европаның яңыраҡ осорҙа йәшәгән картографтары урта быуаттарҙағы карталарҙы яҡшы белгән һәм уларға тиклемге картография традицияһын дауам иткән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәсебеҙ, икенсе быуын ҡала башҡорто Айбулат Вәли улын, киң ҡарашлы, тәрән фекерле, мәҙәниәтле бер шәхес булараҡ, хәҙерге башҡорт йәштәре өсөн өлгө итеп ҡуйырға була. Ул, объектив факторҙарға таянып, Урта быуаттарҙа баҫылып сыҡҡан географик карталарҙы ентекләп тикшереп, Көньяҡ Уралдың географияһы, тәбиғи мөхите менән халҡыбыҙҙың тарихи этногенезы араһында тығыҙ бәйләнеш булыуын фәнни яҡтан нигеҙләүсе географ һәм этнолог. Уға ғилми эшмәкәрлегендә яңы ҡаҙаныштар теләп ҡалабыҙ.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**18 апрель "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев, А. Абушахманов), музыкаль комедия. 12+

**23 һәм 24 апрель "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А. Абушахманов), кинодрама. 12+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**18 апрель "Алые паруса"** (А. Грин, М. Күлбаев), романтик фантазия. 12+

**22 апрель "Чиполлино"** (Д. Родари, Р. Хәҡимов), мажаралар. 3+

**23 апрель "Аладдин"** (И. Казакова, Р. Хәҡимов). 6+

**24 апрель "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев, В. Виткович, М. Күлбаев), комедия. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**18 һәм 19 апрель "Почему весна красна?"** (В.Щербакова). 18:00 һәм 14:00. 0+

**19 апрель "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 12:00 һәм 15:00. 0+

**20 апрель "Терем-теремок"** (Д. Гараева, В. Щербакова, А. Волков). 12:00 һәм 15:00. 0+

**20 апрель "Коза - дереза"** (М.Супонин). 14:00. 0+

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**18 апрель** БР Милли халыҡ инструменттары оркестры **"Rafstyle"** барабансылары шоуы. 12+

**20 апрель Илья Бешевли,** "INRU" альбомының презентацияһы. 16+

**21 апрель "Фламенко кисәһе"** халыҡ-ара конкурстар лауреаттары Анастасия Бахтияри (бейеү) һәм Иван Доржиев (гитара) концерты. 16+

**22 апрель "Сәйҙә Ильясова дуҫтарын йыя"** ижад кисәһе. 12+

**23 апрель "Бах Йыһаны"**, Алексей Балашов (гобой), Эльвира Ямалова (орган, клавесин). Камера оркестры концерты. 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**19 апрель "Бер ғүмер етмәй икән..."** (М. Ҡунафин, Р. Хәҡимов), ватансылыҡ тураһында драматик поэма. 16+

**22 апрель "А я несу тебе цветы"** Владимир Ждамировтың концерты. 16+

**24 апрель "Ҡараул! Атай өйләнә"** (Б. Рацер, М. Күлбаев). 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**18 апрель "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия. 12+

**19 апрель "Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 12+

**24 апрель "Рәсәй-Әсәнең ҡаһарман улдары!"** XXXIV концерт миҙгелен ябыу

### БР Милли музейы

**18 апрель "Этно стилендә бер көн"** музей акцияһы. 11:00 - 17:00. 6+

**19 апрель "Йәшел шәмбе"** экологик акцияһы. 10:00 - 15:00. 6+

**19 апрель "Ғаилә шәмбеһе"** программаһы сиктәрендә "Ҡурсаулыҡ тәбиғәте донъяһы". 15:00. 6+

**23 апрель "Ғаилә шаршамбыһы"** программаһы сиктәрендә "Ҡурсаулыҡ тәбиғәте донъяһы". 14:00. 6+

*АФАРИН!*

# УЙЫНДАР...

## зирәктәр һәм телһөйәрҙәр өсөн




**Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының "Технопарк" майҙансығында өҫтәл уйындарының исем туйы үтте.**

Башҡорт телендәге был уйындар Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды тарафынан "Хазина" коммерцияға ҡарамаған ойошма менән берлектә төрлө йәштәге балалар өсөн сығарылған. Улар әлегә дүртәү: "Бишбармаҡ" менән "Бесәй, сәй, айыу, бал, май" уйындары, нигеҙҙә, мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн тәғәйенләнһә, "Зирәк" менән "Әлләсе" уйындарын өлкәнерәк йәштәге балалар, ололар ҙа уйнай ала. Уйындар БР Башлығы грантына эшләнә. Фонд директоры Гөлназ Йосопова белдереүенсә, әлегә уйындар балалар баҡсаларына, мәктәптәргә таратылған, төрлө урындарҙа тикшереү үткән, шулай уҡ студенттар, өлкән йәштәге балалар менән дә уйнатылып ҡаралған. Бары тик ыңғай фекерҙәр алынып, артабан да ошо юҫыҡта эште дауам итеү хаҡында уйлайҙар. Өҫтәл уйындарының проект авторы Г.Исхаҡова әйтеүенсә: "Тел өйрәнеүҙә бик һөҙөмтәле инструмент булыуын иҫәпкә алып, улар менән һәр кемде туған телгә еңел генә йәлеп итеү мөмкинлеген белеп, беҙ ошо өҫтәл уйындары эшләүҙе дауам итәбеҙ".

Өҫтәл уйындарының исем туйы менән ҡотларға килгән "Тамыр" балалар телеканалы директоры Гөлназ Ҡолһарина, рәхмәт белдереп, Фондтың һәр саҡ заманса форматтарҙа эшләүен билдәләне. БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультеты деканы, филология фәндәре докторы Ләйлә Хөсәйенова был уйындарҙың үҙҙәренең студенттары тарафынан уйналыуын, телде өйрәнеү, үҫтереү йәһәтенән бик мөһим проект икәнен, киләсәктә тел өйрәнеү-өйрәтеү методикаһында ошо уйындарҙы ла ҡулланыу отошло булыу ихтималлығын билдәләне.

Өҫтәл уйындарынан "Әлләсе" тигәнен уйнар өсөн башҡорт телен бик яҡшы белеү мотлаҡ, сөнки унда тел байлығы талап ителә. Был уйынға 1400 һүҙ индерелгән, унда һирәк осрай торған, шулай уҡ ҡайһы бер диалект һүҙҙәр ҙә бар. Был уйында һәр уйынсы үҙенең һүҙ байлығын тикшерә, шулай уҡ тулыландыра ала. Ә "Бесәй, сәй, айыу, бал, май" уйыны Европала иң популяр уйын "Тако, кот, коза, сыр, пицца" уйынының аналогы итеп алынған. Был уйынды хәреф танымаған балалар ҙа уйнай ала. Уны башҡорт телендә һәм инглиз телендә лә уйнарға мөмкин. "Зирәк" ҡатмарлыраҡ уйын, унда һорауҙар бирелә һәм шул һорауҙарға аныҡ бер хәрефтән башланған яуап бирергә кәрәк. Уйындың исеменә есеме тура килә, уйнаусыларҙан зирәклек талап ителә. "Бишбармаҡ" уйынында карточкалар башҡорт һәм инглиз телендә бирелгән, уйнағанда етеҙлек, сослоҡ талап ителә.

Башҡорт телен өйрәнеү һәм үҫтереү йәһәтенән тормошҡа ашырылған дүрт уйынды ла тик балаларға йәки өлкәндәргә тип аныҡ тәғәйенләмәҫкә, ғаилә уйындары, тип әйткәндә лә дөрөҫ булыр. Сөнки уйындарҙы ғаилә менән уйнау күңеллерәк тә, файҙалыраҡ та. Уйын мейе эшмәкәрлегенә, телмәр үҫешенә булышлыҡ итә, һүҙлек запаһын байыта. Был хаҡта сараға килгән ата-әсәләр, шулай уҡ балалар баҡсалары тәрбиәселәре, уҡытыусылар ҙа белдерҙе

**Зөлфирә ҠАРАҒУЖИНА.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

# ТӘРБИӘЛЕ КЕШЕ...

## ҡиммәтле аҡылға эйә

- Елдәр аяҡтан йыҡһа ла, ҡылыҡтарыбыҙ йыҡмаһын.
- Эсендә ни - тышында шул, уйында ни - телендә шул.
- Үҙең дә аҙағынаса атҡармаҫтай эште башҡаларға таҡма.
- Әсә илатҡанды һыу йотор, ата рәнйеткәнде ер убыр, изгелек эшләгән күккә осор - кәрәкләһен үҙең һайла.
- Яуызлыҡ эшләгән закон язаһынан ҡотолһа ла кеше нәфрәтенән тайшанып ҡала алмай.
- Ҡағыҙ - ул күтәрелгән ҡылысты ҡынға һалырға мәжбүр иткән, тамырҙарын тәрәнгә ебәргән имәндәй түрәләрҙе лә урындарынан осора торғ ан көс.
- Үҙ һүҙле ҡара тырыш, тиҫкәре кеше генә бар ғәләмде болғарға оҫта.
- Ҡарышҡыр утта яныр, ыңғайҙар күккә ашыр.
- Һәр кем үҙ һурпаһында бешә, сит ҡалаҡҡа урын юҡ.
- Тәрбиәле кеше ҡиммәтле аҡылға эйә - уның менән һөйләшеү үҙе бер ғүмер.
- Үҙенде хурлаусыға күп һүҙҙәр яуҙырма, тәрән мәғәнәле, әсе һүҙле бер һөйләмде һип өҫтөнә.
- Алаһы әйберенде яҡшылап ҡарап ал, алыусының ҡулына тоттор - икеһе лә әҙәплелек.
- Дуҫҡа барһаң, әрләп-өйрәтеп һыу эсерер, дошманға барһаң, маҡтап-ҡуптап ыу эсерер.
- Ҡото осҡанға ҡот ҡойҙор, ете ҡоҙоҡ һыуын эсер.
- Кеше бөйөклөккә лә менеүсе, ҡурҡыныс түбәнлеккә лә тәгәрәүсе, замандың ҡаты һынауҙарына ла бирешмәүсе йән эйәһе икәнен онотмайыҡ.
- Ҡаты иҫкән ел аяҡтан йыҡһа йыҡһын, үҙ телең, үҙ ҡылығың ғына йыҡмаһын.

**АҒИНӘЙ.**

*ТЕЛҺӨЙӘР*

# АШТЫ ҺӘПӘЙТЕП ҠУЙҘЫ

**Һирәк яңғыраған һүҙҙәрҙе һәргиз ҡулланыу телмәрҙе байытыу-үҫтереүҙә файҙа ғына.**

**Һәргиз.** "Һәр ваҡыт", "гел", "даими" тигән һүҙҙәргә иш. *Һуңғы арала һәргиз күрешеп торабыҙ. Яңылыҡтарҙы һәргиз күҙәтәбеҙ.*

**Һәптеркә.** "Һәптеркә - кейемгә тегелгән киң балитәк, руссаһы - широкая оборка. *Башҡорт ҡатын-ҡыҙы борон күберәге һәптеркәле күлдәк кейгән. Алъяпҡыстар ҙа һәптеркә менән биҙәлгән.*

**Һәпәйтеү.** "Тиҙ ашау" тигән мәғәнәлә ҡулланылған һүҙ. *Оҙаҡ уйнағандан һуң бала ашты һәпәйтеп тә ҡуйҙы. Тәмле бутҡаны ла һәпәйтмәү мөмкин түгел.*

**Һәргәү.** Һәргәү - ағас ҡайырын алыу өсөн ҡорал. *Уңайлы һәргәү. Имән ҡайырын һәргәү менән һыҙырыу.*

**Һәрпәк.** Шүмән. Ә утын яра торған ҡалын балтаны халыҡ электән "шүмән" тип йөрөткән. Был эш ҡоралының тағы бер атамаһы - "һәрпәк". *Һәрпәкты яңынан һапланыҡ. Егеттәр утынды бысып, шүмән менән ярып, өйөп тә ҡуйҙы.*

**Шулай итеп, "Киске Өфө"нө һәргиз уҡып барысылар туған телебеҙҙең һүҙ байлығы менән артабан да һәргиз танышыр.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠЫЛҺЫҘҘАН МАҠТАЛҒАНСЫ...

## аҡыллынан бер тиргәл

Бер ҡатындың ире үлһә, алтмыш ҡатын ҡайғырыр, бер ирҙең ҡатыны үлһә, алтмыш ҡатын ҡыуаныр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бәхетле осраҡлыҡтарға бәйле кешене бер ваҡытта ла бәхетле тип иҫәпләмә.

**(Луций Сенека).**

Мөхәббәтһеҙ өйләнмә, сәбәпһеҙ ғашиҡ та булма.

**(Аноним).**

Ғәфү итә белеү - азатлыҡҡа һәм артабан йәшәргә мөмкинлек ул.

**(Ханна Арендт).**

Донъяла мәле килеп еткән, өлгөргән идеянан да ҡаҡшамаҫыраҡ бер ни ҙә юҡ.

**(Виктор Гюго).**

Кешенең тәғәйенләнеше ниҙә? Кеше булыуҙа!

**(Станислав Лец).**

Тәмле булған урында татлыны ла табырһың.

**(Петроний).**

Йәшәлгән йылдар ғына аҡыл килтермәй, ҡайһы саҡта ул үҙенән-үҙе килеп тыуа.

**(Елена Гарро).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Көтөүсе бер кешене үпкәләтә. Ә уныһы көтөүсегә бик ныҡ асыулана һәм унан үс алырға ҡарар итә. Ул был көтөүсенең халыҡ йәшәгән урындан алыҫта көтөү көткәнен, уның менән берәй бәлә-ҡаза булһа, уға ярҙамға килеүсе булмаҫын яҡшы аңлай. Шуға ла был кеше көтөүсе өсөн соҡор ҡаҙырға була. Ҡараңғы төшөп, төн булғас, ул үҙенең яуыз уйын тормошҡа ашырыуға тотона. Үҙе ҡаҙа, үҙе көтөүсенең соҡорға төшөп, ҡайһылыр ағзаһын имгәтерен, йә һәләк булырын, бик тә булмаһа, был соҡорға малдары осоп төшөрөн күҙ алдына килтереп, кинәнес кисерә. Кинәнестән, үс ҡандырыуҙан дәртләнеп, тағы ла ҡыҙыуыраҡ һәм тәрәнгәрәк төшөп ҡаҙа башлай. Бына таң һарыһы беленә. Шунда был кеше ҡапыл теге татлы уйҙарынан арына һәм... аптырап китә: ул соҡорҙо шул тиклем тәрән итеп ҡаҙыған һәм унан кемдеңдер ярҙамынан тыш сығыу мөмкин түгел...**

**Шуның өсөн, уйындан ғына булһа ла башҡаларға соҡор ҡаҙыр алдынан иҫендә тот: соҡор ҡаҙған ваҡытта барыбер иң тәүҙә уға үҙеңә төшөргә тура киләсәк бит, ә сыға алырһыңмы һуң?.."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25015

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррират:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
17 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 738